ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

27-2
декабрь - ғинуар
(аҡъюлай - һыуығай)
2024
№51 (1144)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ һАНДА УҠЫҒЫҘ:

## Йылан аяғын киҫерҙәй итеп...

йәшәйек, эшләйек, ауырлыҡтарға бирешмәйек!



2-3

## Ирекмәнлегем...

тормошомдағы иң мәғәнәле осором ул



6

## Заман шауҡымына эйәрмәйбеҙ...

үҙебеҙ булып ҡаласаҡбыҙ



8-9

## Мөғжизәле итәйек көнөбөҙҙө...



10

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

***Ҡото менән килһен Яңы йыл!** Бәхет ҡошо ла, Сәләмәтлек тигән ҡорос арғымаҡ та, Мөхәббәт тигән серле хис-тойғо ла, Уңыш ғали йәнәптәре лә, "Донъябыҙ тыныс" тигән көсөл һиллеге лә, "Минең балаларым" тигән кинәнес тә, асмандарға аштырыр Хыял-ҡанат та - барыһы ла мөғжизәләй көтөп торһон һеҙҙе яңы 2025 йыл тупһаһында, мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!*

ҠОТЛАЙБЫҘ!

## Төклө аяҡ менән кил!

*Эй, яңы йыл! Тағы киләһеңме?*
*Әллә нишләп бигерәк йышланың?*
*Әллә нишләп хәҙер ваҡыт елә,*
*Бәрәкәте юҡ шул көн, айҙың.*

*Аңлап өлгөрмәйһең - тәүлек үтә,*
*Арлы-бирле итһәң - аҙна юҡ,*
*Тик пенсия килә һағындырып,*
*Көтмәҫ инең - алтын ҡаҙна юҡ.*

*Бәрәкәте юҡ шул сәғәттәрҙең,*
*Шәберәк әйләнәме Ер шары?*
*Әллә, тимен, үҙем олоғайып,*
*Ығышланып барам ни бары?*

*Сәбәләнеп донъя ҡыуыу үтте,*
*Йүгермәйем көҫәп мал-данды,*
*Етер инде! Тиҫтәләрсә йылдар*
*Былай ҙа бит күңелем алданды.*

*Был донъяны барыбер ҡыуып тотоп*
*Булмай икән уға атланып,*
*Ҡәнәғәтмен бөгөн булғанына,*
*Һәр таңымды көтәм шатланып.*

*Һаулыҡ булһын! Донъя имен торһон!*
*Балаларым булһын бәхетле!*
*Юлдағылар имен-һау йөрөһөн -*
*Нимә кәрәк тағын шул хәтле?*

*Эй, яңы йыл! Ҡөҙрәтеңдән килһә,*
*Алып килсе илгә тыныслыҡ!*
*Яуҙа йөрөгән улдарыбыҙ өсөн*
*Һәр бер көнөң айға торошлоҡ.*

*Сирләгәндәр һауыҡһындар ине,*
*Һағышлылар зарын онотһон,*
*Ғүмер буйы бушҡа алданғандар*
*Лотерея алып, бер отһон!*

*... Эй, яңы йыл! Тағы ябаһыңмы*
*Ғүмер китабымдың бер битен?*
*Ни күрһәм дә, илем-халҡым менән,*
*Улар менән мин дә бер бөтөн!*

*Тыныслыҡ бир илгә, байлыҡ, муллыҡ!*
*Башлыҡтарға иман, аҡыл бир!*
*Халҡыма бир рәхәт, етеш тормош,*
*Һәр тырышлыҡ өсөн хаҡын бир!*

*Ғаиләләр тулы, теүәл булһын,*
*Шатландырып үҫһен балалар,*
*Яңы йорттар күпләп ҡалҡып сыҡһын,*
*Гөрләп торһон ауыл-ҡалалар!*

*Эй, яңы йыл! Төклө аяҡ менән*
*Изге эштәр менән генә кил!*
*Бөтә донъяларҙа иң тынысы,*
*Иң бөйөгө булһын беҙҙең ил!*

**Фирүзә АБДУЛЛИНА.**




ӘЙҘӘГЕҘ...

## АҠ ҠАҒЫҘҘАН ДА УҠЫҒЫҘ!

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ ҡулына 2024 йылдың һуңғы һанын тотторабыҙ - 2002 йылдан башланған, 22 йыл буйы ижад ителгән, 1144-се һанды.**

Арағыҙҙа ошо йылдар буйы "Киске Өфө"нән айырылмағандар ҙа бар, беләбеҙ - иң оло рәхмәтебеҙ уларға. Әле булһа, "Киске Өфө" баш ҡалала йәшәүселәр өсөн генәлер ул, тип икеләнгәндәр ҙә бихисап, әлбиттә. Ундайҙарға төбәп, тағы әйтеп ҡуяйыҡ: "Киске Өфө" тигән аҙналыҡ гәзитте республиканың хатта төпкөл генә ауылдарында ла алдыралар, уҡыйҙар.

Ни өсөн уҡырға кәрәк һуң был гәзитте, тип һорау бирер кемдер? Эйе, гәзитебеҙ биттәрендә ябай ғына итеп, һәр кем аңларлыҡ итеп, фәлсәфә, аҡыл һатабыҙ. Юғарыраҡ ҡарап фекерләргә өйрәтһәк, әлбиттә, ул кинәйә, ишара, фәлсәфәне ҡабул итерҙәр тип ышанабыҙ. Замананың бороломтары күп, һин ниндәй юл сатына бороларға тейешһең, нисек йәшәргә, нисек уйларға тейешһең - ошо хаҡта уйланабыҙ һәм уйландырырға тырышабыҙ уҡыусыларыбыҙҙы ла. Уларҙың илдә, донъяла булған ваҡиғаларға дөрөҫ баһа бирә белеү-белмәүе беҙҙән дә тора икәнен дә иҫтән сығармайбыҙ. "Йөҙ мең ҡоралға ҡарағанда, мин өс бөртөк гәзиттән нығыраҡ ҡурҡам", - тигәнме әле Наполеон I. Был һүҙҙәрҙең бигерәк тә актуаль сағы бөгөн. Әле ошондай "һүҙ ҡоралы" тантана иткән заман. Уны донъя кимәлендәге сәйәсәттә бигерәк тә киң ҡулланалар. Тимәк, ошо "ҡорал"ды беҙ бөгөн халҡыбыҙҙың аңын уятыу, рухын күтәреү, иманлы итеү, уларҙы үҙ яҙмышын үҙ ҡулына алдырыу, ерҙә лайыҡлы көн итергә ынтылыш тыуҙырыу, меңәрләгән һорауҙарына яуап биреү өсөн дә файҙаланырға тейешбеҙ.

Эйе, хәҙер кеше шул тиклем күпте белә, әммә уларҙа аҙағынаса аң менән ҡабул ителмәгән "сүпле" мәғлүмәттәр ҙә етерлек. "Сүпле" мәғлүмәттәр тигәне - ул төрлө икеләнеүҙәр, шикләнеүҙәр, үпкәләүҙәр, үсәүҙәр, үсегеүҙәр, ҡурҡыу-шөбһәләнеүҙәр, көнләшеүҙәр икәнен аңлағанһығыҙҙыр. Уларҙы башыбыҙҙан, күңелебеҙҙән алып ташлайыҡ та, үҙебеҙҙең мейене яҡшы һәм яҡты тормошҡа, күркәм мөнәсәбәттәргә көйләйек, бер-беребеҙҙе ишетергә өйрәнәйек, тип тә саҡырабыҙ. Асыҡ аңыбыҙҙы эшкә егеп, үҙебеҙ һығымталар яһарға өйрәнһәк, әлбиттә, алдыбыҙға заман ҡуйған теләһә ниндәй фәлсәфәне аңлай алыр инек, теләһә ниндәй ҡаршылыҡты еңер сараһын табыр инек. "Киске Өфө"нөң Яңы йыл теләге итеп ҡабул итегеҙ был кәңәштәрҙе. Аҡ ҡағыҙға яҙылғанға күңелегеҙҙе япмағыҙ, милләттәштәр! Бергә булайыҡ!

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

12+

✓ *Кешеләр аңында яҙ башы - яңы йыл башы - яҙғы ерҙең сираттағы йәнләнеше, яңырышы рәүешендә сағылыш тапҡан. Тап шуның өсөн дә боронғо халыҡтар яңы йыл башын март айында байрам иткән.*



БЫЛ АЙҘА...

**Яңы йыл менән, дуҫтар! Ер йөҙөнә егерме беренсе быуаттың тәүге сирек өлөшөн тамамлаусы 2025 йыл - Йәшел Ағас Йылан йылы тыуа. Көнсығыш календары фараздары беҙҙең ысынбарлыҡ өсөн уға табыныу һәм дә ҡулланыу нигеҙләмәһе булып тормаһа ла, яҡшыға һәр саҡ ышанғы килә бит. Ә йыл йондоҙнамәһендә ундай ыңғай һәм ымһындырғыс фараздар һәр саҡ була. Ана бит нимә ти астролог Юлия Рольник: "Йылан үсеш, үҙгәреш, уңыш һәм сәскә атыу символы ул. Бөтөн донъя күләмендә Йәшел ағас ҡеүәте тамырынан үҙгәрештәргә, яңы хәл иткес ҡарарҙар ҡабул итеүгә булышлыҡ итәсәк. Көнсығыш календарында аҡыллы һәм һығылмалы тип танылған Йылан йылында халыҡ-ара мөнәсәбәттәрҙә донъя илдәре лидерҙары уйланған, ыңғай ҡарарҙарға килер, тигән өмөт бар..."**

# ЙӘШЕЛ АҒАС ҠЕҮӘТЕ



Кем генә теләмәй бөгөн быңдай позитив йүнәлешкә юл тотоуҙы! Йылдың - тәүге, ҡыштың икенсе айын һыуығай тип беләбеҙ. Ләкин синоптиктар фекеренсә, быйылғы ғинуарҙың Башҡортостан һәм бигерәк тә Өфө ҡалаһы буйынса үткән йылдарҙағы уртаса статистиканан әллә ни кисҡен айырмаһы булмаясаҡ. Һуңғы биш йыл эсендәге уртаса һауа температураһына ҡарағанда, быйылғы һыуығайҙа көндөҙ минус 12, төндә 18 градус кимәлендә һыуытасаҡ, тип фаразлана. Шул уҡ ваҡытта айҙың иң йылы һәм иң һыуыҡ көндәре 0 градустан минус 33-кә тиклем тирбәлеүе ихтимал. Һыуығайҙа күпселек болотло көндәр өҫтөнлөк итеүе көтөлә, ҡар мул яуыр, тиҙәр. Шуға күрә лә был айҙа һәм бигерәк тә уның тәүге ун көнлөк Яңы йыл каникулдары осоронда ҡышҡы спорт төрҙәре менән шөғөлләнеү бик популяр һәм көнүҙәк буласаҡ: саңғы-санала шыуыу, тау саңғыһы, хоккей, сноуборд, трамплиндан һикереү һ.б.

Хәйер, спорттан бушаған мәлдәрҙә лә ҡайҙа ваҡыт үткәрәм, тип аптыраусы булмаясаҡ, сөнки балалар һәм үсмерҙәр өсөн фән һәм техника аҙналығы үҙенең ғәжәйеп мауыҡтырғыс донъяһына әйҙәйәсәк уларҙы. Мәҫәлән, бөгөн дрондар эшләү һәм улар менән идара итеү мәсьәләләре көнүҙәк. Тап бына ошо йүнәлештә Өфө ҡалаһының балаларға өҫтәмә белем биреү буйынса "Йәш техниктар станцияһы"ның "Иректе ел" командаһы Пермь Суворов училищеһы ойоштorған дрондар ярышы фестивалендә уңышлы ҡатнашып ҡайтты һәм һәйбәт күрһәткестәре менән һөйөндөрҙө. Әйткәндәй, 1980-1990 йылдарҙа бик популяр булған ошондай "Йәш техниктар станциялары" хәрәкәте һүнеп ҡалғандай тойола ине. Бәхеткә күрә, һуңғы йылдарҙа уларҙың эше күҙгә күренеп йәнләнә башланы. Дөрөҫөн әйткәндә, был бөгөн заман талабы.

Дрондар эшләү оҫталығынан тыш, йәш техниктар ниндәй генә йүнәлештә шөғөлләнмәй! Баш ҡалабыҙҙың Ферин урамында урынлашҡан "Оҫта" йәш техниктар клубы, мәҫәлән, трасса автомоделизмы, авиамоделизм, спорттың техник төрҙәре серҙәрен бик тырышып өйрәнә. Архитектура урамындағы "Оҫта ҡулдар" клубы ағзалары шулай уҡ авиамоделдәр менән мауыға, бынан тыш, уйын технологияларына төшөнәләр: бының өсөн махсус компьютер класы ойошторолған. Комсомол урамындағы Балалар ижады үҙәге инде үҙенең эшмәкәрлеге менән өфөләргә электән яҡшы таныш, сөнки ул хәҙер оҙаҡ йылдар бурысына тоғро ҡалып, һаман да балалар һәм үсмерҙәргә һәләттәре буйынса өҫтәмә белем биреүен уңышлы дауам итә. Ошондағы уҡ "Киләсәк ҡалаһы" технопаркы хаҡында ла әйтеп китеү кәрәк: уны бында үҙенә күрә тотош фәннитикшеренеү үҙәге тип йөрөтәләр, тик әлегә миниатюрала.

Ғөмүмән, Башҡортостандың талантлы балалары һәм үсмерҙәре ил һәм хатта донъя кимәлендә үҙҙәрен йылдан-йыл ышаныслыраҡ тоя һәм ҙур уныштар яулай. Мәҫәлән, 2019 йылда Рәсәй буйынса олимпиадаларҙа еңеүселәр һәм призер дипломдары һаны буйынса республика ни бары 35-се урында торһа, 2021

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ЙЫЛАН АЯҒЫН КИҪЕРҘӘЙ ИТЕП...

## йәшәйек, эшләйек, ауырлыҡтарға бирешмәйек!

**Яңы йыл... Ошо ике һүҙ беҙ белмәгән-һиҙмәгән тылсымға эйә кеүек тойола. Был һүҙҙәр артында беҙҙең быуын кешеләре әле бала ғына саҡтағы декабрь айы һалҡындары, яңы ғына яуып, бар донъяны сафтан-саф, аҡтан-аҡ итеп биҙәгән йәш ҡарҙың һаран ҡояш нурҙарында меңәрләгән гәүһәр бөртөктәреләй баҙлап ятыуы, хеҙмәт дәрестәрендә мәктәбебеҙҙең бер бүлмәһенә ҡуйыла торған шыршыға үҙ ҡулдарыбыҙ менән төрлө биҙәүестәр, уйынсыҡтар әҙерләүебеҙ, нисек итеп булһа ла шыршы байрамына берәй ябай ғына булһа ла битлек табып, хатта тундың эсен тышҡа әйләндереп кейеп килеүебеҙ, һәм, әлбиттә, матур итеп биҙәлгән шыршы тирәләй берберебеҙҙең ҡулдарына тотоношоп, "Йәшел шыршым, һин минең, их, нуры урмандың, һин биҙәге Яңы йылда беҙҙең урамдың!" - тип йырлап йөрөүебеҙ кеүек хәтирәләр йәшәй.**



Яңы йылды байрам итеү - кешелек донъяһының иң боронғо йолаларының береһе булғандыр. Аң-зиһен ҡеүәләре үҫешә барған кешеләр тора-бара абстракт ваҡыт төшөнсәһенең асылына төшөнә башлай, шуның менән бергә уны иҫәпләү берәмектәре лә хасил була: иртә, төш, кис, кисә, бөгөн, иртәгә, көн, төн, тәүлек, аҙна, ай, яҙ, йәй, көҙ, ҡыш, йыл һ.б. Боронғо кешеләр аңында ваҡыт тәбиғәт күренештәренең туктауһыҙ алышынып тороуының сағылышы булараҡ формалаша. Йыл төшөнсәһе лә бер-береһенән алыштыра килгән дүрт миҙгелдең тамам булған бер циклын белдерә.

Архаик замандарҙа һәр яңы йыл ерҙәге барса тереклектең яңырыу осоро - яҙ миҙгеле етеү менән башланған, һәм был мәңгелек күктең, тәбиғәттең кисектергеһеҙ ҡануны рәүешендә ҡабул ителгән. Кешеләр аңында яҙ башы - яңы йыл башы - яҙғы ерҙең сираттағы йәнләнеше, яңырышы рәүешендә сағылыш тапҡан. Тап шуның өсөн дә боронғо халыҡтар яңы йыл башын март айында байрам иткән. Боронғо төркиҙәр ҙә яңы йыл башланыуын март айында билдәләгән.

Рәсәйҙә төрлө дәүерҙәрҙә йыл хисабын алып барыу һәм Яңы йыл башын билдәләү төрлөсә булған. Боронғо Рустә Яңы йыл, башҡа халыҡтарҙағы кеүек, 1 марттан башланған, ә йыл иҫәбе донъя яратылған ваҡыттан башлап алып барылған. XIV быуатта Мәскәү сиркәү соборы, грек календарына ярашлы, Яңы йыл башын 1 сентябргә күсерергә ҡарар итһә лә, был ҡарар бөйөк кенәз Иоанн Васильевич Өсөнсөнөң ҡәтғи талабы буйынса 1492 йылдан ғына сиркәү һәм граждандар йылын иҫәпләүгә нигеҙ булып китә. 1 сентябрь бер үк ваҡытта яһаҡ, пошлиналар һәм башҡа түләүҙәрҙе ҡабул итеү көнө, тип һанала. Был көндә батша Кремлгә килгән, унда сиркәүҙең юғары вазифалы руханиҙары менән тантаналы сараларҙа ҡатнашҡан, бында килгән һәр кем батшаға яҡлау һәм ғәҙеллек һорап мөрәжәғәт итә алған.

Рәсәйҙә 1 сентябрҙә Яңы йылды ҡаршылау һуңғы тапҡыр 1698 йылда булған. 1699 йылда Европала оҙайлы сәйәхәттә йөрөп ҡайтҡан Петр I йыл башын 1 ғинуарҙан башлап иҫәпләүҙе, йыл хисабын донъя башынан түгел, Христос тыуғандан алып барыуҙы талап иткән указ ҡабул

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓24 декабрҙә Өфөгә илдең Именлек Советы Рәйесе Урынбаҫары, "Берҙәм Рәсәй" партияһы Рәйесе Дмитрий Медведев килде. Ҡала аэропортында уны Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров һәм Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡаршы алды. Һуңынан улар Рәсәй Геройы, генерал-майор Миңлеғәле Шайморатов һәйкәленә сәскәләр һалды.

✓Баш ҡала Дмитрий Медведев Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Ил һаҡсыһы" үҙәгендә республикала Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам сараларын тормошҡа ашырыу менән танышты. Республика һүғыш ветерандары клиник госпиталенең Медицина реабилитацияһы һәм терғеҙеүсе дауалау үҙәгендә булды, дауаланған хәрбиҙәр менән аралашты, уларға хеҙмәттәре өсөн рәхмәт әйтте һәм Рәсәйҙең дәүләт наградаларын тапшырҙы.

✓Именлек Советы Рәйесе Урынбаҫары Дмитрий Медведев Волга буйы федераль округы төбәктәре етәкселәре менән кәңәшмә үткәрҙе. Көн тәртибенә граждандарҙы контракт нигеҙендә хәрби хеҙмәткә һайлап алыу барышы мәсьәләһе ҡуйылды. "Рәсәй Президенты Владимир Владимирович Путин 2024 йылдың эш һөҙөмтәләрен Оборона министрлығы коллегияһының киңәйтелгән ултырышында иғлан итте. Дөйөм алғанда, быйыл Оборона министрлығы менән 440 меңгә яҡын кеше контракт төҙөгән. Был эш өсөн һеҙгә, Рәсәй төбәктәре башлыҡтарына, рәхмәт белдерәм", - тине Дмитрий Медведев.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика халҡын Башҡортостан Конституцияһы көнө менән ҡотланы. "Башҡортостан Конституцияһы ата-бабаларыбыҙҙың мираҫын, халыҡтарыбыҙ телдәрен, мәҙәниәтен, дуҫлығын, граждандарҙың хоҡуҡтарын һәм законлы мәнфәғәттәрен яҡлай. Беҙ бергә эшләйбеҙ, алға табан барабыҙ, һәр кем үҙ урынында уртаҡ Ватаныбыҙҙы һаҡлай. Был һәр ваҡыт шулай буласаҡ. Һәммәһен дә байрам менән!" - тине республика етәксеһе.

✓Илеш районында легендар летчик-штурмовик, республиканан берҙән-бер ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәевкә һәйкәл асылды. Тантаналы сарала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты. Һәйкәл М-12 "Көнсығыш" федераль трассаһының яңы участкаһында - Муса Гәрәев тыуып үҫкән Иләкшиҙе ауылы эргәһендә ҡуйылды. Һәйкәл ҡуйыу идеяһын Илеш районы хакимиәте һәм "Урал буйы" юл идаралығы тәҡдим иткән. Был башланғыс Радий Хәбиров тарафынан хуплау тапҡан.

йылда 16-сы, ә инде 2022 йылда 10-сы урынға сыҡты. Күптән түгел БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға Мөрәжәғәтнамәлә республика Башлығы Радий Хәбиров Башҡортостан уҡыусыларының интеллектуаль олимпиадаһы буйынса Волга буйы федераль округында - 3-сө, ә Бөтә Рәсәй олимпиадаһында 6-сы урын алыуы хаҡында белдерҙе. Республика Башлығы ошо сығышында юғары һөҙөмтәләргә өлгәшкән олимпиада еңеүселәре һәм призерҙарын аҡсалата премия менән бүләкләү суммаһын 300 мең һумға тиклем, ә уларҙы әҙерләүсе педагогтарға 150 мең һумға тиклем арттырырға ҡарар сығарыуы хаҡында хәбәр итте. Бынан тыш, йәш таланттар өсөн тағы бер ҡыуаныслы хәбәр еткерелде: Өфөлә һәләтле балалар өсөн математика лицей-интернаты төҙөләсәк. Бындай хәстәрлекле саралар фән һәм техника менән ҡыҙыҡһыныуға балаларҙы ошо өлкәгә тағы ла күберәк йәлеп итәсәк. Ысынлап та, бик дөрөҫ әйтелгән: белем биреү өлкәһенә күберәк хәстәрлек - ил киләсәгенә ышаныслы инвестиция ул.

**Һыуығайҙа билдәләнәсәк иҫтәлекле һәм байрам көндәре:** Яңы йыл **(1)**, Балалар һәм үҫмерҙәр өсөн фән һәм техника аҙналығы **(1 - 10)**, Фәнни фантастика көнө **(2)**, Раштыуа байрамы **(7)**, Рәсәйҙә балалар киноһы **(8)**, Заповедник һәм милли парктар, Халыҡ-ара рәхмәт көндәре **(11)**, РФ Прокуратура хеҙмәткәрҙәре; Рәсәй матбуғаты; Бөтөн донъя радио көндәре **(13)**, Иҫке стиль буйынса Яңы йыл **(14)**, РФ Тәфтиш комитеты ойошторолған көн; Ҡышлау ҡоштар көндәре **(15)**, Балаларҙың халыҡ-ара уйлап табыу; Кәңәшсе-тәрбиәсе **(17)** көндәре, Бөтөн донъя дин; Бөтөн донъя ҡар һәм ҡышҡы спорт төрҙәре **(19)** көндәре, РФ Һауа һөжүменә ҡаршы оборонаның авиация ғәскәрҙәре **(22)**, Халыҡ-ара мәғариф **(24)**, Рәсәй студенттары көнө **(25)**, Халыҡ-ара Интернетһыҙ көн **(27)**, Көнсығыш календары буйынса Яңы йыл **(Йәшел Ағас Йылан йылы 29, 2025)**, Халыҡ-ара Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу көнө **(30)**.

**Һыуығайҙа тыуғандар:**

**1 -** педагог, Һөнәри-техник белем биреү буйынса РСФСР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы, БАССР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы, А.В.Луначарский исемендәге премия лауреаты **Фәрит Барый улы Хәбировтың тыуыуына - 95 йыл** (1930-2003).

**2 -** шағир, сәйәси эшмәкәр, башҡорт милли әҙәбиәте классигы, Башҡорт милли хәрәкәте эшмәкәре, Башҡорт Хөкүмәте ағзаһы (1917-1919), йәштәрҙең "Тулҡын" Бөтөн башҡорт берлеге рәйесе (1917-1918) **Шәйехзада Мөхәммәтзәкир улы Бабичтың тыуыуына - 130 йыл** (1895-1919).

**4 -** Башҡортостандың - халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы **Эльвира Әхтәм ҡыҙы Юнысоваға - 65 йәш** (1960).

**9 -** Башҡортостандың халыҡ шағиры, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Марат Нәби улы Кәримовҡа - 95 йәш** (1930).

**16 -** күренекле башҡорт яҙыусыһы, РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев исемендәге БР Дәүләт һәм М.Аҡмулла премиялары лауреаты **Яныбай Хаммат улы Хамматовтың тыуыуына - 100 йыл** (1925-2000).

**29 -** тарихсы-ғалимә, тарих фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре **Роза Ғафар ҡыҙы Букановаға - 75 йәш** (1950).

**29 -** башҡорт яҙыусыһы, шағир һәм журналист, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, БР Хөкүмәтенең Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияһы лауреаты **Әхмәр Ғүмәр улы Үтәбаевҡа - 65 йәш** (1960).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

итә. "Рәсәйҙә Яңы йылды төрлөсә иҫәпләү булғанлыҡтан, ошо числонан кешеләрҙең башын ҡатырыуҙы туҡтатырға һәм бар ерҙә лә Яңы йылды 1 ғинуарҙан алып иҫәпләй башларға. Ошо изге башланғыс һәм күңел асыу хөрмәтенә бер-беренде, эштә уңыштар һәм ғаилә именлеге теләп, Яңы йыл менән ҡотларға. Яңы йыл хөрмәтенә шыршылар ҡуйырға, балаларға уйындар ҡорорға, тауҙан санала шыуыу ойошторорға. Ә ололарға эскелек һәм танау емереү менән булышмаҫҡа - бының өсөн башҡа көндәр ҙә етерлек", - тиелә батша указында.

Боронғо Көнсығышта йыл иҫәбен алып барыу менән бәйле тағы ла бер традиция барлыҡҡа килеп, ул әлеге көндәргә тиклем һаҡланып ҡалған. Ул, хайуан атамалары менән бәйләп, Ҡытайҙа ҡабул ителгән 12 йыллыҡ циклдан торған зодиакаль календарь рәүешендә билдәле. Уға ярашлы, 2025 йыл йылан йылына тура килә, дөрөҫөрәге, йәшел ағас йыланы йылы, тип атала.

Йылан - ғәжәпләндергес йән эйәһе, һалҡын ҡанлыларға ҡарай. Көнсығыш мәҙәниәтендә уға аҡыллылыҡ, зирәклек, хәйләкәрлек, алдан күрә белеүсәнлек, тоғролоҡ кеүек сифаттар хас, тип ҡабул ителгән. Шул уҡ ваҡытта йылан үҙ тормошонан ләззәт алып йәшәй, уға бигерәк тә ҡояш нурҙарында ҡыҙынып ятыу оҡшай.

Башҡорт әкиәттәрендә йылан образы йыш осрай: ул уҫал, яуыз йә иһә мәкерле итеп һүрәтләнә, шуға күрә "ҡара йылан" һүҙбәйләнеше яһил, аҫтыртын, "аҫтан килеп сағыусы" кешегә ҡарата берҙәй ҡулланыла. Ысынбарлыҡта йылан күптәрҙә ытырғаныс тойғоһон тыуҙырһа ла, башҡорт мөхитендә уны үлтереү тыйыла: йылан үлтереүсегә уның ҡоһоро төшөүе мөмкин, тип һанала. Боронғоларҙа аҡ йылан культы ла була, ул барса йыландарҙың батшаһы, уны күргән кеше тиҙ арала ырыҫҡа, байлыҡҡа өлгәшә ала, тип иҫәпләнгән. 922 йылда башҡорттар менән осрашҡан Ибн Фаҙлан уларҙың бер ҡәүеменең йыландарға табыныуы хаҡында мәғлүмәт ҡалдырған. Әйткәндәй, киләһе йыл беҙҙең йылан ырыуы башҡорттары өсөн икеләтә күркәмерәктер ул: донъяның башҡа бер төбәгендә тотош йыл исеменә үҙатамаһы тура килгән берәй ҡәүем бармы икән?

Йылан менән бәйле башҡорт халыҡ әйтем-мәҡәлдәрен дә иҫкә алып китеү урынлы булыр. Бына уларҙың бер нисәһе: "Егет булған егет еңенән йылан сығарыр", "Илай-илай һөйләгән илап йылан сығарыр", "Йылан менән дуҫ булһаң, ҡулың сағыр", "Йәне теләгән, йылан ите ашаған", "Йылы ергә йылан да эйәләшә", "Яла теле йыландан яман", "Еренә күрә ҡоланы, һыуына күрә йыланы, ҡыҙына күрә кейәүе, өйөнә күрә иләге", "Йортһоҙ - йылан, ерһеҙ - шайтан", "Йыланды үлтерергә дошманыңа ҡуш", "Йылан йыландың ҡойроғон уҙмаҫ, түрә түрәнең бойороғон боҙмаҫ".

Халҡыбыҙҙа бик тә уңған, йылғыр, өлгөр кешегә ҡарата "йылан аяғын киҫкән" тиҙәр. Әйҙәгеҙ, йәмәғәт, алдағы йылан йылында беҙ ҙә йылан аяғын киҫерҙәй итеп йәшәйек, эшләйек, ауырлыҡтарға бирешмәйек, ҙурыраҡ уңыштарға өлгәшәйек. Йылан йылына ҡот теләп, иҫәнлектә-һаулыҡта, иптәшлектә-дуҫлыҡта, барса илебеҙ менән имен-аман йәшәргә яҙһын, тим.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ТӘҮШАРТТАР ӘЛЕГӘ ЮҠ

**Үҙенең Telegram-каналында Украина Генштабы яҙып сығыуынса, фронт һыҙығындағы хәлдәр Рәсәй ғәскәре өҫтөнлөгө арҡаһында Украина Ҡоралды көстәре өсөн бик ҡатмарлы булып ҡалыуын дауам итә. Шуға ҡарамаҫтан, Украина лидеры Владимир Зеленский бер ниндәй тыныслыҡ башланғыстарын танырға теләмәй һәм, киреһенсә, Рәсәйҙе һәр төрлө провокацияға этәрергә маташа.**

Украина көстәренең Рәсәй Федерацияһы территорияһына һөжүмдәре, атап әйткәндә, ошо көндәрҙә Ҡаҙан ҡалаһына шартлатҡыс дрондар ебәреүе "йөҙ проценты менән террористик акт ул", тип әйтте АҠШ-тың элекке разведка хеҙмәткәре Скот Риттер һәм: "Киев бындай юл менән бер ниндәй маҡсатына ла өлгәшә алмаясаҡ. Улар ниндәйҙер стратегик әһәмиәте булған бер нәмәне лә юҡ итә алмаясаҡ. Минең уйымса, Украина менән уның союздаштарының, ғәфү үтенәм, аҡылдарын юйғанлығын Рәсәй, моғайын, аңлайҙыр..."- тип тә өҫтәне. Ысынлап та, айыҡ фекерләүсе Америка гражданы дөрөҫ әйтә, әгәр шулай булмаһа, Зеленский Украинаны НАТО-ға индереү өсөн тауыш биреүен һорап, Словакия премьеры Роберт Фицоға Рәсәй активынан алынған 500 млн евроны ришүәт итеп бирергә маташыр инеме? Аҡылы камил кеше бындай аҙымға бер ҡасан да бармаясаҡ.

Тура бәйләнештән һуң Рәсәй телевидениеһы журналисы Павел Зарубинға интервьюһында РФ Президенты Владимир Путин Украинаға Махсус хәрби операцияны элегерәк башларға кәрәк булған, тине һәм ни өсөн шулай тип әйтеүен аңлатты: "Беҙҙең оппоненттар Минск килешеүен үтәргә йыйынмай; Көнбайыш лидерҙары уны Украинаны ҡоралландырыу өсөн ваҡыт отоу өсөн генә файҙаланған. Беҙ быны аңларға һәм кисекмәҫтән, ваҡытында эште башларға тейеш инек..." Ә инде бер нәмә лә эшләмәү Рәсәй мәнфәғәтенә һәм уның халҡына ҡарата енәйәт булыр ине. Беҙгә килешеү түгел, ә оҙайлы тыныслыҡ кәрәк, тине В.Путин.

Әйткәндәй, Көнбайыштың киң мәғлүмәт саралары Дональд Трамптың Украина конфликтын нисек хәл итергә ниәтләүен фаразлай. Ул тәүҙә был мәсьәләне бер көн эсендә килешеү юлы менән хәл итмәксе булып шәпләнә ине, хәтерләйһегеҙҙер. Бөгөн Киевтың Европа кураторҙары Украина конфликтын еңел генә хәл итеп булмаясағына Трампты ышандырырға тырыша, сөнки улар яҡшы белә: Трамп - һөйәк елегенә тиклем тотош бизнес кешеһе һәм уның һүҙлегендә "файҙа, отош" төшөнсәһе беренсе урында тора. Тимәк, был конфликттан кемдәрҙер байый, ә кемдәрҙер бөлә.

Төрлө сығанаҡтар фекеренсә, АҠШ Украинаға ярҙамды дауам итәсәк, ләкин шундай шарт менән: Европа илдәре хәрби сығымдарын әлеге 2 урынына... 5 процентҡа арттырырға тейеш. Трамптың тағы бер талабы: Европа тулыһынса Америка углеводородына күсергә бурыслы - бына бит, Киевтың еврокураторҙары үҙ баштарына һөсләтте түгелме Трампты! Үткән йомала Reuters баҫмаһы хәбәр итеүенсә, Трамп, йәнәһе, Европаға ультиматум ҡуйған: йә булмаһа, нефть менән газды Американан һатып алыуҙы ҡырҡа арттыраһығыҙ; йә булмаһа, Евросоюздан АҠШ-ҡа килеүсе бөтөн тауарҙарға ла тыйыу тарифы һалынасаҡ. Европаның иһә бындай шарттарға буйһонмай сараһы ҡалмаҫ, буғай.

Шулай итеп, хәрби хәрәкәттәрҙе финанслауҙы европалар үҙ өҫтөнә ала, ләкин был аҡсалар Америка кеҫәһен ҡалынайтасаҡ. Был эксперттар фаразы ғына булып ҡалырмы, әллә Трамп сәйәсәте бойомға аша башлармы - уныһын киләсәк күрһәтер. Һәр хәлдә, ошо көндәрҙә генә Дональд Трамп Украина конфликтын яйлау буйынса Рәсәй Президенты Вдадимир Путин менән осрашыуға әҙер булыуы хаҡында белдерҙе, ләкин Кремлдән хәбәр итеүҙәренсә, бындай осрашыуҙы ойоштороу өсөн кәрәкле тәүшарттар әлегә юҡ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2025 йылда Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлауҙы үҫтереү буйынса яңы советының тәүге ултырышы республика кардиология үҙәгендә була. Осрашыуҙа медицина берләшмәһе вәкилдәре мөһим мәсьәләләрҙе тикшерә. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров белдерҙе. "Беҙ "Һаулыҡ һаҡлау сәғәттәре"н Совет составындағы эш форматына күсерҙек. Йылына кәмендә дүрт тапҡыр йыйылырға тип һөйләштек", - тип билдәләне республика етәксеһе.

✓Өфөнөң Көрәш һарайында "Автодор Кубогы"на грек-рим көрәше буйынса Бөтә Рәсәй ярыштарының йомғаҡлау өлөшө үтте. Сарала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һәм "Автодор" Дәүләт компанияһы идараһы рәйесе Вячеслав Петушенко ҡатнашты. Өфөләге ярыштарҙа Рәсәйҙең 10 төбәгенән 14 йәштән өлкән иң көслө спортсылар көс һынашты. Турнир йомғаҡтары буйынса Мәскәү өлкәһе командаһы еңеүсе тип табылды. Көмөш миҙалға - Санкт-Петербургтың йыйылма командаһы, өсөнсө урынға Башҡортостан көрәшселәре лайыҡ булды.

✓Төбәк етәксеһе Радий Хәбиров видеобәйләнеш режимында республикала биш мәҙәни объектты асыу тантанаһында ҡатнашты. Ул Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Мәҙәниәт һәм сәнғәтте үҫтереү мәсьәләләре буйынса совет ултырышы сиктәрендә үтте. Мәҫәлән, Дүртөйлөлә яңы модулле клуб төҙөлгән. Миәкә һәм Асҡын райондарында кинозалдар яңыртылған. Бынан тыш, Яңауылда капиталь ремонттан һуң балалар сәнғәт мәктәбе асылды, ә Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрында республика бюджеты ярҙамы менән интерактив уйын залы булдырылды.

✓Мәләүез районы хакимиәте башлығы итеп Зәбир Таһирйән улы Ғабдуллин тәғәйенләнде. Район советы депутаттары бер тауыштан уның кандидатураһы өсөн тауыш бирҙе. Зәбир Ғабдуллин 1976 йылда Ҡалтасы районының Яңы Аткүл ауылында тыуған. Башҡорт дәүләт университетын, Ҡаҙан дәүләт архитектура-төҙөлөш университетын тамамлаған. 2020 йылдың 20 ноябренән 2024 йылдың 19 декабренә тиклем Ҡалтасы районы хакимиәте башлығы булып эшләне.

✓Республикабыҙҙа булдырылған "Хатаһыҙ ҡала. Башҡортостан" чат-боты 10 мөрәжәғәт ҡабул иткән. Был хаҡта БР Хөкүмәте премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев социаль селтәрҙә хәбәр итә. "Чат-бот алтаҡталарҙы тәртипкә килтереүҙә ярҙам итә. 11 декабрҙә "Торатау" конгресс-холында муниципаль комиссияларының секретарҙары өсөн үткәрелгән семинар-уҡыуҙа был сервистың эш принцибын аңлаттыҡ. Сервисты әүҙем ҡулланырға саҡырам! - тип яҙҙы Урал Килсенбаев.

ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!

# ҒАИЛӘЛӘРГӘ ЯРҘАМ ИТЕГЕҘ!

**Махсус операцияла хәл ҡырҡа үҙгәрә, фронт һыҙығы буйлап хәрәкәт итәбеҙ, Рәсәй яугирҙары көн һайын ерҙәрҙе азат итеүгә өлгәшә, Рәсәй МХО бурыстарын хәл итеүгә яҡын тора. Был хаҡта Владимир Путин тура бәйләнеш барышында һөйләне.**

● Дәүләт башлығы алыҫҡа атыусы "Орешник" ракетаһы хаҡында ла һөйләне: "Орешник"ты етештереү тураһында аҙаҡҡы ҡарарҙы үҙем ҡабул иттем, - тип өҫтәне Путин. - Уның осоу алыҫлығы 5,5 мең километрға тиклем тәшкил итә. Ракетабыҙҙы бер нисек тә бәреп төшөрөү мөмкинлеге юҡ".

● "Ғаилә һәм ауыл ипотекалары лимитһыҙ булырға тейеш, - тип белдерҙе Рәсәй Президенты тура бәйләнеш барышында. - Был торлаҡ төҙөлөшөндә мөһим ҡорал булып тора. Төҙөлгән торлаҡтың 50 проценты - шәхси торлаҡ, һәм башлыса, ауыл ерендә. Кешеләр йорт һала, ғаилә ҡора. Бер ниндәй лимит булмаҫҡа тейеш", - тине дәүләт башлығы һәм Хөкүмәткә төбәктәргә субсидиялар йүнәлтергә ҡушты.

● Владимир Путин губернаторҙарҙы эш көнөн демографияға ярҙам мәсьәләләре менән башларға һәм тамамларға саҡырҙы: "Сөнки был донъяның күп кенә илдәре, шул иҫәптән Рәсәй өсөн дә саҡырыу булып тора. Халыҡ - ул илдең бер өлөшө. Бер территория - яҡшы, әммә унда ошо илдең граждандары йәшәргә тейеш", - тине Владимир Путин.

● Президент әлеге ваҡытта Рәсәйҙә тыуым коэффициентының 1,4 процент тәшкил итеүен билдәләне. "Был ғына аҙ, әммә Европаның башҡа илдәрендә тағы ла аҙыраҡ. Тыуым коэффициентын кәмендә 2,1 процентҡа тиклем арттырырға кәрәк", - тине дәүләт башлығы. Владимир Путин бала табыу йәшендәге ҡатын-ҡыҙҙарҙың 30 процентҡа кәмеүен тыуым күрһәткесенең түбәнәйеүе сәбәптәренең береһе итеп билдәләне. "Беҙгә ҡыҙҙар кәрәк", - тине ул.

● Президент балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамы саралары хаҡында ла һөйләне. Уның һүҙҙәренсә, бөгөн 10 миллиондан ашыу балаға һәм 300 меңгә яҡын ауырлы ҡатын-ҡыҙға төрлө пособие түләнә. Шул иҫәптән беренсе һәм икенсе бала тыуғанда Әсәлек капиталы. Президент быны "уникаль уйлап табыу" тип атаны. "Шулай уҡ 6 процент менән ғаилә ипотекаһы һаҡлана. Ә өсөнсө балаһы тыуған ғаиләләргә ипотеканы ҡаплау өсөн 450 мең һум бирелә", - тип өҫтәне Владимир Путин.

● Президент балалы ғаиләләргә физик берәмектәрҙең килеменә һалымды (НДФЛ) ҡайтанан иҫәпләргә һәм ғаилә түләгән һалымдың 7 процентын кире ҡайтарырға тәҡдим итте. Бынан тыш, тыуым коэффициенты 1,41 процент булған төбәктәр өсөн алдағы бер нисә йылға 75 миллиард һум финанслау менән махсус программа булдырыла, тип белдерҙе ул.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЙЫЛ АТАМАҺЫ ШУЛАЙ!



**Башҡортостанда Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам йылын үткәреү планы 100-гә яҡын сараны үҙ эсенә ала. Был хаҡта республика Башлығы Радий Хәбиров уҙғарған оператив кәңәшмәлә ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрының беренсе урынбаҫары Юрий Мельников хәбәр итте.**

Барлыҡ саралар ҙа тематик бүлектәргә берләштерелгән. Бында ойоштороу мәсьәләләре, гуманитар ярҙам күрһәтеү, муниципалитеттарҙа үткәреүгә тәҡдим ителгән иҫтәлекле даталар календары, һаулыҡ һаҡлау һәм социаль-хеҙмәт адаптацияһы буйынса, шулай уҡ мәҙәни-ял, спорт һәм патриотик саралар күҙ уңында тотола. Тематик йылды асыу тантанаһы Өфөлә 2025 йылдың 23 февралендә Ватанды һаҡлаусылар көнөнә арналған саралар сиктәрендә үтәсәк.

Бынан тыш та республикала ҙур проекттарҙы тормошҡа ашырыу күҙаллана. Улар иҫәбендә - "Ҙур ғаилә ялдары", "Үҙебеҙҙекеләр хаҡында хәстәрлек менән", "Ҡыйыулыҡ", "Армия мәҙәниәте көндәре" акциялары, "Геройҙар ваҡыты" патриотик йыр конкурсы, "Ирҙәрсә һөйләшеү" форумы, "Уңышҡа үҙ юлың" йәштәр фестивале, Махсус хәрби операция ветерандары араһында "Яугир" ярыштары, республиканың исемле батальондары байраҡтарын ҡаршылау марафоны, шулай уҡ "Ватанды һаҡлаусылар" Дәүләт фонды филиалдары етәкселәре өсөн Бөтә Рәсәй семинар-кәңәшмәһе. "Барлыҡ саралар ҙа Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙы һәм уларҙың ғаилә ағзаларын, йәштәрҙе илһөйәрлек рухында тәрбиәләүгә, тарихи хәҡиҡәтте һәм хәтерҙе һаҡлауға йәлеп итеүгә йүнәлтелгән, - тине Юрий Мельников. - Шулай уҡ был саралар яугирҙарыбыҙға, үҙҙәре Тыуған ил алдындағы бурысын үтәгәндә, улар тураһында хәтерләйҙәр, ышаналар, ғаиләләре хаҡында хәстәрлек күрәләр һәм ярҙам итәләр, тигән ышаныс та өҫтәй".

Тәҡдим ителгән тематик йыл планы Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам саралары комплексын системалаштырыу мөмкинлеген бирәсәк, тип билдәләне Башҡортостан Башлығы. Төбәк етәксеһе республиканың ҡала һәм районлары етәкселәренә тейешле муниципаль пландар әҙерләргә ҡушты.

# ЮЛДАР - ТОРМОШ АРТЕРИЯҺЫ

**22 декабрҙә Рәсәй Президенты Владимир Путин видеоэлемтә режимында ил төбәктәрендә һауа һәм автомобиль юлдары инфраструктураһы объекттарын асыу тантанаһында ҡатнашты. Улар иҫәбендә - Башҡортостан биләмәһе буйлап үткән М-12 "Көнсығыш" федераль автомагистраленең 65 километрлыҡ участкаһы. Республика етәксеһе Радий Хәбиров дәүләт башлығына Илеш районынан трассаның әҙерлеге тураһында хәбәр итте.**

Сараны асып, Рәсәй Президенты асылған объекттарҙа эшләгән төҙөүселәргә һәм башҡа белгестәргә рәхмәт белдерҙе. "Беҙҙә юл селтәрен һәм төп автомагистралдәрҙе үҫтереү буйынса темптар юғары, - тине Владимир Путин. - Планлаштырылғанса, Екатеринбург, Төмән йүнәлешендә һәм артабан Көнсығышҡа табан ошо мөһим магистралде киләсәктә лә үҫтерәсәкбеҙ. Бөгөн уның составында Татарстан Республикаһында Түбәнге Кама һәм Яр Саллы ҡалаларын урап үтеүсе 80 километрлыҡ һәм Башҡортостан Республикаһында бер нисә тораҡ пунктты урап үтеүсе 65 километрлыҡ юл участкалары сафҡа индерелә. Был урау юлдар ҡалаларҙы һәм ҡасабаларҙы транзит ағымдарынан бушата, хәрәкәтте хәүефһеҙерәк итә, кешеләрҙең йәшәү сифатына, уларҙың экологик именлегенә ыңғай йоғонто яһай".

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров яңы трассаның республика халҡы өсөн әһәмиәтен һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм Владимир Владимировичҡа Башҡортостан халҡы исеменән республикабыҙ үҫешенә даими ярҙам күрһәтеүе, беҙҙең биләмә буйлап М-12 автомагистрален һалыу тураһындағы ҡарары өсөн рәхмәт белдерҙе. Был трасса юл инфраструктураһын күпкә яҡшыртасаҡ. Миҫал өсөн, был юл төҙөлөшө тамамланғас, Өфөнән Мәскәүгә тиклем бер ярым тапҡырға тиҙерәк барып етергә мөмкин, тип билдәләне республика Башлығы.

М-12 "Көнсығыш" федераль тиҙ йөрөшлө автомобиль юлы маршрутына ингән М-7 "Волга" автомагистраленең 65 километрлыҡ участкаһы Исәмәт, Үрге Йәркәй, Ляашты, Ишҡар, Әсән ауылдарын урап үтә. Уны проектлау - 2021 йылдың йәйендә, ә төҙөлөш эштәре 2022 йылдың көҙөндә башланған. Эштәр Илеш, Саҡмағош һәм Дүртөйлө райондары биләмәһендә алып барылған. Юлсылар 1 миллион тоннанан ашыу асфальт-бетон ҡатнашма һалған, алты транспорт айырсаһы, туғыҙ юл үткәргес, Базы һәм Ҡыуаш йылғалары аша ике күпер төҙөгән, күп функциялы зоналар төҙөү перспективаһы менән дүрт ял майҙансығы булдырған. Хәүефһеҙлекте тәьмин итеү маҡсатында юл ситe буйлап 216 км ҡойма ҡуйылған, 167 км яҡтыртыу системаһы монтажланған.

# ҘУР ҒАИЛӘ - КИЛӘСӘГЕБЕҘ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Мәскәүҙә Рәсәй Президенты Владимир Путин үткәргән Дәүләт Советы ултырышында ҡатнашты.**

Фекер алышыу Рәсәй Федерацияһында ғаиләләргә ярҙам итеү темаһына арналды. Ултырышты асып, дәүләт башлығы Ғаилә йылына яҡынса йомғаҡ яһаны. "Рәсәйҙең уңышлы киләсәге, уны үҫтереү өсөн беҙ, Рәсәй халҡы, байтаҡҡа күберәк булырға тейеш. Һәм һүҙ тәү сиратта күп балалы ғаиләләрҙең артыуы хаҡында бара. Күп тапҡырҙар әйтеүемсә, ҙур ғаилә - Рәсәй киләсәге образы, һәм ул шулай булырға тейеш тә", - тине В. Путин. Уның билдәләүенсә, демография өлкәһендәге кире тенденцияларҙы шул иҫәптән "Ғаилә", "Йәштәр һәм балалар", "Оҙайлы һәм әүҙем тормош" милли проекттары ла үҙгәртергә тейеш. Улар 2025 йылдан тормошҡа ашырыла башлай. Ултырышта ҡатнашыусылар төбәктәр тәжрибәһен һәм демография өлкәһендәге иң яҡшы практикаларҙы, ғаилә ҡиммәттәрен үҫтереү буйынса һөҙөмтәле мәғлүмәти эште яйға һалыуҙы, шул иҫәптән күп балалыҡтың абруйын күтәреү мәсьәләләрен тикшерҙе.

"Ил өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булған тағы бер мөһим ҡарар - киләһе йылда Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығын билдәләйбеҙ. Шуға бәйле 2025 йылды Ватанды һаҡлаусылар йылы тип иғлан итергә тәҡдим итәм", - тип белдерҙе Рәсәй Президенты осрашыу аҙағында.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө мэры Ратмир Мәүлиев ҡала хакимиәтендә уҙған оператив кәңәшмәлә атаәсәләрҙән балаларҙың яңы йыл хыялын бойомға ашырыуын һәм уларға шыршы аҫтына үҙҙәре теләгән бүләкте әҙерләп һалыуын һораны. Ул шулай уҡ Өфөнөң ҡала һәм экстрен хеҙмәттәренә Яңы йыл байрамдарында ҡала халҡының хәүефһеҙ һәм уңайлы ялы өсөн көсәйтелгән режимда эшләргә кәрәклеген иҫкә төшөрҙө.

✓Өфөләр 30 декабргә тиклем дауам иткән Яңы йыл алды йәрминкәләрендә аҙыҡтүлек һатып алырға мөмкин. 28 декабрҙә "Артерия" үҙәге алдындағы майҙанда (Октябрь проспекты, 67/2) тәүге тапҡыр Яңы йыл йәрминкәһе ойошторола. Бынан тыш, Өфөлә 12 майҙанда ял көндәре йәрминкәләре, 8 майҙансыҡта (башлыса ҙур сауҙа комплекстары янында) йыл әйләнәһенә фермер йәрминкәләре эшләй. Шулай уҡ урындағы баҡсасылар үҫтергән продукцияны махсус майҙансыҡтарҙа ла һатып алырға була (608 урынға иҫәпләнгән 41 майҙансыҡ).

✓27 декабрҙә Өфөлә Шаҡша күперенең дүрт һыҙатын техник асыу тантанаһы була. Ҡалған эштәрҙе башҡарғанда хәрәкәт туҡтатылмай. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә транспорт һәм юл хужалығы министры вазифаһын башҡарыусы Любовь Минакова белдерҙе. "Артабан күперҙә хәрәкәтте ябыуға бәйле булмаған эштәр көтөлә, мәҫәлән, ҡойма ямғыр канализацияһын төҙөү, яҡтыртҡыстар ҡуйыу", - тип билдәләне Минакова. Республика Башлығы Өфө халҡына түҙемлектәре өсөн рәхмәт әйтте. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Шаҡша күперен капиталь ремонтлау эштәре 2023 йылдың яҙында башланғайны.

✓"Салауат Юлаев" был аҙнала Хабаровскиҙың "Амур" командаһын да еңде. Хәҙер Өфө хоккей командаһы 48 мәрәй йыйып, Көнсығыш конференцияһының турнир таблицаһында икенсе урынды биләй. Бынан алдараҡ Виктор Козлов тәрбиәләнеүселәре үҙ майҙанындағы бөтә матчтарҙы ла еңеү менән тамамланы. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, "Салауат Юлаев" Мәскәү өлкәһенең "Витязь", Мәскәүҙең "Спартак", Силәбенең "Трактор", Новосибирскиҙың "Себер" һәм Ҡаҙандың "Аҡ Барыҫ" командаларын еңде. 6+

✓Синоптиктар Башҡортостанда яңы йыл төнөнә һауа торошона яҡынса фараз бирҙе. "Яндекс. Һауа торошо" сервисы мәғлүмәттәре буйынса, 31 декабрҙән 1 ғинуарға ҡарай төндә яҡшы һауа торошо көтөлә. Бер аҙ ҡар яуыуы ихтимал, 9-11 градус һалҡын. Яңы йыл каникулдарында ла ошондай һауа торошо һаҡлана. Байрам көндәрендә ҡаты һыуыҡтар көтөлмәй. Ә бына Яңы йылға тиклем бер нисә көн ҡалғас, 27-28 декабрҙә, епшек ҡар һәм ямғыр яуыуы мөмкин.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БЫНДАЙ БӘЙЛӘНЕШ МӨҺИМ

**Владимир Путин менән тура бәйләнеш - илдең сәйәси тормошонда әһәмиәтле ваҡиғаларҙың береһе. Шундай фекер белдерҙе тура эфирҙан һуң Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев.**

"Рәсәй Президенты һәр ваҡыттағыса киҫкен темаларҙы тикшереүҙән ҡасмай һәм халыҡты борсоған һорауҙарға асыҡтан-асыҡ яуап бирә, - тип билдәләне Константин Толкачев. - Власть менән йәмғиәт араһында аралашыуҙың был форматы кешеләрҙең ысын ихтыяждарын һәм хәстәрләктәрен асыҡлау өсөн оло әһәмиәткә эйә. Тура бәйләнеш Президентҡа йәмғиәттең һорауҙарына туранан-тура яуап бирергә мөмкинлек бирә, был граждандарҙың бөгөнгө ихтыяждарын аңлау һәм дәүләт сәйәсәтенең өҫтөнлөктәрен билдәләү өсөн бик мөһим. Дәүләт башлығы Махсус хәрби операция үткәреү, халыҡ-ара хәл мәсьәләләренә ентекле туҡталды. Бөтә төбәктәрҙә йәшәүселәрҙе борсоған эске сәйәсәттең төп йүнәлештәре буйынса яуаптар бирелде. Әйтәйек, һаулыҡ һаҡлауҙың беренсел звеноһы, льготалы дарыуҙар менән тәьмин итеү, милли проекттарҙы бойомға ашырыу, ишле ғаиләләргә ярҙам итеү, ауыл хужалығын үҫтереү һәм башҡалар. Граждандар менән ошондай әҙәйле диалог алып барған бер генә донъя лидеры ла белмәйем. Владимир Путинға ике миллиондан ашыу һорау килде, был Президентҡа ышаныс һәм туранан-тура һөйләшеүҙең кәрәклеге тураһында һөйләй. Парламентарийҙар өсөн был файҙалы мәғлүмәт, уны артабанғы эшебеҙҙә ҡулланырбыҙ".

# ШЫРШЫЛА - БАЛАЛАР ТЕЛӘГЕ

**Өфөлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Теләктәр шыршыһы" Бөтә Рәсәй хәйриә акцияһында ҡатнашты.**

Төбәк етәксеһе Евразия фәнни-белем биреү үҙәгенең вуз-ара студенттар кампусында ҡуйылған шыршынан акцияла ҡатнашыусыларҙың теләктәре яҙылған биш Яңы йыл шарын алды. Мәҫәлән, Стәрлетамаҡтан биш йәшлек Матвей - машинист ролендә булып ҡарарға, Салауат районының Лаҡлы ауылынан һигеҙ йәшлек Камил - уйынсыҡ тимер юлы, Өфө районының Подымалово ауылынан өс йәшлек Зарина - яңы ҡурсаҡ, Октябрьскийҙан ете йәшлек Михаил трансформер тураһында хыяллана. Яңы йылға тағы бер теләк - Өфөнән 16 йәшлек Айзиләнән. Ул үҙе өсөн - бүләк-сюрприз, ә 10 йәшлек ҡустыһына "Өҫтәл футболы" уйыны хаҡында яҙған. Балаларҙың атаһы Махсус хәрби операцияла һәләк булған. "Был яҡшы һәм дөрөҫ йола. Төрлө сәбәптәр арҡаһында балаларға һәр ваҡыт ниндәйҙер бүләк яһап булмай, ә беҙ уларҙың теләктәрен үтәүҙә ярҙам итергә әҙербеҙ. Акцияла мин генә түгел, республика Хөкүмәте ағзалары ла, муниципалитет башлыҡтары ла шыршынан балаларҙың теләктәрен алды, - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ: "Теләктәр шыршыһы" хәйриә проекты 2018 йылда Рәсәй Президенты Владимир Путин инициативаһы буйынса старт алды. Уның маҡсаты - етем, һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән һәм аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән балаларҙың, шулай уҡ Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың балаларының Яңы йыл хыялдарын тормошҡа ашырыу.

# ЯҢЫ ЭШ УРЫНЫ ЛА...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Газпром нефтехим Салауат" предприятиеһында техник көкөрт етештереү ҡулайламаһын сафҡа индереү тураһында иғлан итте.**

Был 2022 йылда республиканың өҫтөнлөклөләр исемлегенә индерелгән проекттарының береһе булып тора, тип билдәләне ул. Объектҡа һалынған аҡсаның дөйөм күләме - 13,8 миллиард һум. "Яңы производство тәрәнерәк эшкәртеүҙе, яңы продукция сығарыуҙы күҙ уңында тота. Ҡорамалдарҙың 90 проценттан ашыуы илебеҙҙә етештерелгән. Шуныһы мөһим: ҡулайламаны файҙаланыуға тапшырыу - тирә-яҡ мөхиткә зарарлы матдәләр бүлеп сығарыуҙы кәметеү тураһында дүрт яҡлы килешеү сиктәрендәге ҙур эштең бер этабы. "Газпром нефтехим Салауат" Рәсәйҙең Тәбиғәт ресурстары һәм экология министрлығы, Тәбиғәттән файҙаланыу өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт һәм Башҡортостан менән килешеүгә ҡул ҡуйҙы", - тип яҙҙы Хәбиров үҙенең социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

Яңы производство йыл һайын һауаға бүлеп сығарылған зарарлы матдәләр күләмен 4,6 мең тоннаға кәметергә мөмкинлек бирә. Мәҫәлән, көкөрт диоксиды миҡдары 30 процентҡа кәмергә тейеш. Проекты тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә 54 яңы эш урыны булдырылды. "Алда - яңы пландар. Тағы ла бер нисә проект өҫтөндә эш бара. Предприятиела суперабсорбенттар етештерә башлау планлаштырыла. Мөһим экологик башланғыстар бар. Берлектәге эш өсөн рәхмәт белдерәм. Артабан да алға барабыҙ", - тип өҫтәне республика етәксеһе.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# РӘХМӘТ ӘЙТӘ ЙӨРӨЙӨК!

**Ниндәй генә һүҙ юҡ был донъяла! Бер үк һүҙҙең донъя телдәрендә төрлөсә яңғырауы тураһында уйланһаң, иҫ киткес байлыҡ бит.**

Беҙҙең рәхмәт әйтә торған кешеләр, ваҡиғалар, күренештәр, мәлдәр бик күп. Иртән йылы әйҙә, тыныс шарттарҙа, бер ерегеҙ ҙә ауыртмай уянһағыҙ, рәхмәт әйтәһегеҙме? Әйтергә ғәҙәтләнмәгән булһағыҙ, бына бөгөндән башлағыҙ. Иҫ киткес ҡиммәтле байлыҡ, иң ҙур бәхет ул яңы көндө иҫән-имен ҡаршылау. Эшкәмә, уҡыуғамы, урамға сыҡкандамы, беренсе осраған кешегә лә рәхмәт әйтегеҙ. Таныш булмаһа - эстән генә әйтһәң дә ҡәнәғәт ҡалырһығыҙ.

Кешене кәмһеткән, ҡайғыртҡан, асыуландырған һүҙҙәрҙе әйтмәҫкә тырышайыҡ. Әйтергә тейеш булған урында иһә насарҙың, ямандың исемен әйтмәй генә еткерәйек. Ә рәхмәт һүҙен әйтергә оялмайыҡ. Ошо матур һүҙҙе әйтә торған кешеләребеҙ күп булһын. Кешеләргә генә түгел, ә үткән көнгә, һәр яңы көнгә, ейгән ризыҡҡа, күргән, осраштырған кешеләргә, беҙҙе донъяға килтергән әсәй-атайыбыҙға, тыуғандарыбыҙға, хеҙмәттәштәребеҙгә рәхмәт әйтеп йөрөйөк. Хатта беҙҙе үҙ итеп бөтмәгәндәргә лә рәхмәт әйтәйек. Сөнки тап ундайҙарҙың булыуы беҙҙе яҡшыраҡ итә бит.

Рәхмәт һүҙе яҡшылыҡ өсөн белдергән ризалыҡ, ҡәнәғәтлек тойғоһон аңлата.

Һеҙҙең дә, дуҫтар, рәхмәт әйтә торған кешеләрегеҙ, мәлдәрегеҙ күп булыуын теләйбеҙ!

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# КҮҢЕЛ АСЫРҒА!

**Республикала 2024 йылдың 1 декабренән башланған Яңы йыл саралары 2025 йылдың 9 ғинуарына тиклем дауам итәсәк.**

- Башҡортостанда 570 Яңы йыл ҡаласығы төҙөлгән. Төрлө майҙандарға бөтәһе 1703 шыршы ҡуйылған, 347 һырғалаҡ, 633 ҡар тауы (133-сө сертификация үткән һәм 500-ө сертификат талап итмәй), 67 саңғы базаһы һәм 30 тюбинг трассаһы эшләй.
- Өфөлә 22 төп боҙ ҡаласығы төҙөлгән, шуларҙың икеүһе - үҙәктә: ҡала Советында һәм Конгресс-холл янындағы майҙанда. Баш ҡалала 350 яңы йыл шыршыһы ҡуйылды.
- 26 декабрҙә Өфөлә Ленин исемендәге майҙанда Ҡыш бабай резиденцияһы асылды. Яңы йыл төнөндә теләүселәрҙе бында 2025 йылды ҡаршылау буйынса байрам программаһына көтәләр. Резиденция 12 ғинуарға тиклем эшләйәсәк.
- 1 ғинуарҙа Яңы йыл "Ҡашҡаҙан вәғәҙәләр уҙышы" һәм скандинав йөрөшө фестивале була.
- 31 декабрҙә һәм 1 ғинуарҙа Өфөлә йәнә "Терра ҡыш" фестивале ойошторола. Фестиваль 31 декабрҙә киске сәғәт 9-ҙа асыла. Совет майҙанында усаҡта бешерелгән былау, милли ризыҡтар һәм ҡайнар эсемлектәр менән фуд-корт эшләй. Өфөләрҙе ҡышҡы һабантуй, концерт һәм, әлбиттә, куранттар һуҡҡанда Яңы йылды ҡаршылау көтә. Владимир Путиндың һәм Радий Хәбировтың Яңы йыл мөрәжәғәттәренән тыш, "Терра ҡыш" фестивалендә ҙур экранда МХО яугирҙарынан ҡотлауҙар яңғырай. Байрам 1 ғинуарҙа төнгө сәғәт 3-кә тиклем бара.
- Фестивалдә 1 ғинуарҙа Совет майҙанында киске сәғәт 5-тә карнавал костюмдарындағы конкурс-парад дауам итә. Енеүселәрҙе иғлан иткәндән һуң байрам ҡунаҡтарын халыҡ уйындары көтә, сәхнәлә музыканттар, Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу сығыш яһай. 6+
- Сәйәхәт һәм мажара һөйөүселәрҙе Ишембай районындағы Торатау шиханы янындағы Ҡыш Бабай резиденцияһында көтәләр, бында 20 декабрҙән 20 ғинуарға тиклем шыршы янында балалар һәм өлкәндәр өсөн байрам программаһы ойошторола. Уға тирмәлә Ҡыш Бабайҙы ҡотлау, атта, санала, каргиҙәрҙә һәм бананда шыуыу инә.
- Ә тәмле ашарға яратҡандар өсөн 11 ғинуарҙа Бөрөлә "Бөрө билмәндәре" гастрономия фестивале уҙғарыла.
- Стәрлетамаҡ ҡалаһы музей-оҫтаханаларҙың яңы йыл фестиваленә барырға тәҡдим итә. 2024 йылдың 27 декабренән 2025 йылдың 13 ғинуарына тиклем сауҙагәр Патрикеевтың йорто бинаһының цоколь ҡатында (Комсомол урамы, 43) тәмле һәм аутентик экскурсиялар һәм оҫталыҡ дәрестәре менән бер юлы 5 экспозиция асыла.
- "Янғантау" геопарҡы экскурсияларға, санала шыуыуға һәм оҫталыҡ дәрестәренә саҡыра. Театрлаштырылған тамашалар республиканың күп районларында һәм ҡалаларында үтәсәк. Туристик комплекстар, глэмпингтар һәм ял базалары үҙҙәренең ҡыҙыҡлы күңел асыу программаларын тәҡдим итәсәк.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Һары мәтрүшкә

❖ Ангина булғанда 2 ҡалаҡ киптереп ваҡланған һары мәтрүшкә үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ауыҙы ябыҡ һауыт менән боҫта 15 минут тоторға, шунан бүлмә температураһында һыуытып һөҙөргә. Тамаҡты сайҡарға.

❖ 1 ҡалаҡ киптереп ваҡланған һары мәтрүшкә үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ҡайнап ултырған һыу боҫонда 15 минут тотоп, 30-40 минут яйлап һыуытырға. Шунан һөҙөп, прополистың 10 процентлы спиртлы экстрактын ҡушырға (төнәтмәнең 1/2 стаканына 20-30 тамсы прополис экстракты нисбәтендә). Йылы дауа менән тамаҡты сайҡарға. Ул тонзиллит булғанда, ауыҙ ҡыуышлығы һәм йотҡолоҡ өҫтөнән башҡа ауырыуҙарынан да ярҙам итә.

❖ Пародонтоздан 25 грамм прополисты 0,4 мм-ҙан да ҙур булмаҫлыҡ итеп ваҡлап, ҡара быялалы шешәгә һалырға һәм 1/2 стакан спирт, йәки 3/4 стакан ҡаты араҡы ҡойорға, прополис ирегәнсе болғатырға. Шунан 50 грамм киптереп ваҡланған һары мәтрүшкә япраҡтарын ҡушып, 15 көн төнәтергә. Ваҡыты-ваҡыты менән болғатып торорға. Аҙаҡтан һөҙөп алырға. Ауыҙҙы сайҡатыу өсөн ярты стакан һыуға 20-30 тамсы төнәтмә тамыҙырға. Ауыҙҙы көнөнә 4-5 тапҡыр сайҡатырға.

❖ Алкоголизм ауырыуынан 4 ҡалаҡ ваҡланған һары мәтрүшкә үләненә 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп, ҡайнап торған һыу боҫонда 20-30 минут тоторға, шунан һыуытып һөҙөргә. Көнөнә 2 тапҡыр - иртәнге һәм төшкө аш алдынан 2-шәр ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу - 2 аҙна. Төнәтмәне даими эсеү алкоголле эсемлектәргә ҡарата ытырғаныу уята.

❖ Аденоидтар һәм полиптарҙы иҫкәртеү өсөн һары мәтрүшкә үләненән мазь әҙерләп (1 өлөш үлән онтағына 4 өлөш тоҙло булмаған аҡ май ҡушырға), шуның 1 балғалауына 5 тамсы сөйәл үләне һутын тамыҙырға, шунан бәләкәй һауытҡа һалып, эмульсия килеп сыҡҡансы һелкетергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр танау ҡыуышлығына 2-шәр тамсы тамыҙырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

***✓ Урал батыр кеше-ара мөнәсәбәттәрҙә мәҙәниәтле аралашыу оҫталағына эйә булып, башҡаларҙы иғтибар менән тыңлай һәм ҡабул итә белгән, шул уҡ ваҡытта үҙ фекерен аныҡ итеп еткерә белгән еҥәрмән.***



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Ҙур сәпсәү
**(Большой улит)**



Ҙурлығы буйынса күгәрсен кеүегерәк, суҡышы бер аҙ өҫкә ҡарап тора. Өҫтән ҡарағанда көл төҫөндә, боғағында, ҡабырғаларында, тамағында, арҡаһында һәм яурынында буй-буй һыҙаттары бар. Ҡанатының аҫҡы яғы һыҙатлы. Аяҡтары оҙон, ҡара йәшел төҫтә. Йәш ҡоштарҙың төҫө аҡһылыраҡ. Һайрауы ике ижектән тора: "тли-тюии".

Тайгала, урманлы далала йәшәй. Ырымбурҙа осоп китеп барышлай ғына күрәләр. Республиканың орнитофаунаны өйрәнеүселәре уны миграция мәлендә күреп теркәп ҡалһа ла, бер тапҡыр ҙа ояһын күргәне юҡ.

Ҡамышлы һаҙлыҡтарҙы, еүеш яландарҙы, үлән менән ҡапланған торфлыҡтарҙы, урман күлдәре ярҙарын үҙ итә. Колонияға тупланмай, парҙар ояны бер-береһенән йыраҡ ҡора. Ояһының төбөнә мүк, ҡоро үлән йәйә. 4 йомортҡа һала, икәүләп сиратлап 24-25 көн баҫалар. Ҡурҡыныс тыуғанда кешегә ҡаршы осоп сыға, йәки, киреһенсә, йәшенә. 4 аҙналыҡ бәпкәләр оса ала. Көҙөн йылы яҡҡа ла янғыҙ осалар. Көнбайыш Европа, Африка, Көньяҡ Азияла ҡышлай. 12 йәшкә тиклем йәшәүе билгеле.

## Һаҙ сәпсәүе
**(Поручейник)**



Божор сәпсәүгә оҡшаған, әммә һомғолораҡ һәм оҙонораҡ аяҡлы. Арҡаһының ҡалаҡ һөйәктәре араһы ғына ҡараһыу, ҡалған өлөшө - аҡ. Боғағы аҡ, буй-буй һыҙатлы. Суҡышы нескә, тура, аяҡтары йәшел йәки һарғылт һоро. Йәш ҡоштар аҡһыл төҫтә.

Ҡош туйы осоронда һаҙ сәпсәүенең "тьюр, тьюр, тьюр-тьюр-тьюр" тип "йырлауын" асыҡ ишетергә була. Урал алдында ул осоп барышлай ғына туҡтап китә торған ҡош. Урал арьяғында иһә оя ҡороп йәшәй, бигерәк тә Үләнде күлендә йыш осрай.

Үләнле күл буйҙарын ярата, парҙар бер-береһенә яҡын оя ҡорһа ла, колония булып тупланмай. Башлыса 4 йомортҡа һала. Икәүләп сиратлап 21-23 көн баҫалар. Бәпкәләрҙе башта икәүләп ҡарайҙар, аҙаҡтан инә ҡош уларҙың ата ҡошҡа ҡалдырып китә.

Август башында уҡ йылы яҡҡа осоп китә башлайҙар. Африка һәм Азияның көньяғында ҡышлайҙар.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# ИРЕКМӘНЛЕГЕМ...

## тормошомдағы иң мәғәнәле осором ул

**Был аҙнала "Беренсе тирмә" төбәк проекты ҡатын-ҡыҙ ирекмәндәренең икенсе төркөмө Махсус хәрби операция зонаһында эшләп ҡайтты. Улар араһында Башҡортостан юлдаш телевидениеһының "Яңылыҡтар" хеҙмәте хәбәрсеһе, Рәсәйҙең атҡаҙанған журналисы, Башҡортостандың Дәүләт йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Рәмзиә Кәримова-Байбулатова ла бар. Уға үҙенең уй-фекерҙәре, тәьҫораттары менән бүлешеүен һорап мөрәжәғәт иттек.**



- Ирекмән ҡатын-ҡыҙҙар отряды ойошторолоуы тураһында ишеткәс, тәүге көндә үк ғариза ебәрҙем. Беренсе төркөмгә өлгөрмәнем, МХО-ға икенсе состав менән юлландым. "Ни өсөн бындай ҡарар ҡабул иттең?", тип һораусыларға "Аҡыл һатма, тәнҡитләмә, үҙең өлгө күрһәт", тигән принциптан сығып, ирекмән булып барырға ҡарар иттем, тип әйтер инем. Әгәр беҙ, хәбәрсе булараҡ, Башҡортостан юлдаш телевидениеһының "Яңылыҡтар" тапшырыуында Ватанға тоғролоҡ, илһөйәрлек тураһында һөйләйбеҙ икән, үҙебеҙҙән башларға тейешбеҙ.

Икенсенән, мин тыуған илемә сикһеҙ рәхмәтлемен. Тыуып-үҫкән төйәгемдән, килен булып төшкән еремдән, иремдән, балаларымдан, эш урынымдан, дуҫтарымдан, ғөмүмән, тормош юлымда осраған кешеләрҙән уңдым. Бушлай ике юғары белем алдым, социаль торлаҡ программаларында ҡатнаштыҡ, балаларыбыҙ дәүләт медицина учреждениеларында донъяға килде, "Әсәлек капиталы" бирҙеләр, балаларға пособиелар түләнеләр, ҡыҙым әле Һамар медицина университетында бюджет нигеҙендә белем ала. Республикам, халҡым мине шәхес кимәленә күтәрҙе. Оло ышаныс күрһәтеп, Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға депутат итеп һайланы, Башҡортостан тележурналистары араһында иң беренсе "Рәсәйҙең атҡаҙанған журналисы", тигән абруйлы исемгә лайыҡ булдым. Шуға күрә хәҙер, Ватаныбыҙ имենлегенә хәүеф янағанда инебеҙҙе ҡуйыр, һүҙ менән генә түгел, анығ эштәр менән яуап бирер ваҡыт етте. Мөхәббәт бит ике яҡлы булырға тейеш. Минең ябай журналист булараҡ аҡсалата ярҙам күрһәтерлек мөмкинлегем юҡ, әммә ошо сәфәремдә ысын йөрәктән ҡул көсөм, күңел йылыһы менән бүлештем.

Хәрби госпиталдә ирекмән булып эшләгән 16 көн күҙ асып йомған арала үтеп тә китте. Тормош юлымдағы иң файҙалы, иң мәғәнәле осор булды ул. Хәҙер "бушҡа йәшәлмәне", тип әйтә алам. Мин Миәкәнән Фәриҙә апай менән хирургия бүлексәһенә эләктем. Яу яланынан килтерелгән яралыларҙы ҡабул иттек, йыуындырҙыҡ, кейендерҙек, ашаттыҡ, инвалид коляскаһында, таяҡҡа таянып йөрөгәндәрҙе төрлө медицина тикшереүҙәренә, процедураларға алып барҙыҡ, операция үткәргәндәрҙе тәрбиәләнек. Һөйләштек, аралаштыҡ, йөрәк йылыбыҙ менән бүлештек. Яҡындарынан алыҫта булған, ауыр тән йәрәхәттәре алған яугирҙарыбыҙ өсөн әсәй ҙә, апай ҙа, һеңле лә булдыҡ. "Бәлки кәрәге тейер", тип, машинка алып барған инем, 16 көн эсендә госпиталдә ятҡан 230 егеттең сәсен алырға, һаҡал-мыйыҡтарын ҡырырға, хатта тырнаҡтарын ҡырҡырға тура килде.

Госпиталь тотош Рәсәйҙең сағылышы, унда Луганск, Донецк, Дағстан, Чечен республикаларынан, Ростов, Волгоград өлкәһенән, Краснодар, Красноярск крайынан егеттәр күп. Башҡортостандан 6 яугир булды, хатта Әбйәлил районынан яҡташымды ла осраттым.

Көнө буйы аяғөҫтә йөрөһәк тә, арып-талһаҡ та, ашап өлгөрмәһәк тә, күңелдә иҫ киткес ҡәнәғәтлек тойғоһо булды. Мин бер ваҡытта ла шул тиклем күп рәхмәт һүҙҙәрен ишеткәнем юҡ ине. Хәҙер илдең һәр мөйөшөндә герой дуҫтарым бар.

Үҙебеҙҙең "Ете ҡыҙ" исемле шәп командаға, республиканың төрлө төбәктәренән - Өфө, Учалы ҡалаларынан, Миәкә, Ҡырмыҫҡалы, Архангел районларынан йыйылған оло йөрәкле, изге күңелле, миһырбанлы гүзәл заттарыбыҙға ҙур рәхмәт белдерер инем. Улар менән бергә ошондай сәфәргә булып ҡайтыуым менән бәхетлемен. Шулай уҡ Зөһрә Гордиенкоға, Гүзәл Коваленкоға ошондай кәрәкле, әһәмиәтле "Беренсе тирмә" төбәк проекты өсөн рәхмәтемде белдерәм!

ӘЙҘӘ...

# УРАЛ БАТЫРҘАЙ БУЛ!



Халҡыбыҙ меңъйыллыҡтар дәүерендә бөртөкләп йыйған тәжрибәбелемдәрен йыйнаҡлап, һүҙҙәрҙә, мәҡәл-әйтемдәрҙә, йырҙарҙа, шулай уҡ "Урал батыр" эпосында төйнәп һаҡлаған. Халҡыбыҙҙың тел байлығындағы был аҫыл һүҙҙәр - ысын мәғәнәһендә һәр кемдең тормошона ҡағылышлы иҫкәртеү-кисәтеүҙәр, тәрбиә ҡанундары булараҡ ҡабул ителә. Улар йышыраҡ ҡулланылып, бер-беребеҙҙә ҡәҙерләү, хөрмәтләү сара булып хеҙмәт итһен, кеше-ара мөнәсәбәттәрҙә һығылмалылыҡ, йомшаҡлыҡ, ихтирамлылыҡ билдәһе булып ҡалһын ине. Мәҫәлән, Урал батырҙың беҙгә ҡалдырған тәғлимәте - кеше-ара, милләт-ара, дин-ара мөнәсәбәттәрҙә юғары кимәлдәге өлгө. Ә Урал батыр, шәхес булараҡ, кем ул? Ошо һорауға яуап итеп, әйҙәгеҙ, уның төрлө кешелек сифаттарын ғүмер миҙгелдәренә ярашлы һанап үтәйек:

- Урал батыр үҙен уратып алған һәр объектка, күренешкә үҙ фекере, ҡарашы булған үҫәрмән;
- Урал батыр донъяны танып-белеүҙә кәрәкле мәғлүмәтте үҙаллы табыуға һәләтле әҙәрмән;
- Урал батыр үҙе эйә булған белемде тормош шарттарында файҙаланыусы, бигерәк тә сетерекле хәл-ваҡиғаларҙа ҡуллана белеүсе беләрмән;
- Урал батыр ҡалыплашмаған ижади фекерләү һәләтенә эйә һөнәрмән;
- Урал батыр кеше-ара мөнәсәбәттәрҙә мәҙәниәтле аралашыу оҫталағына эйә булып, һөйләшеү маҡсатын күҙ уңынан ысҡындырмай, башҡаларҙы иғтибар менән тыңлай һәм ҡабул итә белгән, шул уҡ ваҡытта үҙ фекерен анығ итеп еткерә белгән еңәрмән;
- Урал батыр хаталаныуҙан ҡурҡмайынса, маҡсатлы йүнәлештә ышанысты эш иткән, яңылышҡан осраҡта хаталарҙың сығанағын асыҡлай, тикшерә һәм уларҙан фәһем ала белгән, артабан уларҙы булдырмау юлдарын таба алған уҙаман;
- Урал батыр гәҙеллек өсөн көрәшеүсе ҡаһарман;
- Урал батыр социаль-әхлаҡи нормаларҙы үҙләштергән, яҡындарының һәм эргәһендәгеләрҙең ҡайғы һәм шатлыҡтарын уртаҡлашырға һәр саҡ әҙер булған, халҡының киләсәген ҡайғыртып йәшәүсе көйәрмән;
- Урал батыр хис-тойғоһо тоторҡло, әске зауыҡлы, алдынғы ҡарашлы, күтәренке рухлы иләймән.

Шулай итеп, күрәһегеҙ, Урал батырыбыҙ беҙҙең һәр беребеҙгә кеше һәм шәхес булып үҫеүҙең өлгөлө вариантын ҡалдырған. Әйҙәгеҙ, Урал батыр тәғлимәтен тотайыҡ!

**Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА.**

*✓ Мәсет бинаһын яҡтыртыу өсөн Петербургта инглиз магазинынан һатып алынған ҡиммәтле люстра элеп ҡуйыла. Шуларҙың барыһына ла өҫтәп, тышҡы яғынан аҡ кафель (изразцы) менән көпләнгән бейек таш манара күтәрелә.*

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Граф В.А. Перовский**

**(1833-1842 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған).**

Перовскийҙың тәүге идаралығында ике шәхси таш йорт була: береһен хәҙер Герштейн аптекаһы биләй, икенсеһендә - Турғай губернаторы фатиры.

Был ике өй сауҙагәр Осоргиндыҡы була, ул һуңынан бөлә, һәм был өйҙәрҙең береһе шәхси кешегә, икенсеһе ҡаҙнаға бурыстарын түләтер өсөн һатыла.

Николаев урамындағы өй, хәҙер унда контроль палатаһы урынлашҡан, был йорт 1838 - 1839 йылдарҙа ҡаралама рәүешендә төҙөлеп бөткән булһа ла, уның хужалары - ир менән ҡатын унда күсеп килмәй: киң таралған хөрәфәткә ярашлы, яңы өй үҙенә мәйет һораясаҡ икән. 1852 йылда ошо өй генерал-губернаторҙың канцелярияһы өсөн һатып алына, һәм әлеге хөрәфәткә ышаныу дөрөҫкә сыға: канцелярияның ошо йортҡа күсеүенән һуң унда кешеләр йәшәй башлағас, уларҙың иң ҡарты, 80 йәшлек Зверев үлеп ҡала, ә ул кенәз Волконский һәм генерал Бахметев заманында яҡшы белгән кешеләрҙән була.

Каруанһарайҙы төҙөтә башлау Перовскийҙың башҡорт кантондары начальниктарына ебәргән махсус циркулярҙары менән бәйле: улар бинаның башҡорт халҡы өсөн төҙөтөлөп, үҙ эштәре менән Ырымбурға барып йөрөүсе башҡорттар өсөн файҙалы булыуын аңлатырға тейеш була, сөнки улар быға тиклем шәхси йорттарға фатирға төшөргә мәжбүр булған, Каруанһарай төҙөлөп бөткәс, унда кешеләргә ҡунып китеү һәм үҙҙәренең аттарын тотоу өсөн уңайлыраҡ биналар буласаҡ, тип вәғәҙәләнә.

Бинала тәүҙә казармалар рәүешендәге һикеле ҙур бүлмәләр төҙөтөлә, аҫҡы ҡат ат һарайҙары өсөн тәғәйенләнә. Былар бөтәһе лә Перовскийҙың Азия тибындағы каруанһарайҙарҙы сәфәргә сыҡҡан мосолмандар һәм сауҙагәрҙәр өсөн рус еренә күсерергә теләүе тураһында һөйләй; шуға күрә ул биналар араһына мәсет тә һалырға ҡуша, сөнки Каруанһарайҙа йәшәгән башҡорттарға үҙҙәренең ҡанундары буйынса ихтыяждарын һәм намаҙҙарын тулыһынса үтәй алыу мөмкинлеген булдырыу фарыҙ; быны менән хөкүмәттең мосолмандарҙы көсләп христианлаштырыу уйынан үтә алыҫ булыуын күрһәтергә тырышалар, ә бындай имеш-мимеш хәбәрҙәрҙе фанатиклыҡтары хәттин ашҡан Ҡаҙан татарҙары йәшертен рәүештә тарата, ә хөкүмәт, киреһенсә, үҙ иҫәбенә төбәктә булған барса мәсеттәрҙән дә күркәмерәк мәсет төҙөтә.

Ошо маҡсатта бында яңы мәсетте биҙәү өсөн кәрәк булған хәйриә аҡсаларын йыйыу маҡсатында башҡорттарҙы саҡыралар. Ул хәйриә аҡсаларын йыйып туплау вазифаһы Түбәнге Себенле ауылы ахуны Абдулла Дәүләтшинға йөкмәтелә, ул сығышы буйынса татар булһа ла, башҡорт ғәскәренә теркәлгән була. Ул 30 мең һумға тиклем ассигнациялар йыя.

Мәсет бинаһын яҡтыртыу өсөн Петербургта инглиз магазинынан һатып алынған ҡиммәтле люстра элеп ҡуйыла. Шуларҙың барыһына ла өҫтәп, тышҡы яғынан аҡ кафель (изразцы) менән көпләнгән бейек таш манара күтәрелә.

1841 йыл аҙағында Каруанһарайға башҡорт ғәскәре командующийының канцелярияһы күсерелә һәм чиновниктарға, йәнә бында хеҙмәткә ебәрелгән, 50 кешенән торған башҡорт командаһына фатирҙар бирелә.

Башҡа башҡорттар өсөн бүлмәләр асыу хаҡында бер кем дә уйлап та ҡараманы һәм Каруанһарайҙа уларҙан бер кем дә бер ҡасан да туҡталманы. Бинаны ҡунаҡханаға әйләндереү уны йылытыу, таҙа итеп тотоу һәм ремонтлау йәһәтенән ҡиммәткә төшөр ине. Бинаның һикеле казармалар урынлашҡан уң фасады канцелярия бүлмәләре итеп үҙгәртеп ҡорола, ә һул яғында губернатор бүлмәләре урынлаша; аттар өсөн арандар булған түбәнге ҡат көмбәҙҙәре уның тәүге тәғәйенләнешен күрһәтеп тора.

Мәсетте асырға мөфтөй һәм 300-гә яҡын мосолман саҡырыла, унан башҡа бер ниндәй саҡырыуһыҙ, ҡыҙыҡһынып килгән кешеләр бик күп була.

Мәсетте асыу тантанаһы батша ғали йәнәптәре Николай Павловичҡа таж кейҙереү көнөнә тап килтерелеп, 22 августа уҙғарыла. Күңел асыуҙар азиаттарға хас зауыҡ менән ойошторола: көрәштә бер рәттән өс кешене еңеүсегә бүләккә яулыҡ йә иһә шәл бирелә, ат сабыштарында призлар итеп 20 һумлыҡ халаттар йә иһә кафтандар, шулай уҡ бер нисә аршынға тиклем ҡыҫҡара барған ситса киҫәктәре тапшырыла.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ТАРИХ ҺӨЙЛӘЙЕК ЙӘШТӘРГӘ

Бер көндә танышым әлегерәк үҙе менән булған шундай ваҡиға тураһында һөйләне: "Миңә 30-33 йәш тирәһе булғандыр. Бер саҡ автобусҡа индем дә, оҙон буйлы бер егет янына барып баҫтым. Бәләкәй генә буйлымын, теге егеттең ҡултыҡ аҫтынан ғынамын. Ул егет шаяртырға уйлағандыр инде - минең иңемә терһәген һалды. Егеткә әйләнеп ҡарамай ғына, яҡындағылар ишетелерлек итеп:

- Һеҙгә уңайлымы? - тип һораным.
- Эйе, үҙегеҙ ғәйепле, үҫмәгәнһегеҙ бит, - тип яуапланы егет тә миңә ҡарамай ғына.
- Үҫеп булманы шул, 41-се һуғыш йылында тыуып, бала сағым аслыҡҡа тура килде бит, - тип әйтеүем булды, егет терһәген ала һалды. "Әҙәм затын дауам иттерергә ярап ҡалдыҡ шулай ҙа", тигән һүҙҙәремдә, боролоп, ул егеттең йөҙөнә ҡарап әйттем.

Шул саҡ егет эргәбеҙҙә ирәйеп ултырған егетте елтерәтеп торғоҙҙо ла, ултырғысҡа мине ултыртты. Уның йөҙө ҡыҙарып киткән, ә күҙҙәрендә йәш бөртөктәре йылтырай ине.

- Һуғышта, аслыҡта тыуғандарға айырым хөрмәт күрһәтергә тейешбеҙ!- тине ул ҡысҡырып, минән ғәфү үтенде һәм киләһе туҡталышта автобустан төшөп ҡалды...

Бына шулай, йәштәрҙең дә төрлөһө бар. Беҙ уларҙы, йәштәр илебеҙҙең, халҡыбыҙҙың һуғыш, аслыҡ, емереклек тигән ҡайғыларҙы үтеүен онотоп шашына, тип ғәйепләйбеҙ ҙә ул. Беҙ һөйләмәгәс, улар уны ҡайҙан белһен? Күп тапҡырҙар һөйләргә, иҫтәренә төшөрөргә кәрәк. Бигерәк тә Мәскәү, башҡа ҡалалар урамдарында, теләһә ниндәй яҙыуҙар күтәреп, ғауғасылар аҡсаһына һатылып йөрөүсе йәштәрҙең иҫтәренә төшөрөргә кәрәк ил тарихын. 1941-1945 йылдарҙы үтеп, фашизмды еңгән даныбыҙҙы 9-сы майҙа ғына түгел, йыл әйләнәһенә һөйләйек йәштәргә, балаларға. Ошо батырлыҡ тарихын белһә, үҙ илен һөйһә, уның үҫешенә бөтә тырышлығын бағышлап йәшәйәсәк улар ҙа. Һәр хәлдә, шуға ышанғы килә. Әйҙәгеҙ!

**Айгөл АХУНОВА.**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Берлин стратегик һөжүм итеү операцияһында

Икенсе эшелонда барған 14-се гв. атлы дивизияһы бер аэродромда 37 немец самолетын ҡулға төшөрә, уларҙың 29 төҙөк була,боеприпастар тейәлгән эшелонды шартлата. Веренклоуҙағы хәрби әсирҙәр лагерынан 400-ләп төрлө милләт кешеләре азат ителә.

Был көндәрҙә башҡа участкаларҙа ошондай ваҡиғалар була: 20 апрелдә 2-се Белорус фронты ғәскәрҙәре Вест-Одерйылғаһын аша сығып, көнбайышҡа табан хәрәкәт итеүен дауам итә, 21 апрелдә 1-се Белорус һәм 1-се Украин фронттары ғәскәрҙәре Берлиндың ҡала яны ҡасабаларына бәреп инә. Шул уҡ көндә 1-се Белорус фронтының 3-сө һәм 5-се удар армиялары Берлиндың эске оборона ҡулсаһын өҙә, ә 79-сы уксы корпусы Германия баш ҡалаһының төньяҡ-көнсығыш ҡырыйына бәреп инә. 22 апрелдә 3-сө гв. танк армияһы беҙҙең авиация ярҙамында Берлиндың тышҡы оборона ҡулсаһын да өҙөүгә өлгәшә. Совет частары Берлин урамдарына килеп инә. Берлин гарнизонын тулыһынса изоляциялау өсөн шарттар барлыҡҡа килә. 1-се Украин фронты көньяҡтан һәм көньяҡ-көнбайыштан 9-сы немец армияһына ҡысымды көсәйтә, ә 1-се Белорус фронты яуға үҙенең икенсе эшелонының 3-сө армияһын индерә. 1-се Украин фронты армиялары менән бергә 1-се Белорус фронтының 3-сө һәм 69-сы армиялары дошмандың Франкфурт-Губенск төркөмөн тулыһынса ҡамауға ала. Шул уҡ ваҡытта 1-се Белорус фронтының башҡа көстәренең Берлинды төньяҡтан һәм төньяҡ-көнбайыштан уратып алыу операцияһы уңышлы тамамлана. Шулай итеп, Берлин районында немец-фашист армияһының барса ғәскәрҙәрен тулыһынса ҡамау һәм юҡ итеү мөмкинлеге хасил була.

Совет ғәскәрҙәренең һөжүме дауам итә. 22 апрелдә 1-се Белорус фронты командующийы 7-се гв. атлы корпусы алдында яңы боевой бурыс ҡуя: Креммен, Флатов, Татцов йүнәлешендә һөжүмде дауам итергә, һуңынан, Поляк Ғәскәренең 1-се армияһы Ораниенбург-Вельген рубежына сыҡҡас, көнбайыш йүнәлешендә хәрәкәт итеп, Ратенов районына сығырға, алда барыусы подразделениеларҙы Эльба йылғаһына табан йүнәлтергә. 24 апрелдә 16-сы гв. атлы дивизияһының 60-сы һәм 62-се гв. атлы полктары Креммен тораҡ пунктына сыға һәм, ике сәғәткә һуҙылған алыштан һуң, уны ала. 62-се гв. атлы полкына шундай бойороҡ бирелә: артабан Гросс Цитен, Нацен, Метлов, Липе, Дамме, Неннхаузен маршруты буйынса хәрәкәт итергә. 62-се гв. атлы полкының 3-сө эскадроны Метлов пунктын алыу маҡсатында алыш башлай, 40 һалдатын һәм 3 танкын юғалтҡан дошман сигенергә мәжбүр була.

25 апрелдең төнөнә ҡаршы 16-сы гв. атлы дивизияһы частары Метлов, Дамме, Неннхаузен райондарында туплана. 25 апрель иртәнһә 1-се Украин фронты ғәскәрҙәре, Берлинды көньяҡтан урап уҙып, Бранденбург ҡалаһына яҡынлаша. Килеп тыуған хәлдә иҫәпкә алып, 1-се Белорус фронты командующийы көстәрҙең бер өлөшөн көньяҡҡа бороп ебәреп, Бранденбург ҡалаһы районына сығарырға ҡарар итә. Кесе операцияның төп маҡсаты - 1-се Украин фронты ғәскәрҙәре частары менән бергә Берлинды тулыһынса изоляциялау өсөн тышҡы ҡамау ҡулсаһын тоташтырыу. Был көстәр составына 7-се гв. атлы корпусының 16-сы гв. атлы дивизияһы ла индерелә. Ул 9-сы гвардия танк корпусының 47-се танк бригадаһы менән көсәйтелә.

16-сы гв. атлы дивизияһы корпус командирынан көньяҡҡа табан Неннхаузен, Букков, Гарлитц, Марцане маршруты буйынса хәрәкәт итергә һәм 25 апрелдең кисенә 47-се танк бригадаһы менән бергә Бранденбургты алырға тигән бойороҡ ала. Бер көн эсендә дивизия частары 80 км ара үтеп, Барневитц, Марцане, Брилов, Букков, Гарлитц, Криге тораҡ пункттарын ала һәм Зило-каналға барып етә.

Был көндә 14-се һәм 15-се гвардия атлы дивизияларына Хафель йылғаһының көнсығыш яры буйында, Ратенов-Притцербе участкаһында оборонаға күсергә һәм Эльба йылғаһына тиклем разведка алып барырға бойорола.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Беҙҙең лицейҙа профориентация буйынса бик күп эштәр атҡарыла һәм төрлө производство үҙәктәренә экскурсияларға барып, һәр һөнәр тураһында фекер туплап ҡайтып торабыҙ.*



# ЗАМАН ШАУҠЫМЫНА үҙебеҙ булып

**2016 йылда ике алдынғы белем усағын - Республика башҡорт лицей-интернатын һәм Республика иҡтисад лицей-интернатын берләштереп, Республика инженер лицей-интернаты барлыҡҡа килтерелгәйне. Ошо йылдар эсендә яңы белем усағының да даны алыҫтарға таралып өлгөрҙө: Республика инженер лицей-интернаты педагогик кадрҙары менән дә, уҡыусылары менән дә хаҡлы ғорурлана. Нәҡ бында Бөтә донъя кимәлендә химия буйынса олимпиадаларҙа беренселекте бирмәгән уҡыусылар уҡый, нәҡ бында Рәсәй халыҡ уҡытыусыһы Лиза Ҡыям ҡыҙы Әһәҙуллинаның остазлыҡ мәктәбе дауам итә. Бына шундай шәп лицей-интернаттың быйылғы сығарылыш уҡыусылары Илһам ИЛТЕНБАЕВ, Фаил МӘҠСҮТОВ, Рәмил ДАУЫТОВ һәм Лиана КОЗАДАЕВА менән әңгәмәләшеү форсаты тейҙе. Йәштәр менән бик күп төрлө темаларға фекер алыштыҡ, ҡайһы берҙәрен һеҙҙең дә иғтибарға тәҡдим итәбеҙ.**

**Тәү сиратта үҙегеҙ менән таныштырып, Республика инженер лицей-интернатында белем алыуы оҡшаймы-юҡмы - шулар тураһында һөйләп китегеҙ әле...**

**Илһам:** Мин был лицей-интернатҡа 10-сы класҡа ғына уҡырға килдем, әммә тиҙ генә өйрәнеп киттем. Бында бик оҡшай, сөнки уҡытыу йүнәлештәре мин яратҡан предметтарға нигеҙләнгән. Математика, информатика, физика предметтарынан, шулай уҡ башҡорт теленән олимпиадаларҙы ҡалдырғаным юҡ. Беҙҙең лицейҙа нәҡ олимпиада хәрәкәтендә ҡатнашыуға ҙур иғтибар бирелә, сөнки был беҙгә бик кәрәк: исемлеккә ингән предметтар буйынса олипиадалар еңеүселәре юғары уҡыу йорттарына ингәндә өҫтәмә балл ала, хатта бөтөнләй имтихан тапшырмай уҡырға алыныу мөмкинлеге бар. Мәҫәлән, Өфө нефть техник университетының предуниверсарийы - университет алды белем биреү проекты эшләп килә, беҙ 10-сы кластан шунда шөғөлләнә башлайбыҙ һәм БДИ һөҙөмтәһе ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, вуздың үҙ имтиханын тотоп уҡырға инеп китергә була. Ә инде һәм олимпиада еңеүсеһе булып торһағыҙ, иң кәмендә 80 мең һум стипендия тәғәйенләүҙәре бар беренсе курста. Бының өсөн тырышырға була һәм беҙ мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырмаҫҡа ынтылабыҙ.

Уҡыуҙан бушыраҡ ваҡыттарҙа волейбол һәм баскетбол түңәрәктәренә йөрөйөм, беҙҙең команда ла, ҡыҙҙарҙыҡы ла төрлө мәктәп-ара ярыштарҙа һынатмай. Шулай уҡ мин вокаль-инструменталь ансамбленең өлкәндәр төркөмөндә гитарасы һәм йырсы. Был ансамблдә 3 төркөм шөғөлләнә: бәләкәйҙәр - 5-6 кластар, уртансылар - 7-8 кластар һәм өлкәндәр. Был күсәгилешлек өҙөлмәһен өсөн шулай эшләнгән һәм беҙ һәр байрам сараһына ныҡлы әҙерләнеп, ихлас ҡатнашабыҙ. Тағы ла быйыл пилотһыҙ осоу аппараттары буйынса өҫтәмә белем бирә башланылар, әммә беҙҙе алда БДИ һынауҙары көткәнгә күрә, унда алмауҙары ҡыҙғаныс. Был түңәрәктә 5-8 класс уҡыусылары шөғөлләнә, улар унда дрондарҙың 3D конструкцияһын төҙөй, төрлө деталдәрен принтерҙа баҫып сығара, шуларҙы йыя һәм аҙаҡ идара итергә өйрәнәләр, һынауҙар үткәрәләр. Бына шундай иң ҡыҙыҡтан мәхрүм ҡалдыҡ. Уның ҡарауы, өлкән класта булғас, спорт залының асҡысын ышанып тапшырҙылар һәм форсаты тейгән һайын шунда төрлө күнекмәләр яһарға, дуҫтар менән аралашырға, башты ял иттереп алырға йүгерәбеҙ.

**Рәмил:** Лицейҙа тормош гөрләй. Мин Мәләүез ҡалаһынан һәм бында 7-се кластан алып белем алам, үткән уҡыу йылынан Лицей йәштәре берлеге президенты булдым, әммә хәҙер 11 класҡа еткәс, вазифамды йәштәргә тапшырҙым. Был ойошмалағы иптәштәрем менән бик күп төрлө саралар ойошторҙоҡ, ирекмәнлек менән дә шөғөлләнәбеҙ. Күптән түгел Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы яугирҙарға гуманитар ылауҙы тейәшергә лә ярҙам иткәйнек. Лицейҙа үткәрелгән олимпиадаларҙа куратор булараҡ ҡатнашабыҙ, байрам сараларын үҙебеҙ ойошторабыҙ. Белем усағыбыҙҙың етәкселегенә төрлө яҡлап ҡулдан килгәнсә ярҙам итергә тырышабыҙ шулай. Беҙҙә ҡыҙҙар һәм егеттәр айырым корпустарҙа уҡытылғас, Лицей йәштәре берлегенең дә ике президенты йыл һайын яңынан һайлана.

Мин был егет-ҡыҙҙарҙан айырмалы рәүештә, олимпиадасы түгел, шуға быға тиклем буш ваҡытым күберәк булды һәм мин уны файҙаһыҙға үткәрмәҫ өсөн йәштәр ойошмаһының президенты булырға ҡарар иткәйнем. Былтырғы уҡыу йылында ҡыҙҙар корпусынан коллегам менән лицей уҡыусыларына ял итеү һәм индивидуаль шөғөлләнеү бүлмәләрен йыһазландырыу проектын бойомға ашыра алдыҡ. Уны эшләргә лицейҙың 30 йыллыҡ юбилейына йыйылған сығарылыш уҡыусыларыбыҙ, ата-әсәләр бик ныҡ ярҙам итте, куар-код буйынса сығымдарҙы ҡапларлыҡ аҡса күсерҙеләр. Йәмәғәт эштәренән тыш, мин лицейҙан ситтә бокс менән профессиональ кимәлдә шөғөлләндем, заманса бейеүҙәргә өйрәндем. Уҡытыусыбыҙ Вадим Ринат улы Ниғмәтуллин менән 3D-моделләү нескәлектәренә төшөндөм, был миңә киләсәктә ӨДНТУ-ның архитектура-төҙөлөш факультетына уҡырға ингәндә бик кәрәк буласаҡ.

**Фаил:** Был белем усағы тураһында атай-әсәйемдең таныштары һөйләгәйне башта. Яҡшы уҡыталар, ысынлап та белем алып сығырға була, тинеләр. Шуға 7-се кластан алып ошонда уҡырға индем һәм был ҡарарыма һис тә үкенмәйем. Айырыуса физика һәм химия дәрестәрен яратам, химия буйынса Бөтә Рәсәй кимәлендәге олимпиадала призер ҙа булдым. Бында Лиза Ҡыям ҡыҙы Әһәҙуллинаның уҡыусыһы, беҙҙең уҡытыусыбыҙ Айнур Ғүмәров менән Тимур Манаев башланғысында Олимпиада хәрәкәте остаздары ассоциацияһы (АНОД) тигән ойошма булдырылған һәм химия буйынса олимпиада хәрәкәтен бик әүҙем популярлаштыралар. Олипиадала ҡатнашып, еңеү яулаған өсөн юғары уҡыу йорттарына инеүҙе еңелләшеүе, унда юғары күләмдә стипендия түләнәсәген аңлау беҙҙе лә дәртләндерә.

Ә уҡыуҙан тыш ваҡыт уҙғарыуға килгәндә, элек тхэквондо менән шөғөлләнгәйнем, әммә торабара ҡыҙыҡһыныуым һүрелде һәм урта кластарҙа үҙемде табырға тырышып, төрлө предметтар буйынса ойошторолған олимпиада түңәрәктәренә йөрөй башланым. Математика, информатика буйынса ла шөғөлләнгәйнем, әммә иң нығы химия оҡшаны. Әле бик яҡшы ғына һөҙөмтәләр күрһәтеп, ошо фән менән тәрәндән шөғөлләнеүемде дауам итәм.

**Лиана:** Мин үҙем Белорет районының Асы ауылынан булам, шулай уҡ бында 7-се класҡа уҡырға килгәйнем. Хәҙер химия буйынса олимпиада хәрәкәтендә ҡатнашам, АНОД тәрбиәләнеүсеһемен. Химия буйынса үткәрелгән "Изотоп", "Кристалл" һәм башҡа төрлө мәктәптәрҙә булғаным бар. Бөтә Рәсәй кимәлендәге олимпиадаларға сығам. Ә бына уҡыуҙан тыш артыҡ бер нәмә менән дә шөғөлләнмәйем, сөнки олимпиадаларға әҙерлек бик күп ваҡытты ала. Дәрестәрҙән һуң ятаҡҡа ҡайтаһың да, өҫтәмә китаптар уҡырға, төрлө мәсьәләләр сисергә ултыраһың, өйгә эштәрҙе атҡарып сыҡҡансы артыҡ ваҡыт та ҡалмай. Әлбиттә, бындай тығыҙ көн тәртибе арытыңҡырай, әммә үкенерлек түгел. Сөнки киләсәгебеҙ өсөн бының ни тиклем файҙалы булыуын яҡшы аңлайбыҙ: күңелең теләгән йүнәлеш буйынса юғары уҡыу йортона инергә, юғары стипендия алып уҡырға, олимпиадаларҙа еңгән өсөн премиялар алырға һәм аҙаҡ уңышлы кеше булырға теләһәң, тырышаһың.

**Сығарылыш класында уҡыйһығыҙ барығыҙ ҙа, киләсәктә кем булырға хыялланаһығыҙ, ниндәй һөнәр алырға ниәтләйһегеҙ? Ғөмүмән, бөгөн ниндәй һөнәрҙәр актуаль?**

**Лиана:** Мин химия фәнен ныҡ яратып өйрәнһәм дә, буласаҡ һөнәрем тураһында аныҡ ҡына яуап ҡайтара алмайым. Был турала уйларға, ҡайҙа барғым, ниндәй һөнәрҙе үҙләштергем килеүен аңлар өсөн тағы кәмендә ярты йыл бар әле. Ә былай алғанда, илгә һәр ваҡыт та табиптар кәрәктер, яҡын киләсәктә шулай уҡ программистар талап ителер, тип уйлайым.

**Рәмил:** Минең атайым хәрби кеше булғас, тәүҙә мин дә уның юлын ҡыуырға теләй инем. Әммә уҡыуымдың һуңғы йылдарында архитектура факультетының уникаль төҙөлөш йүнәлеше буйынса артабан белем алырға, тигән ниәт тыуҙы. Сөнки вуз - ул минең өсөн күберәген уҡыу тураһында түгел, ә танышлыҡтар һәм бәйләнештәр булдырыу, яңы мөмкинлектәр икәнен төшөндөм. Ҡайһы беребеҙ әле һаман аныҡ ҡына үҙенең киләсәген күҙ алдына килтерә алмаһа ла, беҙҙең лицейҙа профориентация буйынса бик күп эштәр атҡарыла һәм төрлө производство үҙәктәренә экскурсияларға барып, һәр һөнәр тураһында фекер туплап ҡайтып торабыҙ. Өфө моторҙар төҙөү производство берекмәһенең самолеттарҙың двигателдәрен ҡорған процесын ҡарарға барғайныҡ, "Башнефть" эшен дә күреп беләбеҙ. Шулай ҙа хәҙерге заманда ялланып эшләү абруйлы түгел кеүек күренә. Әммә мин төҙөүсе булыу һәр ваҡыт актуаль, тип иҫәпләйем. Айырыуса киләһе бер нисә йыллыҡта был һөнәр кешеләренә һорау юғары буласаҡ. Сөнки Президентыбыҙ Владимир Владимирович боронғо рус ерҙәрен кире ҡайтара, һәм илебеҙҙең яңы төбәктәрен тергеҙергә, матур биналар төҙөргә архитекторҙар, төҙөүсе эшсе ҡулдар мотлаҡ кәрәк буласаҡ. Бынан тыш, ҡулы эш белгән кеше һис тә юғалып ҡалмаясаҡ, тип уйлайым. Йорт һала белһәң, исмаһам, үҙеңә йәшәр урын хәстәрләй алаһың бит.



*Йәштәр үҙенең генә түгел, республикаһының да киләсәген хәстәрләргә тейеш. Төбәгебеҙҙе алға ебәреү тураһында уйларға һәм эшләргә кәрәк. Юғарыға үрләһәң дә, Баймаҡтың бер төпкөл ауылынан булыуыңды онотмаҫҡа кәрәк. Ә дөйөм алғанда, егет-ҡыҙҙарҙа миңә изгелек һәм асыҡ күңеллелек кеүек сифаттар яҡын. Заман ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, үҙебеҙҙең башҡорт һәм Рәсәй традицияларын тоторға, артығын ҡыланмаҫҡа кәрәк.*

**Фаил:** Профориентация буйынса дәрестәр һәр аҙна һайын үткәрелә һәм беҙгә унда төрлө һөнәрҙәр тураһында һөйләйҙәр, экскурсияларға ла барып ҡайтабыҙ. Унысы шулай, әммә мин үҙем һаман да ниндәйҙер бер һөнәрҙе үҙләштерәм, тигән аныҡ ҡына фекергә килмәгәнмен әле. Химияға бәйле булырын ғына беләм, ләкин табипмы, нефть химияһы өлкәһенә китергәме, йәки тағы берәй һөнәрҙе ҡарарғамы... Шулай әле уйларға ваҡыт булғанда, ашыҡмай йөрөп ятам.

**Илһам:** Артабан ҡайҙа уҡырға барыу темаһы беҙҙең өсөн иң ауыры ул, сөнки беҙгә һайларға

***✓ Алдына ниндәйҙер маҡсат ҡуйып, шуға ынтылған һәм бер нәмәгә ҡарамаҫтан алға аҙымдар яһаған, ситкә тайпылмаған кеше тураһында "текә" тип әйтергә мөмкиндер.***

ирек бирелһә лә, был һөнәрҙәрҙең, хеҙмәт тармаҡтарының киләсәктә үҫеш юлы ниндәй булыры асыҡ түгел. Мин әлеге ваҡытта ӨДНТУ-ның үткәргес торба транспорты факультетында уҡыуымды дауам итергә күҙаллап торам, шулай ҙа Мәскәү йәки Санкт-Петербург вуздарын да күҙ уңынан ысҡындырмайым. Шуныһы теүәл билдәле - буласаҡ һөнәрем информатикаға бәйле буласаҡ, компьютер артында ултырып эшләргә бәләкәйҙән яратам һәм был өлкә мине ныҡ ҡыҙыҡһындыра. Лицей-интернатҡа уҡырға ингәс, был программалаштырыу өлкәһенең үҫешен, яңы мөмкинлектәрен күреп, йөрәгемдә бала саҡтағы хыялым уянды. Дөйөм алғанда, киләсәктә программалай белеүселәргә һорау бермә-бер артасаҡ, сөнки хәҙер бөтә нәмә информатиканы белеү нигеҙҙәренә ҡоролған. Машиналарҙы өйрәтәләр, нейроселтәр ҡулланалармы унда. Бына мин, БДИ-ға әҙерләнеп, ваҡытым бик тығыҙ булыуға ҡарамаҫтан, маркшейдер-геодезист булып эшләйем һәм был һөнәрҙам итеүҙе күҙалламаһа ла, йәмәғәт эштәрендә ҡатнашырға була.

**Бөгөн Башҡортостан йәштәре ниндәй булырға тейеш?**

**Илһам:** Мин улар ниндәй булмаҫҡа тейеш, тигән өс билдәне әйтә алам: "квадробер", "пикми" ("мине һайла"), "лапкер" булмаҫҡа. Квадроберҙар тураһында күберәк ишетеп беләһегеҙҙер, ә бына "лапкер" тигәне 2022-2023 йылдарҙа бик популяр булған слайм уйынсыҡтарының бесәй тәпәйе формаһындағын уйнатыусылар. Шуны уйнатып, айырым бер субкультураға әйләнеп баралар. Беҙгә халҡыбыҙҙың тарихына күберәк күҙ һалырға, арҙаҡлы шәхестәребеҙҙән үрнәк алырға кәрәк. Теләһә ниндәй заман шауҡымына эйәреп, үҙебеҙҙең индивидуаллекте юғалтмаҫҡа, был йәһәттән кеше фекеренә артыҡ иғтибар итмәҫкә һәм үҙең булып ҡалырға тырышыу мөһим. Ҡыҙҙарға ла эске һәм тышҡы матурлыҡтарын, тәбиғилектәрен һаҡларға кәрәк. Хәҙерге йәш быуынға үҙенең фекерен асыҡ әйтеүе

**Рәмил:** Беҙҙең лицей - ул шәп кешеләр менән танышыу өсөн яҡшы мөмкинлектәр. Бында уҡырға килгәс, мин буласаҡ нефтсе, программалаусы, табип, прокурор, төҙөүсе һ.б. менән таныштым, тип әйтә алам. Шулай бәйләнештәр барлыҡҡа килә һәм беҙ дуҫлашабыҙ, ойошҡанырaҡ була барабыҙ. Бынан тыш, өлгө күрһәтер элекке сығарылыш уҡыусылары - уңыш ҡаҙанған кешеләр бар.

Республика инженер лицей-интернатында дуҫлыҡ мөхите хөкөм һөрә, бер ғаилә кеүек йәшәйбеҙ, һәр ҡайһыбыҙ менән һөйләшергә, кәңәш һорарға мөмкин. Әлбиттә, был оҙаҡ йылдар дауамында белем усағы етәкселегенең, педагогтарҙың һәм балаларҙың хеҙмәтенә бәйле. Элек бигерәк тә күңелле була торғайны: 11 класс уҡыусылары гел костюм-салбарҙа йөрөнө, беҙҙең кеүек бәләкәйерәк кластарҙа уҡығандарҙың хәл-әхүәлдәрен һораша торғайнылар, берәй һорау килеп тыуһа, улар аша хәл итергә була ине. Лицей йәштәре берлегендә торған ағайға, өй төҙөргә лә өйрәтте, ғаилә ҡороу буйынса ла кәңәштәрен әйтеп тора. Ә бында, лицейҙа, беҙ бәләкәйерәк кластарҙа уҡыған малайҙарға үҙебеҙҙең ошо тәрбиәне бирергә тырышырға тейешбеҙ һымаҡ тоям. Әммә тик һүҙ менән генә күп нәмәне аңлатып бөтөп булмай.

**Рәмил:** Бәләкәй класс уҡыусылары тураһында әйткәндә, уларға төрлө тормош хәлдәре тураһында һөйләшеп ултырыуға ҡарағанда, телефонда уйын уйнау ҡыҙыҡлыраҡ тойола. Үҙ-ара аралашыуҙары ла шунан ары китмәйҙер кеүек.

**Илһам:** Эйе, хәҙерге йәш быуын технологияларҙы дөрөҫ ҡуллана белмәй был йәһәттән. Әлбиттә, уйынға ла ваҡыт бүлергә кәрәктер, "Тик-ток"та ла видео ҡарап, аралашып алырға мөмкиндәр. Әммә көн һайын түгел. Бындай ҡыҙыҡтырғыс нәмәләрҙе көндәлек мәшәҡәттәрҙән бер аҙ арынып, ял итеп алыу өсөн уйлап тапҡандар. Ә шул көндәлек мәшәҡәттәрһеҙ тормош - тормош булмай.

# ЭЙӘРМӘЙБЕҘ...

## ҡаласаҡбыҙ

кешеләре лә хәҙер заманса техниканы ҡуллана: ерҙе спутник ярҙамында үлсәйҙәр, компьютерҙа берәй тауҙың теүәл күсермәһен эшләп ҡуялар, шул уҡ квадрокоптерҙарҙы ҡулланып та тикшеренеү үткәрәләр, 3D-модель яһайҙар һ.б. Геодезия белгесенә лә информатика өлкәһендә белемле булыу талап ителә, тип әйтмәксемен. Башҡа һөнәрҙәрҙә лә шулай инде хәҙер, техник үҫеш менән бергә атларға кәрәк.

**Бер аҙ шундай фәлсәфәүи һорауға яуап эҙләп ҡарайыҡ әле: кешенең эше тәү сиратта үҙенә файҙа килтерергә тейешме, әллә башҡаларғаламы?**

**Рәмил:** Минеңсә, тәүҙә үҙеңде тәьмин итергә кәрәк, аҙаҡ башҡаларға ла ярҙам ҡулы һуҙырға була. Ә дөйөм алғанда, тик үҙе аяҡҡа баҫҡан кеше генә йәмғиәткә етди ярҙам күрһәтә алыу кимәленә етә ала.

**Фаил:** Йәмғиәткә ярҙам итеү-итмәү, моғайын, һәр кемдең үҙ ихтыярындалыр ул. Теләге булған, шундай идея менән янған кеше файҙа килтерә, йәмғиәткә ярҙам итәсәк һәм уға бер нәмә лә ҡамасау була алмай. Ә теләге булмағанды ирекһеҙләп торорға ла кәрәкмәй.

**Илһам:** Йәмғиәткә лә, үҙеңә лә файҙа килтерергә, был ике өлкәлә алтын урталыҡ һаҡларға тырышырға кәрәк. Шунһыҙ йәшәүҙең мәғәнәһе лә булмайҙыр.

**Лиана:** Мин был осраҡта Илһам менән килешәм һәм тәү сиратта һөнәрем үҙемә оҡшаһа, икенсе яҡтан, ул мине йәмғиәт өсөн кәрәкле белгес итергә тейеш. Мәҫәлән, табиптар, ҡотҡарыусылар кешеләрҙең ғүмерҙәрен ҡотҡара бит. Хатта һөнәрең шундай туранан-тура кешегә ярауыр, был әллә телефондарға йомолоп ултырыуҙан, әллә тәрбиәнән килә ул, белмәйем.

**Рәмил:** Беҙ быуындар киҫелешендә тыуған балалар булғангамы, кемебеҙҙер яңы трендтарҙы үҙ итә, кемебеҙҙер өлкәнерәк быуындың әйткәненә ҡолаҡ һала. Мин заман башҡорттары Георгий Жуков һымаҡ стратегик аҡылға эйә булырға һәм аҙымдарын алдан күҙаллай белергә тейеш, тип иҫәпләйем. Ә бөгөнгө йәмғиәтебеҙгә килгәндә, ул артыҡ ныҡ ҡурсалай, тип әйтер инем. Егет кеше сәсен ҡыҙылға буяп, йәки ҡолағына һырға тағып йөрөргә тейеш түгел.

**Лиана:** Башҡортостан йәштәре үҙ иленең патриоттары булырға тейеш, ҡайҙа ғына йөрөһәләр ҙә Кесе Ватаныбыҙ тураһында һәр ваҡыт иҫтә тоторға һәм уны хәстәрләргә тейешбеҙ. Ҡыҙҙарға тәбиғи матурлыҡтарын һаҡларға, төрлө операциялар менән артыҡ мауыҡмау яҡшы булыр. Ә егеттәрҙең мин батыр, ғәҙел, выжданлы, асыҡ күңелле булыуын оҡшатам.

**Фаил:** Йәштәр үҙенең генә түгел, республикаһының да киләсәген хәстәрләргә тейеш. Төбәгебеҙҙе алға ебәреү тураһында уйларға һәм эшләргә кәрәк. Юғарыға үрләһәң дә, Баймаҡтың бер төпкөл ауылынан булыуыңды онотмаҫҡа кәрәк. Ә дөйөм алғанда, егет-ҡыҙҙарҙа миңә изгелек һәм асыҡ күңеллелек кеүек сифаттар яҡын. Заман ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, үҙебеҙҙең башҡорт һәм Рәсәй традицияларын тоторға, артығын ҡыланмаҫҡа кәрәк.

**Башҡорт инженер лицей-интернатында белем алыуҙың өҫтөнлөктәрен атай алаһығыҙмы?**

**Рәмил:** Минең атайым ил ҡушыуы буйынса йыш ҡына ситтә хеҙмәттә йөрөгәс, бала саҡтан әсәйем һәм ике туған ағайымдан тәрбиә алып үҫтем. Миңә нимә яҡшы, нимә насар тигәндә бәләкәйҙән аңлатып үҫтерҙеләр, атайым да был йәһәттән ҡаты тотто. Әммә ысын ир-егет ниндәй булырға тейеш, тигәндә аныҡ ҡына бер үрнәк булырҙай кешене атап әйтә алмайым. Лицей-интернатта ла уҡытыусылар араһында ҡатын-ҡыҙҙар күберәк, тәрбиәселәребеҙ барыһы ла ҡатын-ҡыҙҙар. Йәшәйеш хәүефһеҙлеге нигеҙҙәре һәм физик культура буйынса уҡытыусыларҙың ғына беҙҙә ир-егеттәргә хас ихтыяр көсөн тәрбиәләргә тырышыуын айырып әйтә алам.

**Илһам:** Мин был турала уйланғаным юҡ, сөнки атай тәрбиәһе күреп үҫтем. Атайым мине бөтә эшкә: утын ярырға, мунса яғырҙар ял көндәребеҙҙе файҙалы итеп үткәреү тураһында хәстәрлек күрә, хатта ҡайҙандыр төҫлө принтер алып, беҙгә төрлө йәбештергестәр сығарып бирәләр ине, буш бүлмәлә йыйылып, документаль һәм инглиз телендә кинолар ҡарай торғайныҡ. Бәләкәй класс уҡыусылары өлкәндәргә шундай ихтирам менән ҡараныҡ, уларҙы тыңлап ҡына йөрөй торғайныҡ. Бына шундай йылы хәтирәләр менән һаҡланып ҡаласаҡ беҙгә был белем усағы.

**Фаил:** Ғәҙәттә, мәктәпте тамамлағандан һуң кешеләр араһында бәйләнештәр өҙөлә. Ә беҙ бында атай-әсәйҙәребеҙгә ҡарағанда бергә уҡыған иптәштәребеҙҙе йышыраҡ күргәнгәме, берберебеҙҙе бик яҡындан беләбеҙ, бер ғаилә кеүек йәшәйбеҙ һәм дуҫлығыбыҙҙы ла һаҡлап ҡалабыҙ.

**Һеҙҙә ҡыҙҙар һәм егеттәр айырым уҡытыла бит инде. Ысын ҡатын-ҡыҙ һәм ир-егет тәрбиәһе етәме?**

**Лиана:** Беҙ бәләкәй саҡта ауылда ла урамға сығып, күмәк уйындар уйнай торғайныҡ, ә хәҙер урамға сығып ҡараһаң, бөтәһе лә эскәмйәләрҙә телефон тотоп ултыра. Ҡайсаҡ хатта йорт алды ихатаһы ла буш була. Беҙҙең ҡыҙҙар корпусында ошолар тураһында йыш ҡына һөйләшеп ултырабыҙ былай. Педагогтар һәм тәрбиәселәр араһында ҡатын-ҡыҙҙар күберәк булыуы был йәһәттән беҙгә яҡшыраҡ та хатта.

**Йәштәргә нимә тураһында әйтһәң дә, бер белгән һүҙҙәре "круто", йәғни "текә". Һеҙҙеңсә нимәләр текә?**

**Рәмил:** Дисциплиналы булыу һәм өлкәндәргә ҡарата ихтирамлы мөнәсәбәт күрһәтеү - текә. Шулай уҡ сәләмәт тормош алып барыу, спорт менән шөғөлләнеү һәм аҡыллы булыуҙы ла ошо һүҙ менән баһаларға була.

**Фаил:** Алдына ниндәйҙер маҡсат ҡуйып, шуға ынтылған һәм бер нәмәгә ҡарамаҫтан алға аҙымдар яһаған, ситкә тайпылмаған кеше тураһында "текә" тип әйтергә мөмкиндер. Өлгәшелгәне менән һәр ваҡыт ҡәнәғәт булмай, гел тағы ла юғарыраҡ үрҙәргә ынтылған кеше булыу яҡшы. Бында аҡса тураһында ғына һүҙ алып бармайбыҙ, ә, мәҫәлән, берәй йәмғиәткә мөһим проектты, йәки яңы идеяны бойомға ашырыуҙа тынғыһыҙлыҡ күрһәтеү хаҡында әйтергә теләйем.

**Илһам:** Минең өсөн Республика инженер лицей-интернаты уҡыусыһы булыу - текә. Бер урында тапанып тормаған кеше булыу ҙа текә. Һәр даим үҙ-үҙең өҫтөндә эшләү һәм үҫешеү - тормошта уңышҡа алып килеүсе юл. Бушты бушҡа уҙғарып йөрөү минең өсөн ситен, 1-2 көн ял итеп алһам да етә.

**Лиана:** Минең өсөн текә кеше - ул тормоштан нимә теләгәнен аңлаған һәм үҙенә оҡшаған эш менән шөғөлләнгән кеше. Шулай уҡ мохтаждарға ярҙам ҡулы һуҙған кеше лә текә.

**Рәмил:** Бына беҙ үҙебеҙҙең күҙаллауҙар менән бүлештек, ә ҡайһы берәүҙәр "текә кеше" образын бөтөнләй башҡа төрлө тасуирлаясаҡ. Улар араһында ҡырынмаған, үҙенең тышҡы ҡиәфәте тураһында борсолмаған, ҡулында тәмәке тотҡан, иҫке генә машинала тирә-яҡтағыларға ҡамасаулап, музыка аҡыртып йөрөгән кеше лә популяр булыуы ихтимал. Быны аңлау өсөн урамға күҙ һалыу ҙа етә.

**Тиҫтерҙәрегеҙгә әйтергә теләгән һүҙҙәрегеҙ ниндәй булыр?**

**Лиана:** Ялҡауланмағыҙ, йөрәгегеҙҙе тыңлағыҙ. Ҡайһы саҡта атай-әсәйҙәр балаларынан үҙҙәре өлгәшә алмағанды талап итә бит. Бына шундай саҡта кеше фекеренә лә ҡолаҡ һалып, әммә үҙеңде лә тыңлап, ҡарар ҡабул итегеҙ һәм үҙ юлығыҙҙы һайлауҙан, үҙегеҙҙең ҡарарҙар өсөн яуап биреүҙән ҡурҡмағыҙ.

**Фаил:** Тормошта үҙеңә оҡшаған бер шөғөл, эште эҙләп табығыҙ. Бер урында тапанып тормағыҙ, һәр саҡ ниндәйҙер яңылыҡҡа асыҡ булығыҙ: яңы танышлыҡтарға, эштәргә, үрҙәргә.

**Илһам:** Мин тәү сиратта дисциплина булдырырға кәңәш итәм. Был бик ныҡ ярҙам итәсәк. Шунан тағы нимәләр эшләргә теләгең бар икән, тот та эшлә. Башҡалар нимә уйлар, тип ҡурҡып торма. Бына шул һүҙҙәрҙе миңә 12-13 йәштәр булған саҡта әйтеүсе табылмаған, мин ул саҡта ғәләмәт күп төрлө идеялар менән янып йөрөнөм, әммә башҡаларҙан ояла торғайным.

**Рәмил:** "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!" Минең кумирым әйтмешләй: "Үҙ-үҙеңде таҡатыу - ул үҙеңде танып белеү", тәү сиратта үҙеңде, теләктәреңде аңларға кәрәк. Һәм нисек кенә ауыр булмаһын, үҫешергә!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тиҙҙән 11 йыллыҡ ғүмер биттәрен ябып, яңы тормошҡа аяҡ баҫырға торған йәштәр менән бик күп нәмәләр тураһында фекер алыштыҡ. Улар туған телде белеүҙең мөһимлеге тураһында ла, тәрбиә-тәртип хаҡында ла, үҙҙәре кеүек үк үҫешкә һәм яҡты киләсәккә ынтылмаған тиҫтерҙәренең асылы тураһында ла асыҡтан-асыҡ һөйләнеләр. Был әңгәмәне уҡып та аңлағанһығыҙҙыр, Республика инженер лицей-интернатында ниндәй маҡсатлы һәм фекерле, уңған балалар тәрбиәләнә. Әйткәндәй, быйылғы уҡыу йылында бында барлығы 530 уҡыусы белем ала һәм һәр береһенең тиҫтерҙәренә үрнәк күрһәтерлек уңыштары бар. Ә инде был һөйләшеүҙе ослап, әңгәмәселәремдең шундай һүҙҙәрен килтерәм: "Барыбыҙ ҙа яҡшы өлгәшәбеҙ, киләсәктә барыбыҙ ҙа яҡшы белем алып сығасаҡ һәм төшөп ҡалған кешеләрҙән булмаясаҡбыҙ. Һәм шундай кешеләрҙе лицей осоронан дуҫлыҡ берләштерәсәк", - тине улар. Бына шундай юғарыға ҡарап маҡсаттар ҡуйған һәм бер-береһенә терәк булып үҫешкән йәш быуынға ҡанаттар ҡуя Республика инженер лицей-интернаты.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# КИТАП УҠЫЙЫҠ!

Минән "Китап уҡырға яратаһыңмы?" тип һораһалар, уға бер һүҙ менән генә яуап бирәм: "Эйе!" Беренсе кластан, хәреф таный башлағандан алып, мин китаптан айырылманым. Ул саҡта айырыуса әкиәт китаптарын эҙләп уҡыным. Ғөмүмән, ҡулға эләккән китапты һәр саҡ йотлоғоп уҡый торғайным, хатта ҡасып-боҫоп...

Тылсымлы донъя миңә күпме шатлыҡ, ҡыуаныс бүләк итте, быны һүҙҙәр менән генә аңлатыу мөмкин түгел, ул кисерештәрҙе бер ниндәй аҡса менән һатып алып та булмай. Бала саҡ китаптары бүләк иткән ҡыуаныс-шатлыҡ, күңел рәхәтлеге әлегә тиклем минең күңелдә.

Ҡайҙан әҙәбиәткә бындай мөхәббәт? Берәү ҙә миңә, һин китап уҡы, тип әйтмәне. Был күңел талабы булғандыр, моғайын. Унан, әлбиттә, атай-әсәй - һинең өсөн иң беренсе үрнәк, ә минең атай-әсәй уҡытыусылар ине, уларҙың китаптан айырылғаны ла булманы. Китаплы ғаиләлә үҫтем. Мин бәләкәй саҡта әсәйем башланғыс класты уҡытты. Дәрескә әҙерләнгән мәлендә (мин әле хәреф тә танымаған бәләкәй бала) шиғырҙар уҡығанын ишетәм дә, шуларҙы ятлап ала торғайным.

Китап асҡан донъя минең күңелемде үҫтерҙе - ул планетаның ҡайһы ғына мөйөшөнә алып бармай ҙа, кемдәр менән генә осраштырмай! Ниндәй генә сәйәхәтселәр менән юлға сыҡмайбыҙ ҙа, ниндәй генә ауырлыҡтар аша үтмәйбеҙ! Шуны ла әйтергә кәрәк, мажаралы сәйәхәт тематикаһы Америка, көнбайыш әҙәбиәтендә ныҡ үҫеш алған. Уларҙы ла ҡыҙыҡһынып уҡығаным хәтерҙә.

Сәләмәт тормош алып барыу тураһында хәҙер күп һөйләйҙәр, яҙалар. Тән сәләмәтлеге бик тә мөһим. Ләкин йән сәләмәтлеге һағында китап тороуын бер ҡасан да онторға хаҡыбыҙ юҡ. Мейенең үҫешендә, фантазия байыуында, һүҙ байлығы, тимәк, күңел хазинаһын булдырыуҙа уның роле баһалап бөткөһөҙ. Иң мөһиме, китап һине ижадсы итеп күтәрә, бер ниндәй ҙә технология китаптың ошо бурысын камил атҡара алмай.

Китаптар буйынса йәнһүрәттәр, фильмдар даими төшөрөлә. Хатта ҡабат-ҡабат төшөрәләр. Улар популяр булып китә. Ләкин был продукция - кемдеңдер ижады, һинеке түгел. Һинең ролең бик түбән: нимә тәҡдим ителә шуны ҡарарға, шуны ҡабул итергә генә тейешһең. Эйе, был осраҡта һин бары - пассив күҙәтеүсе һәм ризалашыусы.

Ә китап уҡыған саҡта был хәл ҡырҡа үҙгәрә. Китап уҡып, нисә кеше ғүмерен йәшәйһең дә, ниндәй генә тетрәнеүҙәр, йәки ҡыуаныстар кисермәйһең. Һин унда үҙең төп герой! Эйе-эйе, сөнки сюжеттарға бәйле башында фильмды үҙең тыуҙыраһың бит, һин уның режиссеры, хатта актеры ла үҙең. Ундағы персонаждарҙы нисек күрергә теләйһең, шулай яһайһың-булдыраһың. Китап тап һинең үҙеңдең фантазияңды эшкә егеүҙе һорай, ул һинең көсөңә, мөмкинлегеңә ышана, уны таный. Әүҙем тормош позицияһына юл шулайыраҡ башлана түгелме?

Бөйөк француз фәйләсуфы Монтень: "Кешегә тормошта өс төрлө аралашыу кәрәк: мөхәббәт, дуҫлыҡ һәм китап уҡыу", - тигән. Был төшөнсәләр тәбиғәте буйынса бер-береһенә яҡын тора, яратҡан китап һәр саҡ тоғро дуҫ булып ҡала. Ысын әҙәбиәт дуҫлыҡты ла, мөхәббәтте лә аңларға ярҙам итә.

Балаға "Уҡы!" тип әйтеп кенә әҙәбиәткә һөйөү тәрбиәләп булмай. Ләкин ата-әсәнең күңелендә китапҡа булған һөйөү бар икән, ул ошо осҡондо бала йөрәгенә мотлаҡ ҡундыра ала. Бында инде ваҡытты йәлләмәҫкә һәм фантазияны эшкә егергә генә кәрәк. Хатта ҡай саҡ китап персонаждарын ролдәргә бүлеп алып, бергә уйнап алырға ла кәрәктер. Сөнки алда әйткәнемсә, әҙәби әҫәрҙе уҡыусы - ул үҙе режиссер, үҙе актер һәм иң төп герой. Баланы ижадсы рухлы, үҙаллы фекер йөрөтә белгән, төплө ҡарашлы шәхес итеп тәрбиәләйбеҙ тибеҙ икән, китаптың мөмкинлегенә иғтибар итергә һәм уны ҡулдан ысҡындырмаҫҡа кәрәк.

Әйткәндәй, китап тураһындағы хаҡ һүҙ шул уҡ ваҡытлы баҫма тип йөрөтөлгән, үҙебеҙҙең тыуған телдә сыҡҡан гәзит-журналдарыбыҙға, "Киске Өфө" гәзитенә лә ҡағыла икәнен онотмайыҡ. Әйҙәгеҙ, уҡыйыҡ!

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# МӨҒЖИЗӘЛЕ ИТӘЙЕК КӨНӨБӨҘҘӨ...

**Бөгөнгө заманда тыуған көн, туй байрамдарын, сығарылыш кисәләрен һәм башҡа тантаналы сараларҙы алып барыусыһыҙ, йырсы-бейеүсеһеҙ күҙ алдына килтереүе ауыр. Һәр кем байрам күңелле үтһен, йыйылған халыҡтың күңеле булһын өсөн тырыша. Ләкин бөтә уйындар ҙа ятланып бөтөп, ҡыҙығы ҡалмаһа, байрамды концертҡа әйләндереп, бер йырсыға ҡарап ултырғы килмәһә, ни эшләргә? Әлбиттә, сараһын табырға булалыр. Белеүебеҙсә, кемдәрҙер ошондай кисәләргә Шишмә районы Әлкә ауылында йәшәүсе фокусник-иллюзионист Шамил Азамат улы ВӘЛИЕВты саҡыра икән. Яңы йылға аяҡ баҫырға торғанда тирә-яғында мөғжизә тыуҙырыусы, тылсымға ышанырға ярҙам итеүсе егет менән бәләкәй генә әңгәмә ҡорҙоҡ.**



- Мөғжизә - тормошобоҙҙоң айырылғыһыҙ өлөшө. Ә фокусник-иллюзионистар иһә ысын мөғжизә оҫталары, улар үҙҙәренең һөнәрҙәре менән онотолмаҫ мәлдәр бүләк итә, балаларҙың ғына түгел, ә ололарҙың да күңелен шатлыҡ менән тултыра. Шуға күрә мин үҙемдең һөнәремдән оло кинәнес алам, ихласлыҡ менән шөғөлләнәм.

Мин профессиональ фокусник-иллюзионист. Был өлкәлә 10 йылдан артыҡ эшләйем. Беренсе тапҡыр фокусник-иллюзионистың сығышын бәләкәй сағымда урамда күрҙем. Күрҙем дә, бар донъямды онотоп, хайран ҡалдым, уның оҫта итеп төрлө фокустар күрһәтеүе миңә ныҡ тәьҫир итте һәм үҙемдә ошо өлкәлә күргем килде. Ҡыҙғанысҡа күрә, фокусник-иллюзионист һөнәренә уҡытҡан уҡыу йорттары һәм хатта ниндәйҙер курстар ҙа юҡ. Шуға күрә һәр бер фокусник-иллюзионист үҙ алдына уҡый, тип әйтергә була.

Мин дә бөтә донъяға билдәле фокусник-иллюзионистарҙың сығышын ҡат-ҡат ҡараным, ошо теманы яҡтыртҡан китаптар уҡыным, интернетта махсус сайттар буйлап "ҡыҙырҙым" һәм яйлап үҙем дә төрлө фокустар эшләп ҡарай башланым. Әлеге мәлдә минең репертуарҙа үҙем уйлап тапҡан фокустар менән бер рәттән, билдәле классик номерҙар ҙа бар. Сығыштарымда гипноз элементтарын, предметтарҙың юҡҡа сығыуы һәм барлыҡҡа килеүе, бер әйберҙең икенсеһенә әүерелеүе кеүек визуаль фокустарҙы ҡулланам. Төрлө фестиваль, шәхси байрам һәм башҡа төрлө сараларҙа ҡатнашып, ғәм алдында ҡыҙыҡлы һәм үҙенсәлекле тамаша күрһәтәм. Шулай уҡ буш ваҡытымда балалар һәм өлкәндәр өсөн фокус күрһәтеү буйынса оҫталыҡ дәрестәре үткәрәм, үҙем күрһәткән фокустарҙың серҙәре менән уртаҡлашам.

Өр-яңы фокус идеянан башлана, унан мин кәрәкле реквизиттар эшләйем, уны башҡарыу техникаһын өйрәнәм һәм ҡат-ҡат ҡабатлайым. Яңы фокусты кеше иғтибарына алып сыҡҡансы ике көндән алып бер нисә айға тиклем ваҡыт үтә. Оҫталыҡты камиллаштырыу процесы бер ҡасан да туҡтамай. Хатта әллә нисә йылдар дауамында күрһәткән фокустарҙы ла ваҡыты-ваҡыты менән ҡабатлап, шымартып, ҡулымды таһылландырып торам.

Ҡайһы берҙә көтөлмәгән хәлдәр килеп тыуа, әммә был минең һөнәремдең бер өлөшө. Ундай осраҡтарға мин һәр саҡ әҙермен һәм тамашасы аңлап өлгөргәнсе, хатамды төҙәтеп, сығышымды дауам итәм. Әлбиттә, был оҫталыҡ йылдар дауамында практикалау менән формалаша, үҙ өҫтөңдә өҙлөкһөҙ эшләү менән камиллаша.

Мин был һөнәрҙе аңлы рәүештә һайланым, сөнки ул минең ҡыҙыҡһыныуҙарыма һәм һәләтемә тура килгән иң яҡшы өлкә тип уйлайым. Тәүҙә атай-әсәйем минең һайлауымды хупламаны, әммә ваҡыт үтеү менән улар фокустарҙың хобби ғына түгел, ә минең бөтә йәнемде биргән эш икәнен аңланы. Хәҙер уңыштарыма шатланып, миңә дәрт-дарман өҫтәп торалар, күңел төшөп китһә, үҙемә ышаныс өҫтәп ебәрәләр. Бының өсөн ҙур рәхмәт уларға. Яҡындарыңдың таяныс булыуы бик мөһим.

Башҡортостанда фокусник-иллюзионистар күп түгел, әммә беҙҙең социаль селтәрҙә берләшмәбеҙ бар. Шулай уҡ беҙ осрашып торабыҙ, тәжрибә уртаҡлашабыҙ, уй-фекерҙәребеҙ менән бүлешәбеҙ. Бындай осрашыуҙар беҙгә яңы һулыш өҫтәй, бер өлкәлә ҡайнаған кешеләр менән аралашыу ҡыҙыҡлы һәм файҙалы.

Гәзит уҡыусыларҙы етеп килгән Яңы йыл менән ҡотлайым. Барығыҙға ла мөғжизәләргә ышаныуығыҙҙы, теләктәрегеҙҙең ҡабул булыуын һәм, әлбиттә, бөтә байрамдарығыҙ ҙа тылсымлы нурға төрөнөп, ғүмергә иҫтә ҡалырлыҡ булып үтеүен теләйем. Ә беҙ, фокусник-иллюзионистар, бының нәҡ шулай булыуына әҙ генә өлөшөбөҙҙө индереү өсөн тырышасаҡбыҙ. Байрам менән, милләттәштәр!

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# АЛДАШМАЙЫҠ!

Мин Өфө ҡалаһындағы тәүге Яңы йылымды Октябрь проспектындағы "Буратино" магазины урынлашҡан йорттағы бер фатирҙа ҡаршыланым. Унда мине Белорет районы ҡыҙҙары ҡунаҡҡа саҡырғайны. Яңы йылды нисек ҡаршы алһаң, ул шулай үтә, тиҙәр. Ә минең Өфө ҡалаһындағы артабанғы йылдарым ана шул "Буратино" әкиәтендәгесә үтеп китеп бара. Персонаждарының прототиптары ла тап килеп тора хатта. Папа Карло ла, Мальвина ла, эт Артемон да, төлкөбикә Әлисә лә, ата бесәй Базилио ла, театр директоры Карабас-Барабас та, Дуремар ҙа, Джузеппе ла, ташбаҡа Тортилла ла, Пьеро ла, ҡомаҡ Шушера ла миңә тап килә.

Тик үҙемдең Буратинонығы кеүек танауым ғына үҫмәне. Әкиәт буйынса, алдашҡан һайын Буратиноның танауы оҙоная бара бит. Күрәһең, алдаша белмәйемдер, алдашһам да, кешене ышандыра алмайымдыр. Алдаша башлауым була, күҙҙәрем һата ла, кешеләр быны шаяртыу тип ҡабул итә лә ҡуя. **Шуға күрә:**

Әйҙәгеҙ, дуҫтар, Яңы йылды ҡаршылаған төндә лә, артабан йыл буйына ла, танауҙарыбыҙ оҙонаймаһын өсөн ғүмеребеҙ буйына алдашмайыҡ! Алдашҡан осраҡта ла был алдыҡ кешеләрҙең күңелдәрен күтәрерлек шаяртыу, көләмәс, лаҡап ҡына булып ҡалһын, йәмегеҙ?

Белорет ҡыҙҙары менән Яңы йыл кисендә, төнөндә һәм таңында бер-беребеҙгә шиғырҙар уҡыштыҡ. Шуға күрә лә, шул шиғриәт, шул әҙәбиәт тип ғүмерем үтеп бара. **Шуға күрә:**

Әйҙәгеҙ, дуҫтар, бер-беребеҙгә насар, һүгенеү һүҙҙәре әйтешмәй, тик шиғырҙар уҡышып ҡына йәшәйек! Донъя былай ҙа негатив менән лыҡа тулы.

Беҙ ул Яңы йылды шарапһыҙ ғына ҡаршыланыҡ. Юҡ, өҫтәлдә булды шешәләр, тик уларға үрелеүсе генә булманы. **Шуға күрә:**

Әйҙәгеҙ, дуҫтар, Яңы йылды, унан һуң 2025 йылды, артабан ҡалған ғүмерҙе шарапһыҙ үткәрәйек! Юха Йылан төрлө сәбәп-һылтауҙар табып, беҙҙең ауыҙға шул йәшел ағыуҙы һалырға тырышыр ул. Юҡҡа ғынамы ни, үҙенең йылы бит Йыландың. **Шуға күрә:**

Әйҙәгеҙ, дуҫтар, алдашыуһыҙ, шиғырлы һәм айыҡ 2025 йылға беҙҙең менән бергә!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*ЗАУЫҠ*

# УЛДАРЫБЫҘ, ӘЙҘӘ, ДОНЪЯ КӨТҺӨН...

*Фирүзә АБДУЛЛИНА*



## Тыуған тупраҡ

Тағы ла бер улын ерләй ауыл...
...Ул ҡалаға киткән йәш саҡта,
Һирәк-һаяҡ ҡайтып хәл белешкән,
Йән йылытып тыуған усаҡта.

Атай-әсәй иҫән саҡта улар
Йыйылғандыр атай йортонда,
Тыуған йорт һатылғас, оя туҙғас,
Янғандарҙыр һағыш утында...

Тыуған ере өсөн көс түкмәгән,
Хеҙмәт юлын үткән сит ерҙә,
Баш эйергә ҡайтҡаны булғанмы
Атай-әсәй ятҡан ҡәбергә?

Балалары барҙыр... Беләләрме
Шәжәрәһен, нәҫел-ырыуын?
...Ҡайта улдар, ҡыҙҙар тыуған ергә,
Ситтә сарыф иткәс ҡарыуын.

Оҙатырлыҡ яҡындары бармы,
Ҡәбер ҡаҙыр кеше булырмы?
Берәйһенең генә, уны иҫләп,
Күҙҙәренә йәштәр тулырмы?

Кемдәр генә уны белә икән?
Кемдәр тәрбиәләр ҡәберен?
Нишләп һуңғы сиктә аңлайбыҙ беҙ
Тыуып-үҫкән ерҙең ҡәҙерен?

...Үҫеп етер-етмәҫ ҡабаланып,
Ҡалаларға китә балалар,
Һөнәр алып, донъя ҡорор өсөн
Тура ҡарап алға баралар.

Китһәләр ҙә, тамырҙары менән
Улар ошо ергә ереккән,
Хәтирәләр менән ғүмерлеккә
Атай йорто менән береккән.

Китмәй булмай. Ләкин тыуған ерҙе
Онотмағыҙ, зинһар, киткәс тә,
Атай-әсәй, тыуған нигеҙ һеҙҙе
Һағынып көтөр йылдар үткәс тә.

Донъя ҡыуып ғүмер елеп үтә,
Өс көн кеүек кенә был ғүмер,
Өс көн кеүек кенә... Иҫәпләһәң,
Үткән ғүмер - үҙе бер дәүер.

Тыуған ергә оят килтермәгеҙ,
Сығармағыҙ яман атығыҙ,
Иҫән саҡта, хәлле сағығыҙҙа
Изге ғәмәл менән ҡайтығыҙ!

Онотмаһын өсөн ауылдаштар
Сараларын табыр ысын ир,
Хәрәм булмаҫ уға тыуған тупраҡ,
Хәрәм булмаҫ уға ғәзиз ер.

...Тағы ла бер улын ерләй ауылым,
Ҡәберҙәрҙә - ят-ят исемдәр,
- Иҫләйһегеҙме, - тим, - был кешене?
- Иҫләйем , - ти берәү. - Иҫемдә.

Ҡапланмаһын тыуған яҡҡа юлдар,
Онотмаһын атай тупһаһы,
Хәләл булһын ине йәнгә ғәзиз
Тыуған ерҙең ҡара тупрағы.

***

Бер кемдән дә ғәйеп эҙләмәйем,
Бер кемдән дә аңлау көтмәйем,
Бер кемдән дә күңел йыуатырлыҡ
Йылы һүҙгә өмөт итмәйем.

Йылдар үткән һайын тынысыраҡ
Баҫалҡыраҡ күңел торошом,
Тауышланмай үҙ яйына аға
Тәрән йылға төҫлө тормошом.

Шашып шатланмайым юҡ-барға ла,
Иламайым хәҙер тәгәрләп,
Ярһыу атта күптән сапҡаным юҡ,
Рәнйемәйем, кеше ҡәһәрләп.

Бер ҡараштан хәҙер үтә күрәм,
Аңлашыла ярты һүҙҙән дә,
Баш юғалтыр тормош даръялары
Түгел кеүек хәҙер теҙҙән дә.

Ғүмер үткән һайын һирәгерәк
Иҫкә алам йәшлек хистәрен,
Шатланып һәр таңды ҡаршы алам,
Йылмайып оҙатам кистәрен.

Мәңгелеккә килмәгәнбеҙ ергә,
Һәр бер миҙгел - ғәзиз, ҡәҙерле!
Сәләмәтлек бирһен хаҡ Тәғәләм,
Бирһен яҡындарым ҡәҙерен.

Үҙ-үҙемә мин кисерҙем күптән
Йәшлек хаталарын, гонаһын,
Һис теләмәҫ инем белергә лә
Киләсәктә ниҙәр булаһын.

Матур итеп йәшәп үтер инем,
Күпме ғүмер бирер Хоҙайым,
Барыһына сабыр ризалашып,
Йән-тән тыныслығы һорайым...

## Әсә монологы

Мин - әсәймен.
Сәңгелдәктә - балам.
Уянған да миңә һуҙа ҡулын,
Ипләп кенә ҡулдарыма алам:
- Һағынырға өлгөрҙөм дә, улым!

Шатлығынан ауыҙ йырған була,
Күгәрсендәй гөрләй ҡыуанып,
Күңелемә шул саҡ шатлыҡ тула,
Онотолам, уға йыуанып.

- Һин әлегә сабый ғына, балам,
Һис ҡайғың юҡ, донъяң түңәрәк,
Һоҡланаһың һәр бер уйынсыҡҡа,
Һушың китә, күрһәң күбәләк.

Һәр бер сәскә һинең өсөн - асыш,
Һәр бер йәнлек, бөжәк, - мөғжизә,
Тик әсәйең һине һүҙһеҙ аңлай,
Кәйеф-торошоңдо ул һиҙә.

Әсәй ҡосағында донъяң теүәл,
Әсәң һиңә - һөйөү йыһаны,
Ул донъяға һине бүләк иткән,
Һиңә бүләк иткән донъяны.

Һин ашҡынып ошо ергә тыуҙың,
Һин әлегә, балам, бәләкәс,
Тик был донъя - гөл баҡсаһы түгел,
Һин аңларһың быны ҙур үҫкәс.

Аҡ бәхеттәр юрап, һаулыҡ теләп,
Оҙон ғүмер һорап Аллаһтан,
Мин үҫтерәм һине, сабыйғынам...
...Ә еребеҙ батҡан гонаһҡа.

Атыш, һуғыш, үлем, ҡан ҡойош бар,
Ҡорал тотҡан һалдат ҡулдары,
Илен яҡлап яуҙа башын һала
Кемдәрҙендең ғәзиз улдары.

Кемдәрҙендер ғәзиз балалары...
Әсәләре ни хәл түҙәлер?
Бөтә әсәйҙәрҙең уртаҡ ҡайғы -
Һуғыш - бәғерҙәрен өҙәлер.

Һәр бер әсә бәхет өсөн генә
Тыуҙырһа ла ергә балаһын,
Алдан белеп булмай уның ниндәй
Яҙмыш һуҡмағынан бараһын.

Минең ҡулдан килә торған булһа,
Һис булдырмаҫ инем һуғышты!
...Минең ҡартатайым заманында
Немецтарға ҡаршы һуғышты.

Һинең ҡартатайың Афған яуын
Үтеп ҡайтты, алып яралар,
Атайың да бөгөн көнбайышта...
Был донъялар ҡайҙа баралар?

Кемгә нимә етмәй? Бер Ер шарын
Күпме бүлгеләргә, таларға?
Байлығынан шашҡан бәндәләрҙең
Бәйһеҙлектән күҙе аларған.

Ҡомһоҙҙарға беҙҙең ерҙәр кәрәк,
Беҙҙең үҙебеҙҙе ҡол итеп,
Талар өсөн ерем байлыҡтарын,
Кеше ғүмерҙәрен ҡыл итеп.

Ҡылдай ғына кеше ғүмерҙәре,
Түҙә, сыҙай, аҙаҡ өҙөлә,
Шундай ғәҙелһеҙлек ҡылғандарға
Ләғнәт уҡыр Аллаһ үҙе лә!

Ир баланың яҙмышҡайы шундай:
Ил яҙмышы уның иңендә,
Үҫеп еткәс, балам, ил яҡларға
Сиратҡайың етер һинең дә...

Минең ҡартатайым, атайым да
Иҫән йөрөп илгә ҡайтҡандар,
Һинең атайың да имен ҡайтыр!
Әлдә генә ошо өмөт бар...

Имен-аман йөрөп, һау ҡайтһындар!
Бағышлайбыҙ көн дә доғалар,
Ҡорбан салып, аяттар уҡыйбыҙ -
Урап үтһен бер үк ҡазалар.

Байлыҡ өсөн түгел, хаҡлыҡ өсөн
Яуҙа йөрөй беҙҙең ир-аттар,
Ере, һыуы, иле, халҡы өсөн -
Быға дәлил үткән быуаттар.

Бура бурап, иген иккәндә лә
Янда ғына тотҡан ҡоралын,
Йәнен бирһә биргән, башын һалған,
Тик бирмәгән башҡорт Уралын!

Кәрәк түгел беҙгә башҡа ерҙәр,
Үҙҙәренә ҡалһын байлығы,
Йоғонмағыҙ беҙҙең илебеҙгә!
Кемгә кәрәк кеше ҡайғыһы?

...Мин - әсәймен.
Ҡулдарымда - балам.
Бәхет өсөн генә тыуҙырҙым.
Йорт һалһындар, ағас ултыртһындар,
Ә килендәр улдар тыуҙырһын.

Дауамыбыҙ булып үҫһен ине
Ейән-ейәнсәрҙәр берегеп,
Тыуған ерен данлап, телен һаҡлап,
Ғәзиз еребеҙгә ерегеп.

Донъялағы барлыҡ әсәләргә
Оран һалам бөгөн йәш аша:
- Туҡтатайыҡ дәррәү был һуғышты,
Һуғыш - үлем! Түгел... Тамаша!

Улдарыбыҙ, әйҙә, донъя көтһөн,
Хеҙмәт итһен әйҙә халҡына...
Беҙ - әсәйҙәр. Берләшәйек бөгөн
Тереклек һәм йәшәү хаҡына!
Тереклек һәм йәшәү хаҡына!

*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...*

# ТӘБИҒӘТ ҮҘГӘРЕШТӘРЕ...

## кешеләрҙе лә үҙгәртә

**Борон беҙҙең атай-олатайҙарыбыҙ һауа торошон, киләһе миҙгелдең нисек булырын тәбиғәттәге теге йәки был күренештәргә ҡарап билдәләгән. Йәйгә ҡарап - ҡышты, көҙгә ҡарап яҙҙың ниндәй булырын фаразлаған.**



Минең туҡһанды артмаҡлаған өләсәйем бер аҙнанан көндөң һыуытыуын, ямғыр йәки ҡар яуыуын тәнендәге быуындары һыҙлауынан әйтеп ултыра торғайны. "Улым, һарайҙың тәҙрәһенең быялаһы сатнаған, шуны нығытып ҡуй әле. Бер-ике көндән ныҡ һыуыта. Тана еленләгән, төндә быҙаулаһа, туңып ҡуйыр", - тип, яңы ғына урамдан ингән атайымды сығарып ебәрер ине. Телевизор ҡарарға күҙе күрмәгән, радио тыңларға ҡолағы ишетмәгән өләсәйемдең көн торошон белеп ултырыуы ғәжәп күренә ине миңә бәләкәй саҡта. Ысынлап та, уның ҡолағы ҡысыһа - буран була, тубығы һыҙлаһа - көн болотлап, йәйен ямғыр, ә ҡышын ҡар яуа ине. Аяҡ бармаҡтарының ниндәй быуынына ҡарап та бер аҙнанан көн торошон әйтеп ултырҙы. Ҡоштарҙың йылы яҡҡа китеүенә лә ҙур мәғәнә һалды. Ҡасан ҡайтырын да алдан белде. Ағастарҙың япраҡ ярыуына, бөжәктәрҙең, бал ҡорттарының үҙен нисек тотоуына ҡарап та йылдың, көндөң үҙгәрешен белеп ултырҙы.

Өләсәйемдең мәңгелек донъяға күсеүенә егерме йылдан ашыу инде. Әммә олоғая килә уны көн дә тигәндәй иҫкә алам. Беренсе мартта сәпсек эсерлек күләүек булһа, яҙ иртә һәм йылы килә, тип, өләсәйемде ҡабатлайым. Йәки өләсәйем һымаҡ, ҡолаҡ ҡысыһа, көн боҙола, тип көлдөрәм ейәндәремде. Ысынлап та, тәбиғәттәге, үҙемдең организмдағы үҙгәрештәргә ҡарап, көн, йыл торошон юрауҙарым, ҡырмыҫҡа иләүенең ҙурлығына-бәләкәйлегенә ҡарап, ҡыштың нисек килерен, миҙгелдең нисек булырын уның тәүге айының көндәренә ҡарап фаразлауҙарым да гел дөрөҫкә сыға торғайны.

Әммә һуңғы йылдарҙа тәбиғәт ныҡ үҙгәрҙе. Хас та кешеләр кеүек. Иртәгә, иртәнән һуң нимә булырын бер нисек тә әйтеп булмай. Иғтибар итһәгеҙ, заманса ҡорамалдар ҙа һауа торошон билдәләгәндә ныҡ ҡына яңылыша. Метеорологтар, ҡар яуа, тиһә, көн аяҙ була. Көн һыуыта, тиһәләр, йыш ҡына, киреһенсә, епшетеп, йә буран сыға, йә ямғыр яуа. Йыраҡ китергә түгел, былтыр ҡыш буйы, йәй ҡоро килә, көн аномаль эҫе була, тип күҙалланылар. Ә беҙҙә ике ай буйы ямғыр яуҙы. Баҡсала, юл буйында, газонда үләнде сабып өлгөрөп булманы.

Боронғоларҙың һынамыштары йылдан-йыл тура килмәүенә бер мин генә түгел, ә күптәр шаһит. Бында, әлбиттә, климаттың үҙгәреүе, янғындар, тәбиғәт катаклизмдары ла туранан-тура йоғонто яһай. Һөнәрем метеорология менән бәйле булмаһа ла, был тема, үрҙә әйтеп китеүемсә, өләсәйемә кеүек, миңә лә бик яҡын һәм ошо тәбиғәттәге үҙгәрештәр тураһында фәнни-популяр тапшырыуҙарҙы ҡарайым, төрлө илдең ғалимдарын тыңлайым.

Мәғлүм булыуынса, һуңғы ун йылда ныҡ йылытты. Климаттың йылыныуы һәм тәбиғәт ғәрәсәттәре бер-береһенә ныҡ бәйле. Бында шулай уҡ кеше факторы ла әһәмиәтле роль уйнай. Күмер, газ, нефттең күпләп яныуы, ағас ҡырҡылыуы, ауыл хужалығында яңы технологиялар планетаның йылыныуына килтерә. Ерҙең глобаль йылыныуы мәңгелек боҙҙарҙың иреүенә, диңгеҙ, океан кимәле күтәрелеүенә килтерә. Ул иһә үҙе артынан ташҡынға, һыу күтәрелеүенә, ел-дауыл, ҡойондоң йышайыуына килтерҙе.

Тәбиғәттең үҙгәреүе кешегә лә ныҡ тәьҫир итә. Ҡойон, ел, һыу баҫыуы күҙәтелгән илдәрҙәге кешеләрҙең характеры ла үҙгәрә. Ундайҙарға янъял ҡуптарыу, митингыларға сығыу, һуғыш асыу, ил баҫыу бер ни тормай.

Һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйткем килә: Яңы йыл беҙгә ил-көн тынныслығы килтерһен, ямғырҙар ваҡытында яуып, игендәр ваҡытында урылып, бәрәкәтле, имен, мул тормош килһен!

**Илвира ЗАҺИҘУЛЛИНА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҺӨЛӨК ҠОТҠАРА

■ Дуйсбург-Эссен университеты хеҙмәткәрҙәре һөлөктәрҙең тағы файҙалы яғын асыҡлаған. Мигрень - баштың ярты яғының ауыртыуы менән билдәләнгән нервы ауырыуы донъяла иң киң таралған ауырыуҙарҙың береһе. Гирудотерапевтар раҫлауынса, был проблеманы хәл итеүҙә һөлөктәр ярҙам итә аласаҡ. Үткән быуаттың 80-се йылдарында ҡан ойошоуҙы һәм гангренаны туктатыу өсөн һөлөктәр ҡулланыла башлай. Табиптар әйтеүенсә, тубыҡ быуыны артриты ваҡытында ауыртыуҙы ике айға баҫыу өсөн бер нисә тапҡыр һөлөк сеансы алыу ҙа етә. Хәҙер белгестәр нервы ауырыуҙарын һөлөктәр ярҙамында дауаларға тырыша. Барыһы ла һөлөктәрҙең төкөрөгөндәге матдәләргә бәйле, улар ауыртыуҙан һәм шешеүҙән ҡотҡара.

■ Баш мейеһе музыка тыңлағанда, спорт менән шөғөлләнгәндә, йоҡлағанда һауыға. Бынан тыш, табиптар мейе сәләмәтлеген һаҡлау өсөн ноутбук һәм кеҫә телефоны менән һирәгерәк ҡулланырға тәҡдим итә. Баш мейеһе ауырыуҙар хәүефен төрлө факторҙар, мәҫәлән, насар экология, стрестар, аҙ хәрәкәтләнеү, дөрөҫ туҡланмау, техноген көсөргәнештәр тыуҙыра. Улар хәҙерге заман кешеһенең сәләмәтлегенә һәм иң тәү сиратта, баш мейеһенә кире йоғонто яһай, тип билдәләй белгестәр. Уларҙың фекеренсә, мейе ауырыуҙары 2030 йылға йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре һәм онкологияны ла үтеп китәсәк. "Күпселек белмәй ҙә, әммә күп нәмәгә бәйле булыу, экологик хәл, сифатһыҙ аҙыҡ-түлек, даими стресс - былар цивилизацияның кире күренештәре генә түгел, ә инсультҡа, аҡылдан яҙыуға, психик тайпылыштарға килтереүсе факторҙар. Фаст-фуд менән туҡланып, ашҡазанға ғына түгел, аҡыл зәғифлеге хәүефен көсәйтәбеҙ. Музыка кәйефте күтәреп кенә ҡалмай, шулай уҡ ауыр депрессив хәлдән сығарыу һәләтенә эйә. Ошондай уҡ көскә спорт, кино, уңайлы йыһаз эйә", - тип иҫәпләй профессор Алексей Данилов. Профессор әйтеүенсә, бөгөн мейе ауырыуҙарын дауалауҙа сәнғәт һәм мәҙәниәт ярҙамға килә. Мәҫәлән, фототерапия, музыкаль терапия, ҡом, урман терапияһы кеүек заманса ысулдар менән баш мейеһе сирҙәрен дауаларға була. "Ноутбукты өйҙә ҡалдырып, смартфонды һүндереп, йәйәү йөрөү энергетик потенциалды 50 процентҡа күтәрергә мөмкинлек бирә. Әммә кешеләр был ябай ғына ҡағиҙәне үтәргә теләмәй", - ти техник фәндәр докторы Александр Тарасов.

■ Австралия ғалимдары раҫлауынса, ҡояштан һаҡлаусы кремдар яман шеш һәм тире яныуҙан ғына түгел, ә тирене ҡартайыуҙан да һаҡлай. Дүрт йыл барған тикшеренеүҙәрҙә 900 кеше ҡатнашҡан, уларҙың бер өлөшө көн һайын ҡояшта ҡыҙынған һәм ҡояштан һаҡлаусы крем менән ҡулланған. Һуңынан заманса ҡоролмалар ярҙамында табиптар тиренең торошон тикшергән. Анализ күрһәтеүенсә, даими рәүештә махсус крем ҡулланыусыларҙа тире ҡартайыуы билдәләре 24 процентҡа түбәнерәк булған. Доктор Грин фекеренсә, ҡояштан һаҡлаусы кремдың медицина тәғәйенләнешенән тыш, косметик файҙаһы ла бар.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БӘХЕТЛЕЛӘР ИСЕМЛЕГЕНДӘ БУЛАЙЫҠ!

**Ҡайҙа ғына сәфәр ҡылһаң да, юл ситтәрендә ағасҡа йә берәй ташҡа эленгән веноктар күҙгә ташлана. Улар ошо урында ғүмерҙәре фажиғәле өҙөлгән кешеләрҙе иҫкә алыу ғына түгел, ә юлсыларға иҫкәртеү, абай булырға саҡырыу булараҡ та ҡабул ителә. Сөнки Рәсәйҙә йыл һайын тиҫтәләрсә мең кеше юл фажиғәһендә һәләк була. Был фажиғәләр кәмеһен өсөн төрлө саралар күрелә, юлдар төҙөкләндерелә, транспорттар камиллаштырыла, ҡағиҙәләрҙе боҙоусыларға яза төрҙәре арттырыла. 2005 йылдан алып ноябрҙең һәр өсөнсө йәкшәмбеһендә бар донъяла юл ҡазаларында һәләк булыусыларҙың хәтер көнө үткәрелә килә.**

Юлдарҙағы һәләкәттәр ни тиклем ҡурҡыныс, үкенесле булмаһын, унан да аянысыраҡ тағы ла бер фажиғә бар. Ул да булһа, тормош тип аталған юлда оло һәләкәткә осрау. Был фажиғә ғүмер башында Аллаһы Тәғәләнең йәннәтенә юл тотҡан инсандың аҙашып, яңылышып, гонаһтарға батып, иманын юғалтып, йәһәннәмгә юлығыуынан ғибәрәт. Булмышына ҡаршы сығып, изге төшөнсәләргә ҡул һуҙыусылар, Аллаһы Тәғәләнең бойороҡтарын үтәмәйенсә, уның тыйыуҙарына ҡолаҡ һалмайынса, иблис ҡотортоуҙарына эйәреүселәр ошо бәхетһеҙлеккә тарый. Раббыңды танымау, кеше йәнен ҡыйыу, фетнә ҡуптарыу, иҫерткес эсемлектәр ҡулланыу, зина ҡылыу, мохтаждарҙың һәм көсһеҙҙәрҙең өлөшөн тартып алыу, ғибәҙәтханаларға, дингә ҡул һуҙыу кеүек гонаһтар ана шул бәләне яҡынайтыусы яман ғәмәлдәр. Ошо эштәрҙә ныҡышыусы әҙәм балаһы был донъянан тәүбәгә килмәйенсә китһә, мәңгелек бәхетенән ҡолаҡ ҡағасаҡ һәм ғазап уттарына ырғытыласаҡ.

Ни өсөн кеше һаман золом һәм аҙғынлыҡ кеүек яманлыҡтарҙы юлдаш итеп, бөйөк фажиғәһенә табан йүнәлә? Аллаһы Тәғәлә әмеренә буйһонмайынса, иблис шикелле тәкәбберләнә, уйланыуҙарға бирелеп, Раббыһының хаҡлығына шәһәҙәт килтерер урында, үҙ нәфсеһе шауҡымына бирелеп, ҡапма-ҡаршы тарафҡа йөҙөн бора. Кеше һаман да үҙенең дәрәжәһе менән маһайып, фирғәүендәр рәтенә баҫа, байлығына баш була алмай, ҡарунды үҙенә пот итеп ала, яманлыҡта уҙышыуҙа әбүйәһил һәм әбүләһәбте уҙҙырырға тырыша, ә аҙғынлыҡта Лут бәйғәмбәр ҡәүеменең танауына сиртә. Ләкин үҙ "кумирҙарының" ғүмер аҙағы хаҡында хәбәрҙәргә ҡолаҡ һалмай, Аллаһы Тәғәләне инҡар итеп, бәйғәмбәрҙәренә ҡаршы сыҡҡан халыҡтарҙың аяныслы яҙмыштарынан ғибрәт алмай. Аллаһы Тәғәлә Изге Ҡөрьәндә: "Бына шулай итеп, Беҙ уларҙың һәммәһен дә гонаһтарына күрә язаға тоттоҡ. Ҡайһыһының түбәһенә (таш яуҙырған) дауыл менән (Лут халҡын), ҡайһыһын ҡот осҡос бер тауыш (Сур борғоһо) тотто (Мәдйән, Сәмуд ҡәүемдәрен), ҡайһыһын ергә йотторҙоҡ (Ҡарунды), ҡайһыһын һыуға батырҙыҡ (Фирғәүен һәм Нух тоҡомдарын). Аллаһ уларға золом килтермәне, улар үҙҙәренә-үҙҙәре золом килтерҙе", - тип әйтә.

Ҡайҙа үткән быуаттар залимдары? Ҡайҙа уларҙың сикһеҙ күренгән ғәйрәттәре? Бер нәмәләре лә ҡалмаған. Ә халыҡ, быуаттар үтһә лә, был кешеләргә Тәфтиләүгә уҡыған шикелле бәддоға уҡый. Ғүмер бер генә, тип, йәшлектәрен ләззәттә үткәргән кешеләр ҡайҙа? Бөгөн уларҙың ҡартлыҡтары бер-бер артлы килгән бәләләр менән тетрәнә, ҡасандыр яндарына булған теҙгенһеҙ мөнәсәбәттәренән алған ләззәттәре лә күңел йылылығы бирмәй, ә киләсәктә ул мөнәсәбәттәр өсөн тағы яуап тотаһы бар әле. Ә ошо гонаһҡа юл асыусы халыҡтар йә юҡҡа сыҡҡан, йә бынабына уларҙы юҡ итәсәк оло һәләкәт алдында тора. Аллаһы Тәғәлә иҫкәртә: башҡаларға һәм үҙҙәренең булмыштарына золом ҡылыусылар был донъяла уҡ кәрәкле язаларын ала. Ә бар ошо әшәкелектәрҙе эшләп тә, һаман именлектә булыусыларҙың хәлен күреп, кеше алданмаһын: уларға тағы ла күберәк гонаһ ҡылып, үҙ хәлдәрен тағы ла нығыраҡ мөшкөлләһендәр өсөн кисектереү генә бирелә. Әлбиттә, тәүбәгә килмәһәләр әгәр.

Юл ҡазаларында һәләк булыусылар хаҡында мәғлүмәттәрҙе беләбеҙ, ләкин ана шул тормош тип аталған оло юлда фажиғәгә тарыусыларҙың һаны бары Аллаһы Тәғәләгә генә мәғлүм. Һандар мөһим дә түгел. Үҙебеҙ Изге китаптарҙа, бәйғәмбәрҙәр, әүлиәләр, аҡыл эйәләре ауыҙынан әйтелгән иҫкәртеүҙәргә ҡолаҡ һалдыҡмы, көндәлек тормошобоҙҙа уларҙы ҡулландыҡмы, тирә-йүндә барған ваҡиғаларҙан фәһем алдыҡмы, ошо бөйөк юл фажиғәһенә тарыуҙан ҡурсалаған аҙым эшләнекме? Кешенең физик фажиғәһе уның рухи фажиғәһе янында бер ни ҙә түгел. Бары Раббыһына итәғәт итеп, ләззәттәргә алданмай, иблис ҡотортоуҙарын һәм нәфсеһен ауыҙыҡлап, ауыр, шул уҡ ваҡытта хәкиҡәткә илткән юлды һайлаусылар ғына ҡотолоу таба. Фани һәм баҡый донъяла бәхет ҡаҙанғандар исемлегенә эләгә. Шундайҙар рәтенә ашығайыҡ.

**Мораҙым АЙСЫУАҠОВ.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# САБЫР БУЛАЙЫҠ!

**Ошо көндәрҙә рухымды күтәреп ебәргән бер хәл булды. Отпускымдың тәүге көнөндә үк диспансерлаштырыу үтергә уйланым.**

Сират ҙур ине, әлбиттә. Элеккесә, кеше күп. Әммә тәүҙә үк иғтибарға шул салынды: барыһы ла сабыр ғына үҙ сиратын көтә. Бер кем дә үҙенең өҫтөнлөгән, "текәлеген" күрһәтергә теләп, кеше алдынан үтергә маташмай. Әлләшундайҙарҙың булмауы сиратты кешелекле иттемелер инде. Бер-береһенең кейемен сисергә, кейергә, кемдең кем артынан тороуын табырға ярҙам итте, үҙ аяғынан сисеп, сыҡҡас бирерһең, тип, бахиллаҙарын бирҙе, сумкаларын һаҡлап торҙо...

Аптырап ҡуйҙым. Быға тиклем ошондай сираттарҙа врачтарҙан башлап барыһын да әрләй торғайнылар. Был юлы ундай күренеш булманы. Һыу буйы сиратты ла, белгестәр етешмәүен дә, анализға пробирка етмәүен дә - барыһын да аңлап ҡабул иттеләр. Нисектер, кешеләр тупланып, йыйнаҡланып ҡалған һымаҡ тойолдо. Ике көн бергә диспансерлаштырыу үткән таныш булмағандар дуҫлашып айырылышты хатта. Анализдар әҙер булғас, бер аҙнанан врачҡа килгәндә бер-береһенә сират алыусылар ҙа булды.

Ошо матур күренештең сәбәбе ниҙә? Сабырлыҡта, әлбиттә. Үҙең бер нәмәне лә үҙгәртә алмаған ваҡытта сабыр булырға кәрәк шул.

Кәйеф күтәрелеп ҡайтты. Ә кәйефтең күтәренке булыуы һаулыҡҡа ыңғай йоғонто яһай. Шуға күрә анализдар ҙа, сәләмәтлек торошо ла яҡшы булыр, ышанам. Сабыр һәм тыныс булайыҡ!

БЫЛ ҠЫҘЫҠЛЫ

# УЛАР - ЙЫРТҠЫС ЙӘН ЭЙӘҺЕ



**Йыландар Ер шарының бөтөн урындарында ла тип әйтерлек йәшәй. Тик улар Антарктида, Яңы Зеландия, Исландия, Ирландия һәм Атлантик океандың ҡайһы бер утрауҙарында ғына юҡ.**

- Бөтөн йыландар за йыртҡыс йән эйәһе иҫәпләнә.
- Үҙҙәре өсөн уңайһыҙ шарттарҙа улар йоҡоға тала.
- Йыландарҙың тән төҙөлөшө, бигерәк тә баш һөйәктәре төҙөлөшө бик ҡыҙыҡлы. Әйтерһең дә, уларҙың баш һөйәген талантлы инженер-конструктор ижад иткән, тиерһең. Йыландар, анатомик үҙенсәлектәренә ҡарамаҫтан, үҙҙәренән әллә күпмегә ҙурыраҡ ҡорбанын йота ала!
- Иң ағыулы йылан - Австралияла йәшәүсе Маккоя тайпаны. Уларҙың береһе генә лә 100 кешене сағып үлтерә ала!
- Иң йылғыр йылан - ҡара мамба. Ул тиҙлеген сәғәтенә 16 км-ға еткерә ала!
- 250 төрҙәге ағыулы йылан бер сағыуҙа кешене үлтерә ала.
- Йыландар икегә ярылған телдәре менән еҫ тоя.

**✓ Ғилем - бәләкәйҙән бына нимә кәрәк хәҙер кешегә. Даими уҡырға кәрәк. Барлыҡ ҙур ғалимдар башҡаларҙы ғына өйрәтеп ҡалмаған, ә ғүмер буйы үҙҙәре лә уҡыған. Уҡыуҙан туҡтаһаң - уҡыта ла алмаясаҡһың.**



ЫШАНҺАҢ - ЫШАН...

# ҺӘР ЙЫЛДА ЛА...

## уяу булыу кәрәк!



**Киләһе 2025 йылдың символы - Йәшел Ағас Йылан йылы. Күп кеше йыланды күреү менән ытырғанып китә, ләкин Көнсығыш йондоҙнамәһе буйынса йылан бик ихтирамлы йән эйәһе, ул аҡыллы, һығылмалы һәм бер үк ваҡытта хәйләкәр. Тап ошо сифаттары менән ул үҙгәрештәргә тиҙ өйрәнә һәм яраҡлаша ала. Йыландар тыныс күренһә лә, үҙҙәренә хәүеф янағанда дошманына ҡаршы тора алырға һәләтле.**

Был йән эйәләре маҡсаттарына ынтылышлы һәм шул уҡ ваҡытта сабыр: ул, ғәҙәттә, ҡарар ҡабул итергә ашыҡмай; ошо сифаттары уға уңыш ҡазанырға ярҙам итә лә инде. "Йылан йылы нигеҙендә шуға ла аҡыл менән уйлап һәм үлсәнгән аҙымдар менән эш итеү хуплана, - ти йондоҙнамә белгестәре. - Йылан йылын ҡаршылағанда шау-шыулы компанияларҙан ҡасырға һәм был кисте өйөгөҙҙә, яҡындарығыҙ һәм туғандарығыҙ менән булырға тырышығыҙ". Яңы йыл кисендә йәшелдең бөтөн сағылыштары төҫөндәге (тәбиғәт төҫтәрендәге ылыҫ, зөбәржәт таш, малахит һ.б.), көрән, аҡһыл көрән, аҡ, һары, көмөш йә алтын төҫөндәге кейем кейеү хуплана.

Яңы йыл Көнсығыш календары билдәләренә ниҙәр вәғәҙә итә? Астрологтар фаразлауынса, Йылан йылында Һыйыр (Үгеҙ) менән Тауыҡ (Әтәс) үҙҙәрен яҡшы һәм уңышлы тоясаҡ, ә бына Ҡабан йылында тыуғандарға уңышлы булыр өсөн бер аҙ тырышырға тура килер. Хәйер, башлайыҡ әле баштан:

***Сысҡан*** йылы тыуғандар өсөн йыл тотороҡлолоҡ вәғәҙә итә. Йондоҙҙар был билдәгә карьера һәм финанс өлкәһендә уңыш юрай. Тырыш хеҙмәт бушҡа китмәҫ: Сысҡандар түрәләр һәм йоғонтоло кешеләр хуплауына лайыҡ булыр. Финанс өлкәһендә уңыш ҡаҙаныу өсөн шулай ҙа һаҡ һәм уяу булыу мотлаҡ. Йыл яңы танышлыҡтар һәм мөнәсәбәттәр өсөн уңай килә.

***Һыйыр*** өсөн йыл бик уңай килә, күп мөмкинлектәр асыла. Эш буйынса уңышлы хеҙмәттәшлек яңы эш һәм проекттарға юл ярыр, мул килем килтерер. Эш буйынса ниәттәрегеҙ һәм пландарығыҙ өсөн бик тә ыңғай йыл. Карьера һәм бизнесығыҙ сәскә атыр, тик быны өсөн баҫалҡылыҡ, сабырлыҡ, уңай мөмкинлектән файҙалана белеүегеҙ шарт.

***Барыҫ*** билдәләре өсөн был йылда һәйбәт мөмкинлектәрҙең ҡыйынлыҡтар менән аралашып килеү ихтималлығы бар. 2025 йылда Барыҫтар шәхси мөнәсәбәттәрҙә ҡатмарлыҡтар менән осрашыр, уның ҡарауы, карьера һәм финанс өлкәһендә уларға уңыштар вәғәҙәләнә. Эштә һәм, ғөмүмән, кешеләр менән мөнәсәбәттәрҙә бәхәс һәм конфликттарҙан ситтә ҡалырға тырышығыҙ, шул саҡ бөтәһе лә һеҙҙең файҙаға булыр. Ихласлыҡ, асыҡ күңеллелек һәм намыҫлы мөнәсәбәтегеҙ кешеләр менән гармонияла булырға ярҙам итәсәк.

***Ҡуяндарҙы*** ыңғай үҙгәрештәр һәм яңырыу көтә. Айырыуса эштә әүҙемлек һәм тырышлыҡ күренмәй ҡалмаясаҡ: етәксе түрәләрегеҙ быны лайыҡлы баһалар. Бигерәк тә ҙур предприятиела эшләгәндәрҙә үҫеш баҫҡысына үрләү, эш хаҡы артыу көйөк ҡыуаныстар "һағалай". Шулай ҙа донъяғыҙҙы онотоп, иркенләп китеү ҙә килешмәҫ, абай булығыҙ, сығымдарығыҙҙы иҫәптә тотоғоҙ. Ғаилә мөнәсәбәттәрегеҙ нығыныр.

***Лыу*** йылғыларҙы тотороҡлолоҡ һөйөндөрөр, сөнки йыл баштарында булыуы ихтимал ҡатмарлыҡтар тиҙ хәл ителер, һеҙгә зыяны теймәҫ. Шулай ҙа сәләмәтлеккә ҡағылышлы ҡайһы бер мәсьәләләр буйынса ваҡытында сара күреүегеҙ хәйерлерәк. Эшегеҙ буйынса үҫешкә өлгәшеү өсөн күп көс һалырға тура килер; үҙгәрештәр булып алыр, ахыр сиктә, барыһы ла яҡшы һөҙөмтәгә килтерер. Мөхәббәттә һәм ғаиләлә фәҡәт һәйбәт мөмкинлектәр көтә.

***Йыландарҙы*** үҙ йылдарында ҡатмарлыҡтар көткәндәй, ләкин бик борсолоп та китмәгеҙ: һеҙҙе улар ҡурҡытмай һәм бәхетле йондоҙ йоғонтоһонда карьерағыҙ үҫер, финансығыҙ артыр. Әлеге ҡатмарлыҡтар, тигәндән, уларҙы һағыраҡ ҡыланыу һәм оҙайлы маҡсаттарға йөҙ тотоуығыҙ менән йомшарта алырһығыҙ. Яҡындарығыҙға күберәк иғтибар бүлегеҙ. Яңы йылда шәхси тормошоғоҙ һәм мөнәсәбәттәрегеҙҙә тыуып торған мәсьәләләрҙе хәл итергә мөмкинлек бар.

***Йылҡыларҙы*** тотороҡлолоҡ һәм тормоштарының сәскә атыуы көтә. Йыл хеҙмәт баҫҡысына ҡағылышлы уңыштар вәғәҙәләй, был бигерәк тә ижад менән бәйле һөнәр эйәләрен ҡыуандырыр. Ләкин карьерала уңышҡа өлгәшер өсөн өҫтәмә белем алыу йә һөнәр күнекмәләрен камиллаштырыу фарыз. Тотош алғанда, йыл һеҙҙең өсөн ыңғай, тик шәхси тормошоғоҙҙа аңлашылмаусылыҡҡа юл ҡуймаһағыҙ ине.

***Ҡуйҙарҙы*** тыныс йыл көтә. Ләкин тормош бит бер кем өсөн дә шыма ғына бармай. Һеҙҙең дә эш йә һаулыҡ буйынса проблемалар тыуып алыуы бар. Яңы йылда ыңғай йондоҙлоҡ йоғонтоһо килемдәрегеҙ артыуына сәбәп итер, тик был мөмкинлекте ҡулда тотоу кәрәк. Шәхси мөнәсәбәттәрегеҙҙә бөтәһе лә һәйбәт булыр; яңғыҙаҡтарҙы яңы романтик мөнәсәбәттәр көтә.

***Маймылдар*** өсөн йыл бер төрлө генә булып тормаҫ: төрлө уңай мөмкинлектәрҙең ҡаршылыҡтар менән бәрелешеү осраҡтары ихтимал. Һөнәри үҫеш ҡыуаныстары эштә килеп тыуасаҡ күңелһеҙлектәр менән аралашып алыуы бар, ләкин ниндәй мәлдәрҙә лә үҙегеҙҙең принциптарға тоғро ҡалыуығыҙ хәйерле булыр. Уйланған ҡарарҙарға килеүегеҙ килемегеҙҙе арттырыр. Шәхси мөнәсәбәттәрҙә бәхетле мәлдәрегеҙ ҡыйынлыҡтар менән аралашып барыр.

***Тауыҡ (Әтәс)*** йылғыларға Йылан фәҡәт яҡшылыҡтар килтерер, уңай мөмкинлектәргә һәм яҡшы үҙгәрештәрәгә юл асылыр. Хеҙмәт баҫҡысынан ғына түгел, шәхси йәһәттән дә үҫерһегеҙ, проект һәм ниәттәрегеҙ хуплап ҡабул ителер. Яңғыҙаҡтарҙы романтик мөнәсәбәттәр көтә, үҙ ишегеҙҙе табырһығыҙ.

***Эттәр*** өсөн дә 2025 йыл тотороҡло килә. Былтырғы йыл һынауҙары тамамланып, киләсәккә ыңғай перспектива асыла. Һөнәри һәләттәрегеҙ үҫер, карьера мөмкинлеге бар. Шулай ҙа финанс һәм мөхәббәт өлкәләрендә һаҡ булыуығыҙ кәрәк. Яңғыҙаҡтар үҙ ишен табыр.

***Ҡабандар*** өсөн йыл ябай ғына булмаҫ, ахыры, ти йондоҙҙар. Хәйер, ғәҙәти тормоштағыса: ҡыйынлыҡтар һәм ҡаршылыҡтар һәр саҡ һәр кем өсөн дә тыуып тора, юҡҡа сығып, китеп тора. Ҡыуаныслы ваҡиғалар һеҙҙе лә уратып үтмәйәсәк: күңелдәге юшҡынды йыуып ҡына торасаҡ улар. Бары тик эштә, бизнес һәм һөнәри өлкәләрҙә өйҙәнаҡлыҡ, әүҙемлек, һиҙгерлек кәрәк. Айырыуса финанс өлкәһендә һаҡлыҡ талап ителә. Һөҙөмтәлә һеҙҙе уңыш, килем көтә.

**Гөлфиә МӨХӘМӘТШИНА**
**әҙерләне.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Егерме алтынсы хат: "Уҡырға өйрәнегеҙ!"

Беҙ белем, уҡымышлылыҡ, профессиональ оҫталыҡтар кеше яҙмышына билдәле бер йоғонто яһаясаҡ быуатҡа аяҡ баҫабыҙ. Белемһеҙ, әйткәндәй, һәр даим ҡатмарлаша барған, анһат ҡына эшләп һәм файҙа килтереп булмаясаҡ. Сөнки физик эште машиналар, роботтар үҙенә аласаҡ. Хатта иҫәпләүҙәрҙе лә компьютерҙар башҡарасаҡ, шулай уҡ һыҙымдар, иҫәп-хисап, отчеттар, планлаштырыуҙар көйөк эштәрҙе лә башҡарасаҡ. Кеше яңы идеялар тәҡдим итеп, машина уйлай алмаған нәмәләр тураһында уйланып торасаҡ ҡына. Ә быны өсөн кешегә дөйөм интеллигентлыҡ, яңыны ижад итә алыу һәләте, машина һис тә тоя алмаған әхлаҡи яуаплылыҡ кәрәккәндән кәрәгә барасаҡ. Үткән быуаттарҙа ябай булған этика фән дәүерендә сикһеҙ ҡатмарлашасаҡ. Был көн көйөк асыҡ.

Тимәк, кеше иңенә ябай ғына әҙәми зат булма, тигән ауыр һәм ҡатмарлы бурыс һалынасаҡ, ул фән кешеһе генә түгел, ә машиналар һәм роботтар быуатында барған һәр нәмә өсөн әхлаҡи яҡтан яуап бирерлек кеше булырға тейеш. Дөйөм белем биреү киләсәк кешеһен, ижади кешене, барлыҡ яңы нәмәләрҙе барлыҡҡа килтереүсе һәм былар өсөн әхлаҡи яҡтан яуаплылыҡ тойоусы кешене тәрбиәләй ала.

Ғилем - бәләкәйҙән бына нимә кәрәк хәҙер кешегә. Даими уҡырға кәрәк. Барлыҡ ҙур ғалимдар башҡаларҙы ғына өйрәтеп ҡалмаған, ә ғүмер буйы үҙҙәре лә уҡыған. Уҡыуҙан туҡтаһаң - уҡыта ла алмаясаҡһың. Сөнки фән гел үҫешә һәм ҡатмарлаша бара. Шул уҡ ваҡытта белем эстәү өсөн иң ҡулай ваҡыт - ул йәш саҡ икәнен дә хәтерҙән сығармағыҙ. Нәҡ йәш саҡта, бала һәм үҫмер саҡта кешенең аҡылы ныҡ зирәк була. Телдәр өйрәнеүгә (был бик мөһим), математикаға, яңы белем алыуға һәм әхлаҡи үҫеш менән бер тәңгәлдә торған һәм уны өлөшләтә дәртләндергән эстетик үҫешкә һәләтле.

Юҡ-бар нәмәгә, ҡайсаҡ иң ауыр эштән дә былайыраҡ арытҡан "ялға" ваҡытығыҙҙы сарыф итмәҫкә өйрәнегеҙ, асыҡ аныҡығыҙҙы мәғәнәһеҙ һәм маҡсатһыҙ "мәғлүмәт" ағымы менән тултырмағыҙ. Тик йәш саҡта ғына еңел һәм тиҙ үҙләштерә аласаҡ ғилем, уҡыу һәм оҫталыҡ өсөн үҙегеҙҙе һаҡлағыҙ.

Һәм бына ошо минутта мин йәш кешенең тәрән көрһөнөүен ишетәм: беҙҙең йәштәргә ниндәй күңелһеҙ тормош тәҡдим итәһегеҙ! Тик уҡырға! Ә ял итеү, күңел асыу ҡайҙа һуң? Беҙгә хәҙер шатланмаҫҡаламы инде?

Юҡ инде. Оҫталыҡтар һәм белем алыу - ул шул уҡ спорт. Белем алыу беҙ унда ҡыуаныс күрә белмәгәндә генә ауыр. Белем алыуҙы яратырға һәм ял итеү, күңел асыу төрҙәренең дә аҡыллы, нимәгәлер өйрәтә алған, беҙҙә ниндәйҙер һәләттәрҙе үҫтергән, тормошта ҡулланып булғандарын һайларға кәрәк.

Әгәр уҡырға яратмайһыҙ икән? Былай булыуы мөмкин түгел. Тимәк, һеҙ балаға, йәш егеткә, йәш ҡыҙға яңы белем һәм оҫталыҡҡа өйрәнеү килтергән шатлыҡты үҙегеҙ өсөн асмағанһығыҙ.

Бәләкәй балаға күҙ һалығыҙ - ниндәй оло ҡәнәғәтләнеү менән ул аяҡтарына баҫа, һөйләшергә өйрәнә, төрлө механизмдарҙа ҡаҙына (малайҙар), ҡурсаҡтарҙы бөпләй (ҡыҙҙар). Ошо яңы нәмәләрҙе өйрәнгән саҡта кисергән шатлыҡ тойғоһон артабан да дауам итергә тырышығыҙ. Был күп осраҡта һеҙҙең үҙегеҙҙән тора. Уҡырға яратмайым, тип ҡәтғи баш тартмағыҙ! Ә мәктәптә уҡытылған барлыҡ предметтарға яратып ҡарағыҙ. Әгәр башҡа кешеләргә улар оҡшаған икән, нишләп һеҙгә оҡшай алмаһындар, ти! Уҡырлыҡ булған китаптарҙы ғына уҡығыҙ. Тарих һәм әҙәбиәтте өйрәнегеҙ. Интеллигент кеше ошо ике өлкәне яҡшы белергә тейеш. Нәҡ шулар кешелә әхлаҡ һәм зауыҡ тәрбиәләй, тирә-яҡ мөхитте киң, ҡыҙыҡлы, тәжрибә һәм шатлыҡ өләшеүсе итә. Әгәр һеҙгә берәй предметта ниҙер оҡшамай икән, тырышлыҡ һалып, унда ниндәйҙер шатлыҡ сығанағы - яңы белем алыу шатлығын табырға тырышығыҙ.

Уҡырға яратып өйрәнегеҙ!

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



## 30 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 1.10, 1.50 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.30 Х/ф "Варвара-краса, длинная коса". [0+]
8.00 Телеканал "Доброе утро".
10.15 Д/ф Премьера. "Ирония судьбы". 50 лет спустя". [12+]
11.10 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф Премьера. "Кто придумал Новый год?". [0+]
13.25 "Леонид Гайдай - король комедии". [16+]
15.30 Х/ф "Операция "Ы" и другие приключения Шурика". [0+]
17.15, 18.20 Х/ф "Бриллиантовая рука". [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.25 "Что? Где? Когда?" Финал года. [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. Финал. [16+]
23.59 Премьера. Телеспектакль ТСЖ "Лукоморье". [12+]

### РОССИЯ 1

5.25 Х/ф "Сказки Гофмана". [16+]
7.05 Х/ф "Новогодняя жена". [16+]
9.00, 15.30, 20.00 Вести.
9.30 Х/ф "Золотой папа". [16+]
13.15 "Измайловский парк. С наступающим!" Большой юмористический концерт. [16+]
16.00 Х/ф "Последний богатырь: Посланник Тьмы". [6+]
18.00 Х/ф "Конек-Горбунок". [6+]
20.30 Х/ф "По щучьему велению". [6+]
22.40 Т/с "Последний богатырь. Наследие". [6+]
5.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**7.30, 0.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Х/ф "Отряд Таганок". [12+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 Гора новостей. [6+]**
**10.00 Республиканская новогодняя ёлка. [6+]**
**11.00 ТелесетьТамыр. [6+]**
**12.00 Итоги недели (на рус. Яз). [12+]**
**13.00 Дарю песню. [12+]**
**14.00 Новогоднее караоке. [12+]**
**14.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**15.00 Квадратные метры. [12+]**
**15.15 Патриот РФ. [12+]**
**15.30 Простые истории. [12+]**
**16.00, 21.15 Полезные новости. [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Барыс" (Астана). КХЛ.**
**19.00 Тайм-аут. Итоги года. [12+]**
**20.00 Итоги года (на баш. яз.). [12+]**
**22.00 Концерт Загира Исянчурина. [12+]**
**0.45 Башкорт йыры-2023. [12+]**
**3.30 Спектакль "Зимние новогодние приключения". [12+]**
**4.30 Х/ф "Ургала". [12+]**

## 31 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро".
8.40 Х/ф "Золушка". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Х/ф "Девчата". [0+]
12.00 Балет "Щелкунчик". Событие года. Трансляция с исторической сцены Большого театра. [0+]
14.00 Х/ф "Джентльмены удачи". [0+]
15.30 Х/ф "Любовь и голуби". [12+]
17.20 Х/ф "Ирония судьбы, или С легким паром!" Сразу после реставрации. К 50-летию новогодней легенды. [0+]
17.50 Вечерние новости.
18.20 Х/ф "Ирония судьбы, или С легким паром!" [0+]
21.00, 0.00 Новогодняя ночь на Первом. "30 лет вместе". [16+]
23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В. В. Путина.

### РОССИЯ 1

6.00 Х/ф "Конек-Горбунок". [6+]
7.40 Х/ф "Карнавальная ночь". [0+]
9.00, 20.00 Вести.
9.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.40 Х/ф "Москва слезам не верит". [12+]
12.20 Х/ф "Служебный роман". [12+]
15.10 Х/ф "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика". [6+]
16.30 Х/ф "Иван Васильевич меняет профессию". [6+]
18.10 Х/ф "Чебурашка". [6+]
20.30 Песни от всей души. [12+]
23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В.В. Путина.
0.00 Новогодний Голубой огонек-2025.
5.00 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Х/ф "Ургала". [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 Гора новостей: подводим итоги. [6+]**
**10.15 Елкән. [6+]**
**12.15 Сулпылар. [6+]**
**14.15 Дарю песню. [12+]**
**15.15 Х/ф "Еңмеш". [12+]**
**15.30 Новогоднее караоке. [12+]**
**16.15 Х/ф "Ловец ветра". [12+]**
**18.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.30 Бал джигитов-2024. [12+]**
**20.30 Итоги года (на рус. яз.). [12+]**
**22.00 Новогодний Огонёк. [12+]**
**23.45 Новогоднее поздравление Главы Республики Башкортостан Радия Хабирова. [0+]**
**23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В.В. Путина. [0+]**
**0.00 Новогодний Огонёк-2024. [12+]**
**1.30 Концерт "Башкорт йыры-2024". [12+]**
**4.30 Х/ф "Между небом и землей". [12+]**

## 1 ЯНВАРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 "Новогодний календарь". [0+]
6.55 Х/ф "Ирония судьбы, или С легким паром!" [0+]
10.00 Новости.
10.25 Х/ф "Девчата". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Х/ф "Джентльмены удачи". [0+]
13.40, 16.00 Х/ф "Любовь и голуби". [12+]
15.00 Новогодний "Мечталлион". [12+]
16.30 Праздничный новогодний концерт. Трансляция с исторической сцены Большого театра. Дирижёр - Валерий Гергиев. [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Сегодня вечером". [16+]
20.00 "Три аккорда". [16+]
22.30 Музыкальный фестиваль "Голосящий КиВиН-2024". [16+]
1.05 "Легенды "Ретро FM". [16+]
2.35 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.30 Х/ф "Карнавальная ночь". [0+]
6.50 Х/ф "Служебный роман". [12+]
9.30 Х/ф "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика". [6+]
11.00 Х/ф "Иван Васильевич меняет профессию". [6+]
12.35 Х/ф "Одесский пароход". [12+]
14.00, 20.00 Вести.
14.20 Песня года.
15.55 Х/ф "Чебурашка". [6+]
17.50 Х/ф "Чебурашка. Выходной". [6+]
18.00 Х/ф "По щучьему велению". [6+]
20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Х/ф "Холоп-2". [12+]
23.00 Х/ф "Холоп". [12+]
0.50 Большой концерт к 50-летию Юрия Шатунова.
2.45 Т/с "Небеса подождут". [16+]
5.37 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 С Новым 2025 Годом! [12+]**
**7.30 Х/ф "Между небом и землей". [12+]**
**9.45 М/с "Панда и петушок Лука". [6+]**
**10.45 Гора новостей. [6+]**
**11.00 Т/с "Ышан". [12+]**
**12.00 Фильм-сказка "Холод в душе". [6+]**
**13.00 Дарю песню. [12+]**
**14.30, 2.00 Новогоднее караоке. [12+]**
**15.00 Концерт "Башкорт йыры-2024". [12+]**
**18.00 Концерт "Байыҡ-2024". [12+]**
**21.00 Рок-концерт "Дервиш рухы+". [12+]**
**2.30 Х/ф "Кто украл зиму?" [12+]**
**5.30 Тайм-аут. Итоги года. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**

## 2 ЯНВАРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.50, 6.10 Х/ф "Финист-Ясный сокол". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
7.25 Х/ф "Марья-искусница". [0+]
8.50 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
10.15 Х/ф "Морозко". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Кто придумал Новый год?" [0+]
13.25 "Видели видео?" [0+]
14.50 Т/с "Великая". [12+]
16.50 "Я люблю мою страну". [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Михаил Задорнов". [16+]
19.15 Премьера. "Наш Новый год". Праздничный концерт в Кремле. [12+]
21.00 "Время".
21.35 Т/с Премьера. "Арбатские тайны". [16+]
23.30 Т/с Премьера. "Зорро". [18+]
1.00, 2.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.50 Т/с "Мастер и Маргарита". [16+]
7.40 Т/с "Ликвидация". [16+]
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.45 Х/ф "Чебурашка. Выходной". [6+]
11.55 Х/ф "Холоп". [12+]
14.20 Песня года.
17.50 Песни от всей души. [12+]
21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.30, 22.30 Т/с "Артист с большой дороги". [16+]
23.30 Т/с "Бригада". [18+]
3.05 Т/с "Небеса подождут". [16+]
5.49 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**7.30 Х/ф "Кто украл зиму?" [12+]**
**10.00 Фильм-сказка "Умырзая". [6+]**
**10.45 Гора новостей. [6+]**
**11.00 Т/с "Ышан". [12+]**
**12.00 Ете егет. [12+]**
**13.00 Дарю песню. [12+]**
**14.00 "100 имён Башкортостана". [12+]**
**14.30, 22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**15.00 Квадратные метры. [12+]**
**15.15 Патриот РФ. [12+]**
**15.30 Простые истории. [12+]**
**16.00, 21.15 Полезные новости. [12+]**
**16.15 Мама. [12+]**
**16.30, 3.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**17.15 Мегасело. [12+]**
**18.00 Йома. [6+]**
**18.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**19.00 Концерт "Вечные песни Рима Хасанова". [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**22.30 Концерт Юлая Касимова. [12+]**
**0.30 Новогоднее караоке. [12+]**
**1.00 Бишбармаҡ. [12+]**
**2.15 Спектакль "Горка". [12+]**
**4.30 Знакомые-незнакомцы-1. [12+]**

## 3 ЯНВАРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.45, 6.10 Х/ф "Марья-искусница". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
7.20 Х/ф "Огонь, вода и... медные трубы". [0+]
8.50 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
10.15 Спецпроект. "30 лет вместе". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Савелий Крамаров. "Джентльмен удачи. Смешной до слез". [12+]
13.15 Х/ф "Морозко". [0+]
14.50 Т/с "Великая". [12+]
16.50 "Я люблю мою страну". [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Михаил Задорнов". [16+]
19.05 "Фантастика". Следующий уровень. [12+]
21.00 "Время".
21.35 Т/с Премьера. "Арбатские тайны". [16+]
23.30 Т/с Премьера. "Зорро". [18+]
1.05, 1.50 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.50 Т/с "Мастер и Маргарита". [16+]
7.40 Т/с "Ликвидация". [16+]
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.45 Х/ф "Холоп-2". [12+]
14.40, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 "Новая волна". Большой праздничный концерт.
17.50 Песни от всей души. [12+]
21.30, 22.30 Т/с "Артист с большой дороги". [16+]
23.30 Т/с "Бригада". [18+]
3.05 Т/с "Небеса подождут". [16+]
5.49 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**7.30, 18.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**8.00 Тормош. [12+]**
**8.30 Ҡустәнәс. [12+]**
**9.00 Йома. [6+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**10.00 Фильм-сказка "Мир потеряшек". [6+]**
**10.45 Гора новостей. [6+]**
**11.00 Т/с "Ышан". [12+]**
**12.00 Ете егет. [12+]**
**13.00 Дарю песню. [12+]**
**14.00 Золотой фонд Башкирского телевидения. [12+]**
**14.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**15.00 Квадратные метры. [12+]**
**15.15 Патриот РФ. [12+]**
**15.30 Простые истории. [12+]**
**16.00 Полезные новости. [12+]**
**16.15, 4.15 Мама. [12+]**
**16.30 Башкирские каникулы. [12+]**
**17.15 Мегасело. [12+]**
**18.00 Башкорттар. [6+]**
**19.00, 22.00 Юлдаш-хит-2024. [12+]**
**23.30 Новогоднее караоке. [12+]**
**1.00 Бишбармаҡ. [12+]**
**2.15 Спектакль "Гайфи агай, женись давай!" [12+]**
**4.30 Знакомые-незнакомцы-2. [12+]**

## 4 ЯНВАРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 1.00, 1.45 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
7.00 Х/ф "Француз". [12+]
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.15 Спецпроект. "30 лет вместе". [16+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Джуна. Дар как наказание". Полная версия. [12+]
13.25 "Видели видео?" [0+]
14.50 Т/с "Великая". [12+]
16.50 "Я люблю мою страну". [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Народный ледниковый". [0+]
21.00 "Время".
21.35 Т/с Премьера. "Арбатские тайны". [16+]
23.35 Т/с Премьера. "Зорро". [18+]

### РОССИЯ 1

5.50 Т/с "Мастер и Маргарита". [16+]
7.40 Т/с "Ликвидация". [16+]
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.35 Х/ф "Хитровка. Знак четырех". [12+]
14.40, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Парад юмора. [16+]
17.50 Привет, Андрей! [12+]
21.30, 22.30 Т/с "Артист с большой дороги". [16+]
23.30 Т/с "Бригада". [18+]
3.05 Т/с "Небеса подождут". [16+]
5.49 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**7.30, 19.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**8.00 Тормош. [12+]**
**8.30 Ҡустәнәс. [12+]**
**9.00 Башкорттар. [6+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**10.00 Х/ф "Фильм-сказка". [6+]**
**10.45 Гора новостей. [6+]**
**11.00 Т/с "Ышан". [12+]**
**12.00 Ете егет. [12+]**
**13.00 Дарю песню. [12+]**
**14.00 Колесо времени. [12+]**
**15.00 Квадратные метры. [12+]**
**15.15 Патриот РФ. [12+]**
**15.30, 4.15 Простые истории. [12+]**
**16.00, 21.15 Полезные новости. [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Сибирь" (Новосибирск). КХЛ.**
**19.30 Концерт группы Хазина. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Итоги года (на баш. яз.). [12+]**
**23.45 Концерт Иделя Нургалина. [12+]**
**1.45 Бишбармаҡ. [12+]**
**2.30 Спектакль "Лекарство от смерти". [12+]**
**4.45 Знакомые-незнакомцы-3. [12+]**

## 5 ЯНВАРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 1.00, 1.50 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.50 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.35 "Часовой". [12+]
8.05 "Здоровье". [16+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 Спецпроект. "30 лет вместе". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Вольф Мессинг. "Я знал, что вы придете..." [12+]
13.25 "Видели видео?" [0+]
14.50 Т/с "Великая". [12+]
16.50 "Я люблю мою страну". [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Эххх, Разгуляй!" [16+]
21.00 "Время".
21.35 Т/с Премьера. "Арбатские тайны". [16+]
23.35 Т/с Премьера. "Зорро". [18+]

### РОССИЯ 1

5.50 Т/с "Мастер и Маргарита". [16+]
7.40 Т/с "Ликвидация". [16+]
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.35 Х/ф "Серебряные коньки". [16+]
14.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.05 Классная тема!
17.50 Песни от всей души. [12+]
21.30, 22.30 Т/с "Артист с большой дороги". [16+]
23.30 Т/с "Бригада". [18+]
2.25 Т/с "Небеса подождут". [16+]
5.21 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**8.00 Тормош. [12+]**
**8.30 Ҡустәнәс. [12+]**
**9.00 Үткән гүмер. [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**10.00 Фильм-сказка "Камыр батыр". [6+]**
**10.45 Гора новостей. [6+]**
**11.00 Т/с "Ышан". [12+]**
**12.00 Ете егет. [12+]**
**13.00 Дарю песню. [12+]**
**14.00 Автограф. [12+]**
**14.30, 22.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [6+]**
**15.30, 4.15 Простые истории. [12+]**
**16.00 Полезные новости. [12+]**
**16.15 Мама. [12+]**
**16.30, 3.30 Башкирские каникулы. [12+]**
**17.15 Мегасело. [12+]**
**18.00 Концерт Айгуль Асадуллиной. [12+]**
**20.00, 4.45 Д/ф "У слияния трёх рек". [12+]**
**21.30 Итоги года (на рус. яз.). [12+]**
**23.15 Бал джигитов-2024. [12+]**
**1.15 Бишбармаҡ. [12+]**
**2.00 Спектакль "Кадриль". [12+]**
**6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Декабрь - ғинуар (Йомадиәл ахыр - Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 30 (29) дүшәмбе | 7:55 | 9:42 | 13:30 | 15:10 | 16:55 | 18:43 |
| 31 (30) шишәмбе | 7:55 | 9:42 | 13:30 | 15:11 | 16:56 | 18:44 |
| 1 (1) шаршамбы | 7:55 | 9:42 | 13:30 | 15:11 | 16:56 | 18:44 |
| 2 (2) кесе йома | 7:54 | 9:41 | 13:30 | 15:12 | 16:58 | 18:46 |
| 3 (3) йома | 7:54 | 9:41 | 13:30 | 15:13 | 16:59 | 18:47 |
| 4 (4) шәмбе | 7:54 | 9:41 | 13:30 | 15:15 | 17:00 | 18:48 |
| 5 (5) йәкшәмбе | 7:54 | 9:40 | 13:30 | 15:16 | 17:01 | 18:49 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✔ *Әйберҙәр иҫкермәй, ә беҙҙең теләктәр аҙым һайын яңыра.*
*(Марсель Пруст).*



## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**2-8 ғинуар Премьера! "Әкиәт илендә мажаралар"** (В. Коростылев), әкиәт. 12.00 6+
**3-7 ғинуар Премьера! "Әкиәт илендә мажаралар"** (В. Коростылев), әкиәт. 10.30, 13.00 6+
**2 ғинуар "Мин - Марат"** (У. Ғәлиев. А. Абушахманов), провинциаль проза. 16+
**3 ғинуар "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 12+
**4 ғинуар "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+
**5 ғинуар "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 16+
**6 ғинуар "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов), музыкаль комедия. 12+
**7 ғинуар "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 16+
**8 ғинуар Премьера! "Йырланмаған йырым һин"** (В. Исхаҡов), музыкаль мелодрама. 16+
**12 ғинуар "Джут. Һуңғы йәйләү"** (О. Жанайдаров), драма. 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**2 ғинуар "Играем Пушкина: Царевна-лебедь"** (П. Пушкин), әкиәт. 12.00, 14.00 6+
**"Новогодние приключения Длинноуха"** (Л. Исҡужина), әкиәт. 13.00, 15.00 6+
**3 ғинуар Премьера! "Две Бабы-яги"** (Р. Сеф), әкиәт. 10.00, 12.00, 14.00, 16.00 6+
**"Волшебная мельница"** (М. Кәрим), әкиәт. 11.00, 13.00, 15.00 0+
**4 ғинуар "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 10.00, 12.00 0+
**"Зимняя небылица"** (А. Горбунов), әкиәт. 11.00, 13.00, 15.00 0+
**5 ғинуар "Золушка"** (Г. Карнелиссон), тамаша. 10.00, 12.00 0+
**"Новый год наоборот"** (И. Казакова), әкиәт. 11.00, 13.00, 15.00 0+
**"Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия. 18.00 12+
**6 ғинуар "Новогодние приключения Длинноуха"** (Л. Исҡужина), әкиәт. 10.00, 12.00 6+
**7 ғинуар Премьера! "Две Бабы-яги"** (Р. Сеф), әкиәт. 10.00, 12.00 6+
**"У ковчега в восемь"** (У. Хуб), ғаилә өсөн. 10.00, 12.00 6+
**"Яҙмышымдың икенсе бүлеге"** (Н. Саймон), трагикомедия. 18.00 16+
**8 ғинуар "Холодное сердце"** (В. Гауф), әкиәт. 12.00 6+
**"Новогодние приключения Длинноуха"** (Л. Исҡужина), әкиәт. 11.00, 13.00 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**2-3 ғинуар "Приключения белых мышей"** (С. Чураева). 12.00, 15.00, 18.00 0+
**3-10 ғинуар Премьера! "Снеговик и солнышко"** (А. Малахов). Төрлө ваҡытта. 0+
**4-5 ғинуар "Волшебные приключения игрушек"** (С. Алферова, Н. Нижегородцева). 12.00, 15.00, 18.00 0+
**6, 7, 8 ғинуар "Щелкунчик"** (Ю. Ким). 12.00, 15.00, 18.00 0+
**11-12 ғинуар "История одной снежинки"** (В. Аношкин). 12.00, 15.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**2, 3, 4, 5, 6, 7 ғинуар "Главный новогодний утренник Уфы"**, ғаилә өсөн байрам. 12.00, 14.00 0+
Новый год с Владиславом Муртазином. 18.00 6+
**3, 4 ғинуар "Baby-Ёлка"**, ғаилә байрамы. 11.00, 13.00 0+
**7 ғинуар "Рождественский саундтрек.** 18.00 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**4, 6 ғинуар Премьера! "Муха-цокотуха"** (К. Чуковский), музыкаль әкиәт. 13.00 0+
**6 ғинуар "Ҡоҙалар-ҡоҙасалар"** (Х. Латипова, С. Латипов), музыкаль комедия. 12+
**7 ғинуар "Золушка"** (Ш. Перро), әкиәт. 13.000+
**"Метранпаж мажаралары"** (А. Вампилов), трагикомедия. 12+
**8 ғинуар "Волшебная лампа Аладдина"** (Л. Ниғмәтуллина инсц.), әкиәт. 13.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**4, 7 ғинуар Премьера! "Переполох в мире елочных игрушек"**, әкиәт. 12.00 0+
**"Һинән - фатир, минән - ир"** (Н. Ғәйетбайев), комедия-гротеск. 18.00 16+
**5 ғинуар "Карамболи-карамбаба!" - так велит Ягуля-баба"**, әкиәт. 12.00 0+
**"Беҙҙең байлыҡ"** (А. Сәсәнбаев), комедия. 18.00 12+
**6 ғинуар "День рождения кота Леопольда"** (А. Хайт, Б. Савельев), әкиәт. 12.00 0+
**"Тапшырылмаған хаттар"** (С. Асҡарова), мелодрама. 18.00 16+
**7 ғинуар "Доктор"** (М. Икрамова), лирик комедия. 18.00 12+
**8 ғинуар "Бул-буль-буль"ный Новый год или волшебный посох Деда Мороза"**, әкиәт. 12.00 0+
**"Әлдермештән Әлмәндәр"** (Т. Миңнуллин), фантасмагория. 18.00 12+

## БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ЯҢЫ ЙЫЛ МЕНӘН!




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**50-се һандағы сканворд яуаптары.**
**Горизонталь буйынса:** Катод. Катанов. Туған. Алтай. Эркет. Әүелкәй. Арыҫлан. Әкиәт. Елпәҙә. Иваси. Оло. Хөрмә. Ваба. Игәт. Ләғәт. Лапы. Турыҡай. Ҡалым. Рамаҙан. Абевега.
**Вертикаль буйынса:** Амнистия. Айыуханов. Лабиринт. Каса. Умарта. Йәнеш. Катет. Оят. Ҡулаев. Ғәлләмов. Айова. Диван. Эйә. Халыҡ. Көбө. Әләм. Тут. Әйтем.

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**30 декабрь, 2-7 ғинуар "Три богатыря и Соловей-разбойник"** (А. Зарипов инсц.), әкиәт. 12.00 0+
**3 ғинуар Премьера! "Дала буйлап икәү бара"** (Э. Йәнһүҙин), музыкаль комедия. 18.00 12+
**4 ғинуар "Нисек кейәүгә сығырға?"** (Н. Ғәйетбай), комедия. 18.00 12+
**5 ғинуар "Һөйәрҙәргә ҡапҡан"** (И. Йомағолов), комедия. 18.00 12+
**6 ғинуар "Диләфрүҙгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), комедия. 18.00 12+
**7 ғинуар Премьера! "Мөхәббәт һәм күгәрсендәр"** (В. Гуркин), комедия. 18.00 12+

### БР Милли музейы

**3 ғинуар "Ҡурай яһау"**, оҫталыҡ дәресе. 14.00 6+
**4-5 ғинуар "Яңы йыл уйынсығы"**, оҫталыҡ дәресе. 15.00 6+
**6 ғинуар "Урманда ҡышҡы тарихтар"**, интерактив экскурсия. 15.006+
**7 ғинуар ""Яңы йыл шәме"**, оҫталыҡ дәресе. 14.00 6+
**8 ғинуар "Теләктәр беләҙеге"**, оҫталыҡ дәресе. 14.00 6+

МӘҘӘНИ МӨХИТ

# "ЙӘЙ. ҠАЛА. МӨХӘББӘТ"




**Өфөнөң юбилейы айҡанлы төшөрөлгән "Йәй. Ҡала. Мөхәббәт" фильмы февралдә прокатҡа сыға. Был хәҡта ошо көндәрҙә Өфөлә премьера менән таныштырыу сараһында проекттың художество етәксеһе Айнур Асҡаров белдерҙе.**

Өфөләр тормошонан һигеҙ мөхәббәт тарихы һөйөү тойғоһон төрлө яҡтан асып бирә. Был төрлөсә атамалы ҡыҫҡа метражлы фильмдар драма, мелодрама, комедия жанрҙарында төшөрөлгән. Бөтә ғаилә менән ҡарарға мөмкин булған фильмдар төрлө хис-тойғолар уята. Бында көлөргә, үткәндәр тураһында һағышланырға, уйланырға, хыялланырға, һәм, әлбиттә, мөғжизәгә ышанырға ла мөмкин. Барлыҡ фильмдарҙа, тыуған ҡалаға һөйөү темаһынан тыш, күп милләтле Өфөлә халыҡтар дуҫлығы темаһы төп лейтмотив булып яңғырай. "Өс таған", "Өфөнән һөйөү менән", "Йыл ғаиләһе" һәм башҡа фильмдарҙағы кеүек, мин был картинаны үҙем генә эшләмәнем. Ул шуныһы менән үҙенсәлекле. Киноальманахтың һәр тарихын төрлө режиссерҙар - Айрат Абушахманов, Виталий Дудка, Руслан Юлтаев, Айсыуаҡ Йомағолов, Айҙар Аҡманов һәм Руслан Рим улы төшөрҙө. Мин ике фильм төшөрҙөм", - тине Айнур Асҡаров.

Төп ролдәрҙә танылған башҡорт актерҙары Азат Йыһаншин, Рушанна Бабич, Алмас Әмиров, Артур Ҡунаҡбаев, Полина Шабаева, Николай Рихтер, Сәғизулла Байегет, Андрей Ганичев, Илгизә Ғилманова, шулай уҡ Рәсәй артистары Валентина Ляпина, Владимир Гарцунов, Илья Виногорский башҡарҙы.Проекты "Асҡарфильм" киностудияһы һәм "МедиаСтарт" ойошмаһы тормошҡа ашырҙы. Фильм 2023 йылда кинематография өлкәһендәге проекттарға ярҙам итеү өсөн республика Башлығы гранттары конкурсында еңеүсе булды.

# БАҺАЛАУСЫ БУЛАРАҠ...

**Рәмил Ғәйзуллин ҡаҙаҡ композиторы Морат Осҡонбай улы исемендәге халыҡ-ара халыҡ музыка ҡоралдарында башҡарыусылар конкурсында Рәсәй исеменән сығыш яһаны.**

Конкурс 10 декабрҙән 14-нә тиклем Ҡаҙағстандың Аҡтау ҡалаһында үтә. Унда Әзербайжан, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстан, Ҡаҙағстан һәм Рәсәйҙән 125 музыкант ҡатнаша. Кандидаттар үҙҙәренең оҫталығын түбәндәге номинацияларҙа күрһәтте: думбыра, шертер, ҡубыҙ һәм башҡалар. "Был майҙансыҡ - йәштәргә үҙ һәләттәрен күрһәтеү өсөн бик яҡшы мөмкинлек. Барлыҡ ҡатнашыусыларға ла уңыштар, ә жюриға ғәҙел ҡарар ҡабул итеүен теләйем", - тине Ҡаҙағстандың атҡаҙанған эшмәкәре, Абыла Тараҡулы исемендәге оркестрҙың художество етәксеһе, баш дирижеры Рәхәт Мадреев.

Жюри составына Ҡаҙағстандың атҡаҙанған эшмәкәрҙәре, халыҡ-ара конкурстар лауреаттары, мәҙәниәт алдынғылары һәм профессорҙар инде. Рәсәйҙән саҡырылған жюри ағзаһы - Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы, Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы, ҡурайсы, мультиинструменталист һәм Башҡортостан Республикаһының Милли халыҡ инструменттары оркестрына нигеҙ һалыусы Рәмил Ғәйзуллин. "Бындай абруйлы сараның бер өлөшө булыу минең өсөн ҙур хөрмәт. Конкурста ҡатнашҡан йәш музыканттарҙың талантлы илһамландыра һәм мин уның уларҙың ижади юлына этәргес буласағына ышанам", - тине Рәмил Ғәйзуллин.

# ФЕКЕР ӘЙТ ТӘ...

**Өфөнән Артур Иҙелбаев Беренсе канал ойошторған "Советтар Союзы мөхәббәте" фильмына иң яҡшы рецензиялар конкурсының беренсе этабы еңеүселәренең береһе булды. Таҫма 1930 йылдарҙа СССР-ҙың уйлап сығарылған театр һәм кино актрисаһы Галина Коврова тураһында. Уның персонажы Любовь Орлова һәм Валентина Серованың биографияһына нигеҙләнгән.**

"Торатау геопаркы" фән, мәғариф, экология, мәҙәниәт һәм туризм үҙәгенең генераль директоры социаль селтәрҙә фильм тураһында фекере менән уртаҡлашҡан. Иҙелбаев кинонның заман һулышын һәм геройҙарҙың прототиптары тормошон нескә итеп сағылдырыуын билдәләгән. "Был фильмға мине кинйә ҡыҙым алып барҙы. Беҙ һуғыш, совет осоро тураһында фильмдарға даими йөрөйбөҙ. Картинаны ҡарағандан һуң уның менән оҙаҡ ҡына фекер алышып ултырҙыҡ, уға ла бик оҡшаны. Фильм 30-сы йылдар аҙағы - 40-сы йылдар башындағы театр һәм кино йондоҙо Валентина Серова тураһында. Хатта абруйлы баҫмаларҙа донъя күргән рецензияларҙа Галина Ковнованың йыйылма образ булыуы хаҡында яҙалар. Актрисаның биографияһы билдәле - башта сағыу һәм аҙаҡтан бик романтик түгел. Аңлашыла, фильмда уның матур өлөшө генә күрһәтелгән", - тине Артур Иҙелбаев. Билдәле булыуынса, еңеүсе Рәсәй маркетплейсының 100 мең һумлыҡ сертификаты менән бүләкләнгән.

# ЙӘНҺҮРӘТТӘР КӨТӘБЕҘ ИНДЕ...

**"Муха" анимация студияһы "Союзмультфильм" менән хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөнө.**




Республика етәксеһе Радий Хәбиров, Федерация советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе Лилиә Ғүмәрова һәм Рәсәй Дәүләт Думаһының Мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе Ольга Казакова Евразия фәнни-белем биреү үҙәгенең вуз-ара студенттар кампусы базаһында эшләүсе Төбәк анимация кластерының етештереү мөмкинлектәре менән танышты. Кластер составына Өфө сәнғәт училищеһы, "Муха" студияһы һәм Әмир Абдразаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы инә. Производство базаһы белгестәргә практик тәжрибә туплау, ҙур проекттарҙа ҡатнашыу һәм профессиональ эшмәкәрлеккә әҙерләнеү мөмкинлеген бирә.

Кластер мөмкинлектәре менән танышыу сиктәрендә "Петрушка" һәм "Салауат тоҡомдары" йәнһүрәттәре тизерының презентацияһы үтте. Был проекттар буйынса барлыҡ эштәр ҙә Өфөлә башҡарылған. "Муха" анимация студияһы директоры Артур Абдрахманов анимация продукттары булдырыу өсөн дәүләт ярҙамының әһәмиәтен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Һуңынан кластер майҙансығында "Союзмультфильм" киностудияһы менән "Муха" студияһы араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылды. Уларҙың берлектәге эше "Петрушка" тулы метражлы йәнһүрәтен төшөрөүгә йүнәлтеләсәк. Шулай уҡ "Муха" Мәскәүҙә "Союзмультфильм" технопаркында үҙ вәкиллеген аса. "Союзмультфильм" киностудияһының генераль директоры Борис Машковцев, Башҡортостанда анимацияны үҫтереүгә айырыуса иғтибар бүленә, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды.

АҠЫЛ-ҠАҪНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТЫУА БАЙЫҠМА...

## тора байыҡ

Уйлы уйлап торғансы, тәүәккәл эшен бөтөрөр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Әйберҙәр иҫкермәй, ә беҙҙең теләктәр аҙым һайын яңыра.

**(Марсель Пруст).**

Изгеләр һәләк булған урында...яуыздар еңеүҙе тантана итә.

**(Генрих Гейне).**

Тотлоҡҡандар үҙенә ышаныс тыуҙырыусан.

**(Фридрих Ницше).**

Һүҙҙәр Алиһә һымаҡ кейенергә, ҡош һымаҡ осорға тейеш.

**(Тибет халыҡ мәҡәле).**

Шағир - ул дөрөҫтө һөйләүсе алдаҡсы.

**(Жан Кокто).**

Хәҡиҡәт - ваҡыттың ҡыҙы.

**(Авл Геллий).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бөтөн донъяны яулап алып бөткән көндә Александр Македонский бүлмәһенә бикләнеп илаған, тиҙәр. Хәрби начальниктары бөйөк яугирҙың был ҡылығына бик аптыраған. Күпме яу юлы үтеп тә уның илағанын береү ҙә күргәне булмаған. Ҙур ҡурҡыныс алдында ҡалғанда ла, үлем менән күҙмә-күҙ осрашҡанда ла уның йөҙөндә ҡурҡыуҙың, ҡаушап ҡалыуҙың әҫәрен дә күрмәгәндәр. Александр һәр ваҡыт батырлыҡ, ҡаһарманлыҡ өлгөһө булған. Хәҙер, донъяны яулап алып ҡына бөткәс, ни булған һуң Александрға, ни өсөн илай?**

**Хәрби начальниктар, борсолоп, Александр Македонский бикләнгән бүлмәнең ишеген ҡаға һәм:**

**- Һеҙгә ни булды, ни өсөн илайһығыҙ? - тип һораған.**

**Александр шулай тип яуаплаған:**

**- Ошондай ҙур еңеүгә өлгәшкәс, мин үҙемдең еңелгәнемде аңланым. Мин әлеге мәлдә үҙемдә, бөтөн донъяны яулаясаҡмын, тигән мәғәнәһеҙ хыялымды атҡара башлаған урында, юл башында баҫып торам, тип тоям. Быны мин әле генә аңланым. Ә элек аңламағанмын, сөнки мин юлда булғанмын, алда маҡсатым булған. Хәҙер миңә бер ҡайҙа ла барырға, бер нимәне яуларға ла кәрәк түгел. Мин үҙ күңелемдә ҡот оҫҡос бушлыҡ ҡына тоям. Мин еңелдем....**

**...Александр утыҙ өс йәшендә донъя ҡуя. Һуңғы юлға оҙатыу мәлендә бар халыҡ мәйеттең ҡулдары һәленгән көйө бәүелеп барыуын күрә. Бөйөк Александрҙың үҙенең васыяты шулай булған: уның әхирәткә буш ҡулдар менән киткәнен барыһы ла күреүен теләгән..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттен Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 24051

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Ғәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ГАРИПОВА, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
26 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 2305